*Кешегә һайлау хоҡуғы бирелгән: ул тәртипкә буйһона йә буйһонмай, ул ҡыйыулыҡ күрһәтә йә ҡурҡа, ул уйлай йә күнегелгән ғәҙәткә генә буйһона. Шуның өсөн, тыныслыҡты түгел, хәрәкәтте һайла. Алдаҡты түгел, хәҡиҡәтте һайла. Йылмайыуҙы һайла, ҡараңғы йөҙ менән йөрөмә. Дошманлыҡты түгел, мөхәббәтте һайла. Тормошоңда яҙ йылмайған мәлдә эшләү мөмкинлеген һайла.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

23-29 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2009 ЙЫЛ

№21 (335)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Ҡотобоҙ китә бит...





2


### Ҡаҙаҡтарға барҙым...





6


### Дошмандан ҡурҡҡан-ҡәлғә төҙөгән



ә башҡорттарға үндай ҡәлғәләр төҙөүҙең кәрәге булмаған


8-9


### Ауылдаштарым, күршеләрем...



мине артист итте


11


### ТВ программа


14


*ИҒТИБАР: "КИСКЕ ӨФӨ" - БҮЛӘГЕМ"*

# ЙӘ, КЕМДӘР АҠСАҺЫН...

Бөгөн иң күп гәзит уҡыусылар кемдәр, беләһегеҙме? Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ауыл кешеләре. Айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеге табалар. "Бына, баҙарға сығарып ҡаймаҡ, эремсек һаттым да, гәзитегеҙгә яҙыла һалып, квитанцияһын һеҙгә ебәрәм", - тип яҙғайны Әлшәй районынан Сәбилә Латипова. Ауылдағы уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бына шулай рухи аҙыҡтан айырылмау яйын таба. Ҡала кешеләре кеүек, аңды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты.

Нимә әйтергә теләйбеҙме? Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр. Әйҙәгеҙ, ҡушылығыҙ ошо "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына. Йә, кемдәр йәлләмәй 294 һум аҡсаһын? Йә, кем бер тапҡыр ғына бер кило колбаса, йә бер кило кәнфит ашамай тора ала? Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ!

**Әйткәндәй...**

**Акцияға ҡушылып, Өфөнән эшҡыуар Фәниә Йәнбирҙина Бөрйән районында йәшәүсе күп балалы ғаиләләргә, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы генераль директоры Рәйлә Фәсхетдинова Ишембай районында йәшәүсе туғандарына һәм таныштарына, Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәткәре Ришат Йомағолов Ғафури районында йәшәүсе әсәһенә һәм Табын ауылында йәшәүсе еңгәһе Фәриҙә Йомағоловаға, журналист Азат Ярмуллин Йылайыр районында йәшәүсе әсәһенә "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырҙы. Шулай уҡ Әбйәлил районынан Фәтиха Хәкимова ла, шылтыратып, дуҫтарына, хеҙмәттәштәренә тыуған көн уңайынан да, башҡа уңайҙан да "Киске Өфө"нө бүләк итеүҙе ғәҙәткә индереүҙәре тураһында һөйләне. "Сәскә гөлләмәләре матур, әлбиттә, тик ул өс көн ултыра ла һулый, ә бына тыуған көндәр уңайынан был гәзитте бүләк итһәң, ул кеше һиңә ярты йыл буйына рәхмәт уҡыясаҡ", - тине Фәтиха Хәмит ҡыҙы.**



**Шулай итеп, гәзитебеҙ менән дуҫлашырға саҡырабыҙ һәр кемде. Уның һеҙҙе рухлы ла, сәмле лә, ғәмле лә итеренә иманыбыҙ камил. 2009 йылдың икенсе ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына (льготалыһына) 282 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Артабан да бергә йәшәйек, бергә уйлайыҡ, бергә шатланайыҡ!**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# МАТУР ТӘБИҒӘТ, МАТУР ҒАИЛӘЛӘР -

## Хоҙай шулай бүләкләгән Бөрйән ерен

**Иҫ киткес хозур тәбиғәте менән дан тотҡан Бөрйән яҡтарын күпме генә барып күрергә хыялланһам да, бер ҙә генә лә яйы сыҡмағайны. Командировка уңайынан был тарафтарға юл төшкәс, мин тулҡынландырғыс уйтойғолар менән сәфәргә сыҡтым. Барыһынан да бигерәк, Бөрйән тәбиғәтендәге бер күренеш мине ғәжәпләндерҙе лә, һоҡландырҙы ла. Ҡарағусҡыл йәшел төҫтәге ҡарағай энәләре менән асыҡ йәшелһыу төҫтәге ҡайын япраҡтары, әйтерһең дә, ике төҫлө ептән һуғылған аҫалы балаҫ инде! Тәбиғәттәге ошо ярашыу, ошо төҫтәр балҡышы Бөрйән еренең халҡында ла, хеҙмәтендә лә сағылды. Район мәҙәниәт йортонда Ғаилә көнөнә ҡарата уҙғарылған "Ныҡлы ғаилә - ил күрке" тип аталған байрамда ҡул эштәре оҫталарының күргәҙмәһен, 80 йәшен тултырған Яңылбикә инәйҙе, илле йыл бергә ғүмер кисергән ғаилә парҙарын күреп, ошоларға шаһит булдыҡ.**

### Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә

Мәҙәниәт йортоноң фойеһында "Нағыштарға - алғыштар" исемле ҡул эштәре оҫталарының конкурсы күргәҙмәһе ойошторолғайны. Ундағы эштәрҙең күплеге һәм төрлөлөгө! Хайран ҡалырлыҡ! Сатраш сигеү һалынған таҫтамалдар, ҡулъяулыҡтарҙың да ниндәй генә итеп сигелгәне юҡ. Һәр кем үҙ оҫталығына һәм фантазияһына ирек биргән, ә ижад итер өсөн ерлек тә, илһамландырыусы сығанаҡ та етерлек - Бөрйән тәбиғәте һәләтһеҙҙәрҙе лә дәртләндерер. Апрель башында ғына иғлан ителгән конкурсты халыҡтың шул тиклем күтәреп алып, әүҙем ҡатнашыуы бер ни тиклем аптырауға ла һалды. Һәр хәлдә, баҙар иҡтисады шаулап-гөрләп сәскә атҡанда сигеү сигеп ултырыу күптән онотолоп, һандыҡ төбөндә урын ала башлағайны бит инде. Һәм көтмәгәндә бынау ҡәҙәрем хеҙмәт емеше!




**(Дауамы 5-се биттә).**

*РУБРИКА ТӘҠДИМ ИТӘМ: "ҠОТ"*

# ҠОТОБОҘ КИТӘ БИТ...

## телебеҙҙән, донъябыҙҙан, көнитмештән

**Яңыраҡ Сибай ҡалаһында үткән "Сибай һылыуҡайы-2009" конкурсы ваҡытында ҡатнашыусы ҡыҙҙарға "Нимә ул мал ҡото?" тигән һорау бирелгәс, ҡыҙҙар аптырап ҡалды. Ысынлап та, ҡапыл ғына нимә тип яуап бирергә һуң был һорауға? Ҡала ерендә тыуып үҫкән балалар өсөн бигерәк тә сетерекле һорау бит был. Ана шул һорау минең күңелемә инеп ояланы ла, уға яуап эҙләү мәле мине бала сағыма алып ҡайтты...**

Минең тыуған ауылым Хәсән бик хозур ерҙә урынлашҡан. Ике юл сатындағы был ауылды мәғрүр Ирәндек тауҙары, батыр еректәр, һылыу ҡайындар уратып алған. Мин бәләкәй саҡта унда тик инәйҙәр, олатайҙар ғына йәшәй ине. Минең өләсәйем Хәсәнова Зөлхизә Ғаззали ҡыҙы ла ауыл әбейҙәренә хас көләс, еңел күңелле, өлгөр булыр ине, шәл-яулығын артҡа сөйөп бәйләр ҙә балитәкле күлдәге өҫтөнән ҡара бәрхәт кәзекәйен кейеп алып, көлә-йылмая баҫып торор ине - ул шул килеш хәтеремдә ҡалған. Өләсәйем бик ҡотло кеше ине, әйөндә ҡотло ғына булып нур уйнап торор ине, өҫтәлдә гел самауыр шыжлап ултырыр, беҙгә, балаларға, өҫтәл тулы һый-хөрмәт, тәм-том ап-аҡ таҫтамал менән ябып ҡуйылыр ине. Йыуаса бешерһә - бер табаҡ итеп бешерер, һөт айыртһа - ҡаймағы субырлап ағып туҫтаҡҡа һыймаҫ, сәйҙе лә ҡуйы итеп, тәмле генә итеп эсер ине өләс. Ә урындыҡ аҫты - бер хазина булһа, келәте - икенсе хазина. Урындыҡ аҫтындағы байлы-ыҡ! Сынаяҡтар, сәйнүктәр, тауаҙар, беләҙектәр, хаттар, фотолар, һабын-хушбуйҙары һәм башҡалар, һәм башҡалар. Өләсәйем бер яҡҡа китһә - беҙ шул урындыҡ аҫтын ҡутарыр инек, уларҙы күпме генә ҡутарып ҡараһаҡ та бер ҙә ялҡытмай ине! Әле өләсәйемдең 2 көмөш алҡаһын, 1 балдағын, 2 беләҙеген ҡомарткы итеп һаҡлайым.

Өләсәйем әбей булһа ла бер ҙә әрпеш итеп кейенеп йөрөмәне. Балитәкле күлдәктәре, аллы-гөллө яулыҡтары күп ине. Беҙ шуларҙы кейә инек тә, сиған булып бейей инек. Өләс: "Һай, бынауҙарҙы", - тип ихлас көләр ине. Ә күңеле - тулы хазина. Йоҡларға ятһаҡ (әйткәндәй, үҙе эшләгән ҡорама юрғандары ла, магазиндыҡылар ҙа күп ине - беҙ шуларҙы бүлешә алмай аҙаплана инек, ә улары матур-матур тауарҙар менән тышланған. Яҫтыҡ-мендәрҙәрен ике рәт итеп, бейек итеп өйөп ҡуйыр ине - ошо ла баһа ҡот!) өләсәйемдән әкиәт һөйләтмәй йоҡламаҫ инек, ә ул белгән йомаҡтарҙың иҫәбе-һаны юҡ! Ә бына хәҙерге өләсәйҙәр ейән-ейәнсәрҙәре бимазаламаһын өсөн мультфильм-диск ҡуялар! Йәшәүебеҙҙең ҡотон ебәреп.

Өләсәйем емеш-еләк йыйырға ла әүәҫ булды. Урман-тауға барһа, бер ҡасан да буш ҡайтмаҫ ине. Унын үҙе генә белгән еләклектәре, ҡарағат-сейәләре, һырғанағы, хатта алмаһы бар ине. Уға эйәреп туғайға сыҡһаң, йә ҡымыҙлыҡ һонор, йә йыуаһын өҙөп ҡаптырыр, йә күл йыуаһын табып бирер, йә әтнәкәс ашатыр; китеп барған еренән берәй дарыу үләне өҙөп алып, кесәһенә тығыр ине. Еләк йыйһа, беҙрәһе "тып-тып" тип тулыр ҙа ҡуйыр ине. "Һай, был еләкте ҡалдырып ҡайтып ни", - тип, яулығын һыпырып алып ҡағып, еләктәрҙе шунда бәлешкә тип йыя башлар ине. Шул хәтирәләр төш кеүек кенә: үҙҙәре татлы, үҙҙәре һағындырҙы, ләкин һис ҡасан да ҡабатланмаҫ! Эх...

Өләстең ҡулы шул хәтлем ҡотло икәненә тағы бер дәлил: бер мәл һуған орлоғон кемдәндер алған да баҡсаһына һибеп ингән. Шул һуғандар иртә яҙҙан ҡара көҙгә ҡәҙәр, өләсәйем үлгәнсе үҫеп ултырҙы. Үҙе ултыртҡан муйыл да яҙ һайын шаулап сәскә атып, ҡыйыҡтың ятһын ҡаплап, күкрәп үҫте лә китте. Инде был муйыл яҡтылыҡ бирмәҫ, ҡарағаттың емеше булмаҫ, тиһәк, унының да йыйып бөтөрөп булмай ыҙалай инем.

Өләсәйем мал көтөргә лә әүәҫ булды. Минә бигерәк тә кәзәләре оҡшай ине. Үҙҙәре аҡыллылар, үҙҙәре шаяндар. Бәрәстәре өй нигеҙендә йылы ҡояшҡа йылынып ятырҙар ине. Беҙ ҡустым менән тәкәләрҙе менеп, мөгөҙҙәренә тотоноп, йәбешеп ятып ҡыуа инек. Ҡолай торғайныҡ! Бер мәрәкә ине! Шул малыбыҙҙың ҡото булып, тура мөгөҙлө, һомғол буйлы, аҡ маңлайлы сөтөр кәзәләр торҙо. Өләс, ниңәлер, шундай кәзәне "сөтәр, сөтөркәй, сөтөр кәзәкәй" тип атай торғайны. Шуларға икмәк, шәкәр ашатып өйрәтә ине. Сөтөр кәзә йыл да игеҙ бәрәсләр ине: берәһе ҡап-ҡара булһа, икенсеһе, һис шикһеҙ, үҙе кеүек сөтөр ине. Ошо инде мал ҡото! Шул сөтөркәйҙе беҙ һуйырға, һатырға тейеш булмағанбыҙ, ахыры. Бер мәл, өләсәйем үлгәс, ата-әсәйемә унын малы күскәс, күҙ тейепме, кәзәләрҙең ҡото китте. Әле саҡ үрсеп киләләр.

Ҡот китеү... Беҙ бәләкәй саҡта әсәйемдең дә ҡаҙҙары уңа торғайны. Өс-дүрт оя ултыртһа, май аҙағында һап-һары бәпкәләр урамыбыҙҙы тултырып бипелдәп йөрөр инеләр. Күптәр беҙҙең ҡаҙҙарҙы ҡулдарына төшөрөргә тырышты. Шулай бер мәл көҙгөнөн әсәйем бер инәй менән ҡаҙҙарын алмаштырышып алды, йәнәһе, әсәйемдең ҡаҙҙарының тоҡомо шәп. Яҙғыһын ҡаҙҙар йә йомортҡа һалмай, йә ояға ятмай аптыратты. Әсәйем, ояларын оҡшатмайҙарҙыр, тип, алмаштырып та ҡараны. Юҡ, булмаған булмай икән, беҙҙең ҡаҙҙарҙың ҡото китте.

Ошоларҙы яҙам да хайран ҡалам. Әсәйемдең ошо һүҙҙәре иҫкә төшә: элек беҙ ата ҡаҙҙан тешләнеп, әтәстән тибелеп, үгеҙҙәрҙән һөҙөлөп үҫтек. Хәҙер малдар ҙа йыуашайҙы. Ҡаҙҙар ҙа бәпкә баҫмай. Әҙер колбаса ашайбыҙ, бройлерҙар һатып алабыҙ..."

Ысынлап та... Ҡот, ырыҫ китә бит, милләттәштәр! Араҡы менән дуҫ булғандарҙың йәшәүенең ҡото юҡ. Ялҡауҙарҙың өйөндә лә, урамында ла ҡот юҡ. Тупаҫ һүҙҙәр, насар һүҙҙәрҙе күп һөйләйбеҙ - телдең дә ҡото китә. Бер-беребеҙгә ауыр һүҙҙәрҙе йыш әйтәбеҙ - шуға ла туғанлыҡтың, дуҫлыҡтың, һөйөүҙең ҡото китә. Донъяларыбыҙҙың, көнитмешебеҙҙең ҡото, ырыҫы китә. Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта уйланайыҡ, гәзит аша фекер алышайыҡ әле, милләттәштәр.

**Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

**Шулай итеп...**

**Гәзит уҡыусыларыбыҙға "Рубрика тәҡдим итәм" тигән сарала ҡатнашырға саҡырып мөрәжәғәт иткәйнек инде. Гөлнара Яҡшыбаева ошо саҡырыуға ҡушылып, ҡот тураһында һөйләшергә саҡыра гәзит уҡыусыларыбыҙҙы. Матур, мөһим, кәрәкле рубрика булыр был. Тағы иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: гәзит битендә үҙе телләгән теманы күрергә теләүсе уҡыусыбыҙ рубриканы үҙе атарға, унын актуаллеген, мөһимлеген раҫларға һәм шуға ярашлы үҙенең мәҡәләһен тәҡдим итергә тейеш. Иң матур, иң ғүмерле рубрика авторы йыл аҙағында иҫтәлекле бүләккә лайыҡ буласаҡ.**



Әбйәлилдең ҡотло өләсәйҙәре.

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## БЫЛ ДОНЪЯЛА БЕҘ ҠУНАҠ...

Баҡсала уйнап йөрөгәндә Хәмди юл буйлап китеп барған сал сәсле ҡартты күреп ҡала. Матур бер йорттоң ҡапҡаһына килеп еткәс, ул ял итергә ултыра.

- Малай! - тип ҡарт Хәмдигә өндәшә. - Бер төнгә генә ошо ҡунаҡһарайҙа ҡала аламмы мин?

- Был ҡунаҡһарай түгел дә ул, - тип көлөп ебәрә Хәмди.

- Нимә һуң был?

- Был беҙҙең өйөбеҙ.

- Әә... Ә кем төҙөгән был өйҙө?

- Минең олатайым.

- Олатайың уны кемгә ҡалдырған?

- Атайыма.

- Атайың кемгә ҡалдырыр?

- Миңәлер...

Ҡарт, йылмайып, Хәмдигә шулай тигән:

- Йорттоң барлыҡ хужалары ла уны кемгәләр ҡалдыра килгән икән, тимәк, һеҙ бөтәгеҙ ҙә был өйҙә ҡунаҡ ҡына, улым.

Яңы уҡыу йылы башланғас, мәҙәниәт дәресендә уҡытыусы балаларға йәй көнө булған иң сағыу мәлдәрҙе иҫкә алырға ҡуша. Хәмди сал сәсле ҡарт менән булған ваҡиғаны һөйләй. Әлбиттә, бөтә балалар ҙа был хәлдең мәғәнәһен, фәлсәфәһен аңламай. Ә уҡытыусы дәресте Бәйғәмбәребеҙ ҡалдырған хәҙис менән тамамлап ҡуя: "Мин был донъяла ағас күләгәһендә ял итеп алып, юлын артабан дауам иткән юлсы ғына".

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика йортонда Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса БР Хөкүмәте эргәһендәге комиссияның сираттағы ултырышы булып үтте. Уны комиссия рәйесе, БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев алып барҙы. Комиссия Ҡалтасы, Федоровка районларында, Күмертау ҡалаһында Закондың үтәлеш барышын тикшерҙе.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев быуындарҙы протезлау буйынса Америка госпитале акционерҙары менән инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйҙы. Килешеү республика биләмәһендә хирургия үҙәге төҙөүҙе күҙ уңында тота. Билдәләнелеүенсә, беҙҙә бындай төр медицина хеҙмәтенә ихтыяж бар: эндопротез медицина ярҙамын алыу өсөн бөгөн республикала 4 меңгә яҡын кеше сиратта тора.

✓Башҡорт дәүләт медицина университетында Норвегия университеты профессоры Тур Хансен менән осрашыу булып үтте. Беҙҙең университет Норвегияның Осло ҡалаһындағы университеттың медицина факультеты менән күптән хеҙмәттәшлек итә ине.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге хөкүмәт делегацияһы Австрияла эш сәфәрендә булды. Сәфәрҙең маҡсаты - аҙ ҡатлы йорттар төҙөү өсөн тәғәйенләнгән тиҙ ҡорола торған конструкциялар етештереүсе предприятиелар тәжрибәһен өйрәнеү. Бындай конструкциялар ҡулланып төҙөлгән йортто бер нисә көн эсендә файҙаланыуға тапшырып була. Бөтә эш заводта атҡарыла, аҙаҡ урында йыйып ҡына ҡуйыла. Ундай йорттар юғары сифатлы булыуы менән айырыла. "Лассельсбергер" компанияһы менән ошондай конструкциялар эшләй торған завод төҙөүгә инвестициялар йәлеп итеү буйынса һөйләшеүҙәр ҙә алып барылды.

✓2009 йылда мәктәп уҡыусылары араһында Бөтә Рәсәй олимпиадаларында еңеүселәрҙе һәм призға эйә булыусыларҙы тәбрикләү тантанаһы булып үтте. Быйыл Башҡортостанда 20 предметтан өс тур олимпиада үткәрелгән. Уларҙа 58 мең уҡыусы ҡатнашҡан. Регион этабына 1934 уҡыусы үткән. 49 бала - еңеүсе, 423 бала призға лайыҡ булған.

***✓ Урыҫ халҡының тарихын бер кемгә лә аңлашылмаған ниндәйҙер бер ысул һәм билдәһеҙ юл менән Арҡайымға алып килтереп терәгәндәрҙе Комиссия тар-мар итергә көсө етер микән?***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Тарихҡа ҡарашығыҙ нисек, йәмәғәт? Ихтирам итәһегеҙме уны? Мәҫәлән, тарихи даталарҙы хәтерләйһегеҙме? Әйтәйек, Киев Русы ҡасан барлыҡҡа килгән? Ә Александр Невскийҙың Боҙҙағы һуғышы ҡасан һәм ҡайҙа булған? Куликово һуғышында кем еңгән, иҫләйһегеҙме? Абай булығыҙ, хәҙер тарихты бик ныҡ белергә кәрәк. Белмәгән осраҡта иһә, тарих һөйләйем тип, ауыҙығыҙҙы урынлы-урынһыҙ асмауығыҙ хәйерлерәк. Ни өсөн тиһегеҙме? Хәҙер Рәсәй Президенты үҙе тарих яҙыусылар, һөйләүселәр, өйрәнеүселәр һәм, иң мөһиме, тарих боҙоусыларҙы даими рәүештә күҙәтеп торасаҡ. Күҙәтеү генәме ни, яуаплылыҡҡа тарттырыуы ихтимал. Хәйер, Президент үҙе, тип арттырыбыраҡ ебәрҙем буғай. Дөрөҫөрәге, бының менән уның указы буйынса булдырылған махсус комиссия шөғөлләнәсәк.**

# ТАРИХҠА ЙОҒОНМАҒЫҘ,

## йәки Комиссия ғына үткәндәребеҙ хаҡында дөрөҫлөктө һаҡлап алып ҡалыр микән?

Әйе, илебеҙҙәге төрлө-төрлө Советтар, идаралыҡтар, бүлектәр, министрлыҡтар, агентлыҡтар, комиссиялар һ.б., һ.б. исемлеге тағы ла берәүгә артты. Комиссияның атамаһы ҡатмарлы. "Рәсәй мәнфәғәттәренә зыян килтереп, тарихты боҙоп күрһәтергә (фальсификацияларға) маташыуҙарға ҡаршы тороу буйынса Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Комиссия" тип исемләнгән ул Указда. Йәғни, ҡайҙалыр кемдер илебеҙҙең тарихын (шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, уның ваҡыт арауығы аныҡ ҡына билдәләнмәгән) нисектер үҙгәртеп, боҙоп, аҫтын-өҫкә әйләндереп, башты бутап күрһәтергә тотонһа, Комиссиябыҙ эшкә керешәсәк. Һәйбәт эшме? Иҫ киткес! Коррупция менән көрәшеп ҡараныҡ, иҡтисади көрсөк менән алыштыҡ, хәҙер, күрәһең, тарих боҙоусыларға ҡаршы һуғыш асасаҡбыҙ. Бик хуп, бик мәслихәт.

Баштан уҡ "фальсификациялау" терминын асыҡлап үтәйек. Башҡортсаға "боҙоп күрһәтеү" тип кенә тәржемә итһәк, был һүҙбәйләнеш уның мәғәнәһен тулыһынса асып етмәй кеүек. Аңлатмалы һүҙлектәрҙе асып ҡарайым. Интернетҡа мөрәжәғәт итәм. Шундай яуап алам: фальсификация - усал ниәт менән алдан уйлап, ниндәйҙер мәғлүмәттәрҙе боҙоп күрһәтеү. Йәғни, теге йәки был боҙоҡлоҡтоң ниәте һәм алдан уйланылғаны ярылып ятмаған хәлдә нисек тә булһа асыҡланырға тейеш. Ә тарихты фальсификациялау иһә аңлы рәүештә тарихи ваҡиғаларҙы боҙоп күрһәтеү йәки ниндәй ҙә булһа тарихи мифтар булдырыу менән шөғөлләнеүҙе аңлата. Комиссияның төп эше ошондай боҙоҡлоҡтарҙы асыҡлауҙан һәм Президентҡа еткереүҙән торасаҡ.

Тарихты боҙоу тигән ғәләмәт ҡайҙан килеп сыҡты һуң, тип һорайһығыҙмы? Һәм нишләп Рәсәй Президенты уның менән көрәшергә булып китте әле, тип ҡыҙыҡһынаһығыҙмы? Тәүҙә беренсе һорауға яуап бирергә маташып ҡарайым. Борон-борондан булған ул хәл. Хатта бик борондан. Кешелек тарихы башланған мәлдән алып, тип әйтергә лә булалыр. Кеше дәүләттәр ҡороп йәшәй башлаған осорҙан уҡ. Һәр быуатта, һәр дәүерҙә үҙен һәм үҙе ҡылған эштәрҙе киләсәк быуын өсөн яҡшыраҡ, мәрхәмәтлерәк, аҡыллыраҡ, мөһабәтерәк, ҡеүәтлерәк итеп күрһәтергә теләүсе батшалар, императорҙар, фараондар табылып ҡына торған. Бик шәп миҫал - пирамидалар. Быуаттар буйына емерелеп юҡҡа сыҡмай торған был зыяраттарҙы бары тик бик бай, мәғрүр һәм бөйөк батша ғына төҙҙөрә ала һымаҡ. Асылда иһә, ул ҡоролмаларҙың осона сығыу бер нисә фараондың ғүмере эсендә башҡарыла. Хәйер, фараондарҙың тарихтарын барларға ваҡыт юҡ. Беҙҙе хәҙерге заман башлыҡтары көтә.

Тарихты үҙгәртеүселәр араһында иң данлыҡлыһы, әлбиттә, Иосиф Виссарионович Сталин. Уның "ВКП(б)-ның ҡыҫҡаса тарихы" тигән "хеҙмәте" - ил тарихын юҡҡа сығарыуҙың, боҙоп күрһәтеүҙең иң күренекле өлгөләренең береһе. Сталиндың тырышлығы менән юҡ ителгән (төрмәгә ултыртылған, атып йәки язалап үлтерелгән) партия һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәре, хәрбиҙәр сәйәси золом ҡорбандарына әүерелгәс, уларҙың исемдәре, улар ҡылған эштәр, ижадтары тарих биттәренән юҡҡа сыға бара. Хатта уларҙың фоторәсемдәре дөйөм фотографияларҙан юйылған, имеш. Айырыуса Сталин менән бергәләшеп төшкәндәре. Тарихты "ретушлау" шулай була ул. Бынан тыш, ул ваҡыттағы тарихи сығанаҡтарҙа Иосиф Виссарионович 1917 йылға тиклем Рәсәй империяһында В.И. Ленин менән бер рәттән, революцион хәрәкәттең башлыҡтарының береһе булған, тигән тезис барлыҡҡа килә һәм әүҙем пропагандалана.

Бөгөнгө көндәргә күсәйек, булмаһа. Советтар Союзының 70 йылдан ашыу ваҡыт дауамында ҡоролған уйҙырма тарихы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Әммә уның урынына яҙылған яңы тарих китаптарын да тик дөрөҫлөккә ҡоролған, тип бер ҙә әйтеп булмай. Бынан тыш, Рәсәйҙең тарихын башҡа ил тарихсылары, сәйәсмәндәре, журналистары тупаҫ рәүештә боҙоп күрһәтә башланы. Әйтәйек, Бөйөк Ватан һуғышын һәм Бөйөк Еңеүҙең әһәмиәтен юҡҡа сығарыу буйынса әүҙем эш алып барыла. Америка Ҡушма Штаттары тарихсылары һәм сәйәсмәндәре фекеренсә, Икенсе бөтә донъя һуғышы тап АҠШ ғәскәрҙәренең еңеүе менән тамамланған. Ә Рәсәй һәм уның ҡорбандары хаҡында - ләм-мим.

Ә башҡорттоң тарихына йоғоноусылар бихисап. Беҙҙе, айырым халыҡ түгел, ә татарҙарҙың бер ырыуы, ә телебеҙ татар теленең диалекты тип иҫбатлаусылар ҙа булды. Башҡорттарҙың ҡалалары һәм йәшәгән ерҙәре булмаған, улар ҡамғаҡ кеүек дала буйлап тәгәрәп тик йөрөгәндәр, тип белдереүселәр ҙә табылды. Ә һуңғы арала иһә "Пугачев - бунтовщик, шулай булғас, Салауат Юлаев та милли-азатлыҡ көрәше башлығы түгел, ә ябай бур һәм башкиҫәр" тип раҫлаусылар ҙа күбәйҙе.

Ә хәҙер Комиссияға бер нисә һорауым бар. Урыҫ халҡының тарихын бер кемгә лә аңлашылмаған ниндәйҙер бер ысул һәм билдәһеҙ юл менән Арҡайымға алып килтереп терәгәндәрҙе Комиссия тар-мар итергә көсө етер микән? Әллә ул Рәсәйҙең мәнфәғәттәренә зыян килтермәгән миф микән? Ә, әйтәйек, башҡорттоң тарихын күрәләтә тороп боҙорға маташҡан, башҡорт ерҙәрендә боронғо ҡалалар булыуын инҡар иткән, Зәки Вәлиди Туғанды фашистар менән бәйләргә тырышҡандарҙың ҡойороҡтарын әҙерәк бороп булмаҫ микән ошо Комиссия ярҙамында? Башҡорт хаҡында "әле саҡ мәмерйәнән сыҡҡан ҡырағай халыҡ" тип яҙыусыларҙы ошо Комиссия елкәһенән алып, һелкетеп һалмаҫ микән?

Һәм тағы ла шуныһы бар - тарихтың ҡайһыныһы дөрөҫ, ә ҡайһыныһы ялған икәнлеген кем билдәләр икән? Тарихты фальсификациянан һаҡлау комиссияһы эшмәкәрлеген тышҡы дошмандарыбыҙҙан эскеләргә бороп алып китһә? Һәр бер милләттең үткәндәрендә соҡоноп, Комиссия фекеренсә, ялған факттарға, дөрөҫ булмаған интерпретация һәм трактовкаларға юлыҡһа? Дәүләт сигененең аръяғындағылар менән бер нәмә лә эшләп булмай (илгә инергә тыйыуҙан башҡа), ә эстәгеләрҙе дөмбәҫләп алыу еңел генә бит.

**Таһир ИШКИНИН.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

### Димләп кейәүгә биреү һәм өйләндереү йолаһына нисек ҡарайһығыҙ? Мөхәббәт тойғоһон инҡар итеү түгелме был?

***Асия ИШТАНОВА, Өфө ҡалаһы балалар йорто ашнаҡсыһы:***

-Бик ыңғай ҡарайым. Ни өсөн тигәндә, бик күп ҡыҙҙарыбыҙ тупылдатып бала артынан бала табыу йәшендә үҙ ишен таба алмай, ғүмерен заяға үткәрә. Мин бына үҙем дә, әгәр ҙә ауылда йәшәгән булһам, үҙ ауылыбыҙҙа булмаһа, күрше ауылдарҙан барыбер үҙ кешемде табып, ошоғаса бер балаға ғына түгел, кәмендә алты балаға ғүмер биргән булыр инем. Ҡыҙҙарыбыҙҙың әсәлек потенциалын тулы көсөнә эшләтер өсөн кәрәк беҙгә димселек. Бында тик бер генә ҡаршылыҡ килеп тыуыуы бар - мөхәббәт мәсьәләһе. Тик бер тапҡыр ғына донъяла кеше йәшәй, шулай булғас, был тойғоно ла кеше кисерергә тейеш.

***Әлфиә ЮЛДАШБАЕВА, Баймаҡ район мәғариф учреждениеларының баш бухгалтеры:***

-Һуңғы йылдарҙа әсәлек капиталы тураһында күп һөйләйҙәр, ошоноң менән балаларҙың тыуымын арттырырға теләйҙәр. Был - яҡшы күренеш, әммә был ысул һаман да өйләнмәй йөрөгән егеттәргә һәм кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙарға бер нисек тә тәьҫир итмәй. Шуға күрә лә элекке димселек институтын да дәүләт кимәленә күтәрергә кәрәктер. Сөнки Хоҙай Тәғәлә тарафынан бар кешеләр ҙә донъяға тигеҙ итеп яратылмай. Күптәр күңеленә оҡшаған кемдер янына барып, үҙенең тойғоһон белдереп, тәҡдим яһар ҡыйыулығы һәм баҙнаты булмай, ҡаңғырып йөрөй. Был институт тап шундайҙар, ҡаңғырып йөрөгәндәр өсөн кәрәк. Мөхәббәткә килгәндә инде, димселәр алдан егет һәм ҡыҙ менән һөйләшеп, бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәтен белергә тейештер. Һәр хәлдә, элекке димселәр был тәртипте яҡшы белгән һәм бер-береһенә күҙе ятыр, күңеле тартылыр йәштәрҙе генә ҡауыштырған.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓39-сы "Башҡортостан" фирма поезы 31 майҙан графигын бер аҙ үҙгәртә. Хәҙер ул Мәскәү ҡалаһына элекке кеүек 10 сәғәт 13 минутта түгел, ә 9 сәғәт 8 минутта барып етәсәк.

✓Башҡортосан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "Һабантуй" байрамдарын үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты "Зәки Вәлиди: уйҙырма һәм хәҡиҡәт" тигән темаға түңәрәк ҡор ойошторҙо. Яңыраҡ ҡайһы бер үҙәк баҫмаларҙа һәм интернет-сайттарҙа З. Вәлиди исеменә ялған яла яҡҡан сығыштар булды. "Улар бер ниндәй ҙә тарихи документтар менән нығытылмаған", - тине үҙ сығышында Марат Ҡолшәрипов. Түңәрәк ҡор тураһында тулыраҡ сығышты киләһе һанда уҡырһығыҙ.

✓Совет районы хакимиәте граждандарҙың иғтибарын шуға йәлеп итә: баш ҡалала йорттарҙың подъездарына инеп, үҙҙәрен социаль хеҙмәткәрҙәр тип таныштырып, пенсионерҙарҙы йыйып, ниндәйҙер медицина техникаһы тураһында һөйләп, уны ташламалар менән һатып, алдаштырып йөрөүселәр күбәйҙе. Аң булығыҙ!

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов быйылғы "Йыл уҡытыусыһы" конкурстарында еңеүселәрҙе тәбрикләне һәм финалға сыҡҡан һәр уҡытыусыға "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән исемдәр биреү тураһындағы дипломдар тапшырҙы.

✓"Ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам республика үҙәге" 28 майҙа "Атайҙар һәм балалар: өлкән йәштәге балалар менән мөнәсәбәттәр" тигән темаға тура бәйләнеш ойоштора. 15 сәғәттән 17 сәғткә тиклем 273-09-00 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин. Психологтар менән башҡорт һәм рус телдәрендә аралашырға була.

✓26 майҙа Нефтселәр мәҙәниәт һарайында"Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге "Дәрүишхан" төркөмө етәксеһе йырсы Дим Мәннәнгә арналған хәтер кисәһе үткәрә. Сара 19 сәғәттә башлана.

✓25 майҙан 20 сентябргә тиклем Ленин районының Галле округы урамындағы Ағиҙел күперендә капиталь ремонт эштәре атҡарыла. Күпер буйлап автотранспорт хәрәкәте өлөшләтә ябыласаҡ һәм сикләнәсәк.

✓ *Рәсәй гражданлығын ябайлаштырылған ысул менән юллау ваҡыты 2009 йылдың 1 июленә тиклем оҙайтылды. 1 июлдән һуң дөйөм рәүештә гражданлыҡ алыу мөмкинлеге генә ҡаласаҡ.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# РӘСӘЙ ГРАЖДАНЛЫҒЫ...

## ябайлаштырылған ысул менән

**Советтар Союзы тарҡалғас, күп кенә яҡташтарыбыҙ икенсе илдең граждандарына әүерелеп, шунда көн күрә. Уларҙың күбеһе бөгөнгө көндә Рәсәй гражданлығы алырға теләп, документтар йыя.**

Хәҙер Рәсәй гражданлығын дөйөм һәм ябайлаштырылған ысул менән юллап була. Тәүгеһе 7 йыл дауамында ҡаралһа, ябайлаштырылғаны 6 ай эсендә тормошҡа ашырыла.

2003 йылда Рәсәйҙең гражданлыҡ тураһындағы законына үҙгәрештәр индерелде. Яңылыҡтар элекке СССР-ҙа йәшәп, һунынан күсеп килеүселәргә ҡағыла. Был закон буйынса, улар хәҙер ябайлаштырылған ысул менән гражданлыҡ юллай ала, бының өсөн уларҙың 2002 йылдың 1 июленә ҡарата оҙайлы теркәүе, йәиһә Рәсәйҙә ваҡытлыса йәшәү өсөн рөхсәт биреүсе документы булыуы мотлаҡ.

2008 йылдың 30 декабрендә Рәсәй президенты "Рәсәй гражданлығы тураһында"ғы Федераль закондың 14-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, Рәсәй гражданлығын ябайлаштырылған ысул менән юллау ваҡыты 2009 йылдың 1 июленә тиклем оҙайтылды. 1 июлдән һуң дөйөм рәүештә гражданлыҡ алыу мөмкинлеге генә ҡаласаҡ. Был Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан һәм Белоруссия граждандарына ҡағылмай, сөнки улар менән айырым халыҡ-ара килешеү төҙөлгән.

Элекке СССР һәм БДБ илдәре граждандары ябайлаштырылған ысул менән гражданлыҡ алырға теләһә, 2009 йылдың 1 июленә тиклем ғариза менән урындағы миграция хеҙмәтенә мөрәжәғәт итә ала.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

# ҺЫНАУҘАР БАШЛАНА

**2009 йылда республиканың 129 урта белем биреү учреждениеһында БДИ тапшырыу пункты ойоштороласаҡ, уларҙың 100-ҙән ашыуы 29 майҙан 4 июнгә тиклем эшләйәсәк. Тап ошо көндәрҙә уҡыусылар рус теле һәм математика буйынса имтихандар тапшыра. Башҡа фәндәрҙән БДИ тапшырыусылар өсөн 70 пункт эшләйәсәк.**

Быйыл 29992 уҡыусы 11-се синыфты тамамлаясаҡ. Улар барыһы ла 7 апрелгә тиклем БДИ тапшырыу өсөн ғариза яҙған. Мәғлүмәттәр буйынса, 47 процент сығарылыш уҡыусыһы йәмғиәтте өйрәнеү фәне буйынса БДИ тапшыра, икенсе урында - физика (9623 ғариза), артабан биология (6549), тарих (5828), химия (4506), информатика (4427) тора.

Информатика һәм информацион-коммуникатив технологиялар буйынса беренсе һынауҙар 26 майҙа, рус теле - 29 майҙа, география, химия, әҙәбиәт - 1 июндә, математика - 4 июндә, сит телдәр - 8 июндә, йәмғиәтте өйрәнеү, химия - 11 июндә, тарих, физика буйынса 15 июндә үтәсәк.

Кем ваҡытында билдәле сәбәптәр буйынса БДИ тапшыра алмай, улар өсөн өҫтәмә көндәр ҡаралған. БДИ урындағы ваҡыт буйынса сәғәт 10-да башлана. Ҡағыҙ буйынса, математика, әҙәбиәт, информатика һәм информацион-коммуникатив технологиялар өсөн - дүрт, физика, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү өсөн өс сәғәт 30 минут, рус теле, биология, география, химия өсөн - өс сәғәт, сит телдәр өсөн ике сәғәт 50 минут ваҡыт бүленә. БДИ 100 баллы шкала буйынса баһалана.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Бөгөн республиканың белем усаҡтарында 29 992 сығарылыш уҡыусыһы өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраясаҡ. Ошо уңайҙан "Быйыл уҡыу йортон нисә уҡыусы тамамлай? Быйылғы сығарылыш уҡыусылары ниндәй сифаттары менән хәтерегеҙҙә һаҡланасаҡ? Уларға киләсәктә ниндәй өмөттәр бағлайһығыҙ?" - тигән һорауҙар менән баш ҡаланың милли гимназия һәм лицейҙары етәкселәренә мөрәжәғәт иттек.**



# БЕЛЕМЕ БАР...

## мендә йыйғыр

**Әлфир ҒАЙСИН, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:** Быйыл гимназия-интернатты 167 уҡыусы тамамлай. Шуныһы үкенеслерәк, улар араһында иң шәп бейеүселәребеҙ, ҡурайсыларыбыҙ һәм йырсыларыбыҙ күп. Сығарылыш уҡыусыларының күбеһе Мәскәү һәм Санкт-Петербургтың юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә хыялллана, ҡалғандары Башҡортостан вуздарын һайланы. 167 баланың 32-һе - сит төбәктәрҙән. Башҡа сығарылыштарҙан айырмалы рәүештә, быйылғылар һан яғынан әҙерәк, уларҙың һәр береһен яҡшы беләбеҙ, шуға айырылышыу ла бик яманһыу.

Беҙҙең уҡыу йорто биш йыл рәттән вуздарға уҡырға инеү күрһәткесе буйынса 98-98,5 процентҡа етә ине, ә быйылғы сығарылыш уҡыусыларының был күрһәткесте 100 процентҡа еткереүен теләйбеҙ һәм бар көстө шуға һалабыҙ.

**Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, 136-сы Башҡорт лицейы директоры:** Быйыл беҙҙең лицейҙы 52 уҡыусы тамамлай. Улар беренсе синыфтан яҡшы уҡыны, спорт ярыштарында ла әүҙем ҡатнашты, ҡыҫҡаһы, бик тырыш булдылар. Бик белемле, көслө сығарылыш - быны төрлө олимпиадалар һәм конкурстар һөҙөмтәләре дәлилләй.

Быйылғы сығарылыштың тағы ла бер үҙенсәлеге шунда: элек беҙ уҡыусыларҙы Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарына имтихан биреү өсөн өгөтләп ебәрә торғайныҡ, ә быйыл уларҙың яртыһы Рәсәй вуздарына уҡырға инергә үҙҙәре теләк белдерҙе. Уҡыусыларыбыҙ һынатмаҫ, тип ышанам, ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, барыһы ла үҙҙәренең ҡулында икәнен онотмаһындар.

**Илдар МОТАЛОВ, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы директоры:** Быйыл гимназияны 58 уҡыусы тамамлай. Мин йыл һайын һуңғы ҡыңғырау көнөн оло тулҡынланыу менән ҡаршылайым. Һәр сығарылыш синыфы гимназияны тамамлаған саҡта башҡа бындай тырыш һәм әүҙем балалар булмаҫ, гимназияның бөҫе төшөр инде, тип уйлайһың, сөнки бала 11-се синыфта үҙен тулыһынса аса, үҙенең бөтә һәләтен, мөмкинлектәрен ҡулланып, төрлө сараларҙа ҡатнаша, тырышып уҡый башлай, йәғни был ваҡыт уларҙың өлгөрөү осоро менән тап килә. Быйылғы сығарылыш та шулай булды, ҡалала үткән бөтә олимпиадаларҙа ла уңышлы сығыш яһанылар. Уларҙың араһынан өс уҡыусы көмөш, туғыҙы алтын миҙалға дәғүә итә.

Сығарылыш уҡыусыларының тормош ҡуйған һынауҙарҙы лайыҡлы үтеүҙәрен теләйем һәм бөтәһе лә юғары уҡыу йортона уҡырға инер, тип ышанам.

**Ирек ӘХМӘТШИН, 140-сы Башҡорт гимназияһының милли телдәр буйынса директор урынбаҫары:** Беҙҙең гимназияны тамамлаусы 28 уҡыусының һәр береһе талантлы, һәр береһе гимназия тарихында үҙенең эҙен ҡалдырған көслө шәхес. Улар араһында спортсылар ҙа, фәнни эш менән шөғөлләнеүселәр ҙә, йырсылар ҙа бар. Тырышлыҡтары менән бар уҡытыусыларҙы хайран ҡалдыра улар. Быйыл барыһына ла мотлаҡ рәүештә БДИ тапшырырға тура килеү сәбәпле, сығарылыш уҡыусыларына икеләтә, өсләтә тырышырға тура килде. Улар беҙҙең өмөттәрҙе аҡлап, уҡырға инеп китер, тигән ышаныста торабыҙ.

**Шулай итеп…**

**"Белеме бар мендә йыйғыр" тигән бик тапҡыр мәҡәл бар. Бөгөн беҙҙең халҡыбыҙға көслө булыу өсөн беләк көсө түгел, аҡыл көсө мөһимерәк - быны сығарылыш уҡыусылары үҙҙәре лә яҡшы аңлай һәм белем алырға ынтыла. Уларҙың барыһына ла һуңғы ҡыңғырау сыңы уятҡан өмөт-хыялдарының аҡланыуын теләп ҡалабыҙ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә балаларҙың йәйге ялын ойоштороу мәсьәләләре тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, быйыл йәй барлығы 90 мең, йәғни 98 процент уҡыусы балаларҙың ялын ойоштороу, һауыҡтырыу һәм эш менән мәшғүл итеү планлаштырыла.

✓25 майҙа Ленин урамы, 62 адресы буйынса "Кармен" клубында сәғәт киске 8-ҙә ҡала башҡорттарының "Дүшәмбе" ижадханаһы осрашыуы була. Аралашырға, күңел асырға, фәһем дә алырға теләүсе милләттәштәребеҙҙе ҡыҙыҡлы, йөкмәткеле программа көтә.

✓Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт академияһы театр факультетының 15 студенты 25 майҙа Төркиәнең Стамбул ҡалаһына юлланасаҡ. Йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге халыҡ-ара программа сиктәрендә ойошторолған сәйәхәт ваҡытында студенттар Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектакле менән сығыш яһаясаҡ.

✓Өфө менеджмент институты базаһында тағы бер Йәштәр эшҡыуарлығы мәктәбе эшләй башлай. Программаға төрлө предметтар индерелгән: хоҡуҡи тәьминәт, менеджмент һәм маркетинг, һалым һалыу һәм башҡалар. Өс аҙнала йәштәр эшҡыуарлыҡ серҙәрен өйрәнәсәк.

✓Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында Гематология үҙәге асылды. Ҡан ауырыуҙары дауалауға тиҙ генә бирешмәй торғандарҙан. Бындай сирле пациенттар араһында үлем осраҡтары ла юғары. Шуға БР Хөкүмәте быйыл гематологик сирлеләрҙе дарыу менән тәьмин итеүгә 12 миллион һум аҡса бүлде. Шуның 4,5 миллионы Гематология үҙәгенең матди-техник базаһын нығытыуға китте.

✓Совет район хакимиәте "Юбилейный" мәҙәниәт һарайында мәктәпте тамамлаусылар менән профйүнәлеш мәсьәләләре буйынса осрашыу үткәрҙе. Быйыл районда барлығы 779 бала мәктәп тамамлаясаҡ. Район мәктәптәрендә 9 кластан башлап профйүнәлеш буйынса эш алып барыла. Күптәр медицина, оборона-спорт, МЧС, художестволы графика, социаль-иҡтисади, социаль-гуманитар, физика-математика кластарында белем алды.

# МАТУР ТӘБИҒӘТ, МАТУР ҒАИЛӘЛӘР -

## Хоҙай шулай бүләкләгән Бөрйән ерен



**(Башы 1-се биттә).**

Тимәк, халыҡ һағынған үҙ шөғөлөн, тимәк, ҡатын-ҡыҙ күңелендә йәшәй әле ул сигеүҙәргә әйҙәүсе нағыш тойғоһо. Шулай булмаһа, һигеҙ бала һәм 74 йәшкә тиклемге илленән ашыу ҡатнашыусының ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә шул тиклем ижад өлгөләрен тәҡдим итеүен тағы ла ниҙәр менән аңлатырға мөмкин?! Был конкурста таҫтамал сигеү буйынса беренсе урын яулаған Тәнзилә апай Аллаярова Ырғыҙлы ауыл мәҙәниәт йортонда директор булып эшләй. Кул эштәренә маһирлыҡ әсәһенән килә, ынйы менән дә сигеү һала ул. Әсәләренән күрмәксе, ҡыҙҙары ла ҡул эшенә бик әүәҫ. Улар сиккән таҫтамал, ҡулъяулыҡтар Татарстан, Төркмәнстан, Санкт-Петербургта йәшәүсе туғандарына ла бүләккә күпләп ебәрелгән. Тәнзилә апай был эштәре менән "Салауат йыйыны"нда ике тапҡыр ҡатнашҡан.

- Сигеү - башҡорт халҡының борондан килгән күркәм шөғөлө. Сигелгән әйберҙәр, бер яҡтан, матурлыҡ өлгөһө булып торһа, икенсе яҡтан, ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ бүләк тә ул. Элек ҡыҙҙар һөйгәндәрен әрмегә оҙатҡанда ҡулына сигелгән ҡулъяулыҡ тоттороп ебәрә ине. Егеттәр уны юғалтмайынса, үҙҙәре менән йөрөтөп алып ҡайтыр ине. Был үҙенә күрә мөхәббәттәренә тоғролоҡ билдәһе лә булғандыр. Еңгәйҙәр ҙә ҡәйнештәренә үҙ ҡулдары менән сиккән ҡулъяулыҡ бүләк итә ине. Әле, алам, тиһән, магазин тулы әйбер, әммә шулай ҙа йөрәк йылынды һалып, күҙ нурынды түгеп, яратып башҡарған әйберҙәргә етмәй инде ул. Тап шуға ла был конкурстың ойошторолоуы бик ваҡытлы, кәрәкле һәм фәһемле булды. Беҙ ҡыуана-ҡыуана әҙерләндек. Әле балалар күргәҙмәне ҡыҙыҡһынып ҡарап йөрөнө, һорашып торҙолар. Әсәй-өләсәйҙәребеҙ мираҫ итеп ҡалдырып киткән был шөғөлдәрҙе оноторға ярамай, - тип үҙ тәьҫораттары менән уртаҡлашты Тәнзилә апай Аллаярова.

Тәнзилә апайҙың үҙенең ҡулынан килмәгән һөнәре юҡ. Энә, ырғаҡ менән бәйләм бәйләргә, тегенергә ярата. Үҙе эшләгән мәҙәниәт йортонда ҡыҙҙарға "Корама түңәрәге" алып бара. Кейеҙ баҫырға ла өйрәтә. Әле күргәҙмәгә әҙерләгән эштәрен Тәнзилә апай өлкән ҡыҙына бирнәгә әҙерләй.

Теләк булһа, өйрәнергә бер ваҡытта ла һуң түгел, тип иҫәпләй Тәнзилә апай. Әсәһенән киндер һуғырға, иләргә өйрәнеп, шунан балаҫ һуҡмаҡсы. Унын әсәһе үҙ ваҡытында йөн еҫтән дә, киндерҙән дә, иҫке кейемдәрҙән дә балаҫ һуҡҡан. Тәнзилә апай ҙа сепрәк-сапраҡты әләф-тәләф итмәй ҡорама ҡора, йә иһә балаҫ һуғырға әҙерләй.

### Яңылбикә инәй

Бына сәхнәгә Әтек ауылынан 80 йәшен тултырған Яңылбикә инәй Баймөхәмәтованы сығарҙылар. Эй, һөйкөмлө лә һуң үҙебеҙҙең башҡорт әбейҙәре! "Балалары һәм әбейҙәре матур булған милләттең ҡаны затлы иҫәпләнә", тип әйткән бит бер аҡыл эйәһе. 18 йәшендә генә Абдрахман ағайға кейәүгә сығып, биш ҡыҙ һәм биш ул үҫтергән геройәсәнең әле булһа ла төҫ-дәрт ташламауына ҡарап та был турала ышаныслы фекер йөрөтөргә була. Ҡәйнәһе менән бергә утыҙ биш йыл татыу ғүмер кисерә ул. Эшкә етеҙ, унған инәйҙең хеҙмәт стажы ла утыҙ йыл, түштәрен миҙалдар биҙәй. Әле лә инәй ҡартлыҡҡа биреşергә теләмәй, дәртләнеп донъя көтә: мал тота, ҡош-ҡорт аҫрай, баҡса үҫтерә. Әлеге көндә унын утыҙ ике ейән-ейәнсәре, ун бер бүлә-бүләсәрҙәре бар.

"Яңылбикә инәйҙең күршеһендә генә йәшәгәс, мин унын ун беренсе балаһы булараҡ үҫтем. Күмәк ғаиләлә бешкән аштан да, икмәктән дә һәр ваҡыт миңә өлөш сыға ине. Ул шул тиклем бөтмөр, егәрле булды, донъяһы мәңге ялт итеп торҙо. Бер үк ваҡытта колхозда ла эшләргә, күмәк бала тәрбиәләргә, донъя көтөргә өлгөрөр өсөн унын сабырлығы, сослоғо, унғанлығы ярҙам иткәндер. Башҡорт ҡатын-ҡыҙына хас бөтә матур сифаттарҙы ла үҙенә йыйған ул", - тине Бөрйән районы мәҙәниәт бүлеге начальнигы Клара Мөнир ҡыҙы Теләүбаева.

Инәй балалары менән сикһеҙ ғорурлана, уларҙың күркәм тормош көтөүенә ҡыуанып бөтә алмай. "Балаларығыҙҙы нисек итеп тәрбиәләнегеҙ?" тигән һорауға ла инәй һәр бер балаһы тураһында яратып, маҡтап телгә алып үтте. Ә инде ейәндәре Инсур менән Айнур йыр-бүләк башҡарғас, уларҙың арҡаларынан тупылдатып һөйөп ҡуйҙы. Ҡайһылай бөхетле өләсәй, ҡайһылай бөхетле ейәндәр, тип һоҡланып ҡарап ултырҙым был күренешкә. Башҡалар ҙа шулай уйлағандыр.

### Ғаиләләр байрамы

Байрам Ғаилә көнөнә арналғайны. Иҫке Собханғол ауылынан Флорида һәм Хәмизулла Ҡотлоәхмәтовтар, Фатима һәм Мәзһар Моратшиндар, Тимер ауылынан Зөйнәп һәм Хәким Яубаҫаровтар, Ғәҙелгәрәй ауылынан Клара һәм Әхәт Сафиндарҙы илле йыл бергә татыу ғүмер итеүҙәре менән, шулай уҡ биш йыл элек ғаилә ҡороп, үҙҙәренең ситса туйҙарын билдәләүсе йәш парҙарҙы ла сәхнәгә сығарып ҡотлап үттеләр. Өфөнән саҡырылған ҡунаҡтар - Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары советы президиумы ағзаһы Әлфиә Шәрәфетдинова, "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире Йомабикә Ильясова, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, ауыл хакимиәте башлыҡтары юбилярҙарға матур теләктәрен еткереп, үҙ бүләктәрен тапшырҙы.

Әлбиттә, һәр ғаилә маҡтауға лайыҡ матур тормош юлы үткән. Шулар араһында ете ҡыҙға һәм өс малайға ғүмер биргән, береһе ут булғанда, икенсеһе һыу булған Клара менән Әхәт Сафиндар айырыуса һоҡланғыс һәм үҙенсәлекле ғаилә пары. Ғаилә именлеге, ғаилә сәләмәтлеге бер-беренә ихтирамдан башлана. Әхәт олатай менән Клара инәй ҙә ғүмер буйы бер-береһенең ҡәҙерен белеп, һөйөп, хәстәрләп йәшәй. Бергәлектән, иңгә-иң терәшеп йәшәүҙән сикһеҙ кинәнес табып, шунын һәр мәлен матур хәтирә итеп ҡалдырырға тырышҡан инәй менән олатайҙың да күҙҙәренән бөхет нуры һирпелә. Бына улар ни тине әңгәмә ваҡытында:

**Әхәт олатай:** Мин ғүмер буйы урман хужалығында эшләнем. 34 йыл ярым эшләгәндән һуң, милли паркка эшкә күсерҙеләр. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә һәр ваҡыт алдынғылар рәтендә булдым, йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаштым. Хөкүмәт минең хеҙмәтемде һәр ваҡыт тейешле баһалап торҙо, бер ваҡытта ла бүләкһеҙ ҡалғаным булманы. Ҡатыным янғыҙы донъя көттө, ун баланы тәрбиәләп үҫтерҙе. Мин иртән иртүк сығып киткәндән өйгә төнөн генә ҡайтып инә инем. Кисен ҡайтышлай бесән, утын тейәп ҡайтам да, ауҙарам да китәм, ҡатыным шуны үҙе хәстәрләп урынлаштыра ине. Ныҡ унған, талапсан булды ул. Ҡатыным менән беребеҙ әйткәнен икенсебеҙ тыңлап, гел татыу йәшәнек.

**Клара инәй:** Тормош иптәшем шул тиклем аҡыллы, әҙәпле, тыйнаҡ, сабыр булды. Кеше араһында үҙен тота белде, артыҡ һүҙ һөйләмәне, һөйләр булһа, аҡыллы, төплө итеп әйтте. Әхәтем һәйбәт булғас, миңә бала үҫтереүҙең дә бер генә ауырлығы булманы. Илле йыл бергә йәшәп, үҙ ғүмеремдә магазинға барып шырпы ла һатып алғаным булманы. Балаларыма кейем хәстәрләп йөрөмәнем, хатта уларҙың ниндәй размер кейеп үҫкәндәрен дә белмәнем. Сөнки барыһын да ул тапты, ул килтерҙе. Балаларға ниндәй кейем алып ҡайтһа, шул ярай торғайны. Эсмәне, тартманы, тырнаҡ осо менән дә рәнйеткәне булманы. Мин ут булһам, ул һыу булыр ине.

**Шулай итеп... байрамда тағы ла йәш әсәләргә, яңы тыуған бәпәйҙәргә изге теләктәр еткерелде, бүләктәр тапшырылды. Бөрйән таланттары кисәне йыр-моң, бейеү менән биҙәне. Был төйәктең гүзәл тәбиғәтенә генә түгел, хеҙмәт һөйгән, тормош ҡәҙерен белгән, матур балалар үҫтергән кешеләренә ҡарап күркәм тамаша ҡылып ҡайтылды. Тик бер нәмә генә күнелдә ҡыра биреп ҡуйҙы: залға халыҡ әллә ни күп йыйылмағайны. Ә бындай байрамдар юбилярҙарҙы ҡотлау өсөн генә түгел, уларҙың өлгөлө тормошона ҡарап бүтәндәр фәһемһабаҡ алһын өсөн дә ойоштороla бит.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

---

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

### Европаның билдәле шарлауыҡтары



Европала шарлауыҡтар иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Атлантик океанда Британ утрауҙарынан төньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан утрауҙы - Исландияны вулкандар һәм һикәлтәле йылғалар иле тип йөрөтәләр. Исландияның иң ҙур һәм билдәле шарлауығы - Хауифосс. Аҫҡа табан кинәйгән ап-аҡ таҫма төҫлө был шарлауыҡ 130 метрлыҡ базальт мәмерйәнән ағып төшә. Гудльфосс - Алтын шарлауыҡ 20 һәм 30 метрлыҡ ике тупһаһы менән хайран ҡалдыра. Был Алтын шарлауыҡ гәжәйеп, әммә ысынында булған бер ваҡиғаға бәйле. Был шарлауыҡ элек Сигурдур исемле һылыу ҡыҙы булған бер кешенең шәхси биләмәһенә ингән. Бер ваҡыт, ҡыҙы өйҙә юҡ саҡта, атай кеше шарлауыҡты гидроэлектростанция төҙөү өсөн сит ил компанияһына һата. Ҡыҙ был турала белеп ҡалғас: "Хоҙай биргән гүзәллек сит кешеләргә булырға тейеш түгел", - тип, Исландияның баш ҡалаһы Рейкьявикка юллана һәм адвокат яллай. Суд эше 15 йыл дауам итә һәм Сигурдур енеп сыға. Унын даны бөтә илгә тарала, ә адвокат Исландияның президенты итеп һайлана.

Норвегияның Ете ҡыҙ тип йөрөтөлгән, ете һыу ағымынан торған шарлауығы ла киң билдәле. Улар ағып төшкән Харденгер-Фьордтың икенсе яғында Кейәү шарлауығы, унан саҡ ҡына ситтәрәк Кәләш бөркәнсеге шарлауығы урынлашҡан. Бик борон, ете бер туған ҡыҙ бер егеткә ғашиҡ булған. Ҡыҙҙар береһенән береһе сибәрерәк булғас, егет уларҙың береһен дә һайлап ала алмаған. Шулай итеп, улар бер-береһенә бер нисек тә ҡушыла алмаған шарлауыҡтарға әйләнгән.

Финляндияның Иматра тип аталған шарлауығы тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр. 20 метр киңлектәге был шарлауыҡ 304 метр тирәһе шаулап аға. Швейцария йылғаларында ла шарлауыҡтар күп. Рейн шарлауығы тураһында "Рус сәйәхәтсеһе хаттары"нда Н. М. Карамзин да телгә ала.

*✓ Рәсәйҙәге кеүек кимәлдә эскелек Ҡаҙағстанда юҡ, бер йәш кешенең дә урамда һыра эсеп йөрөүен күрмәнем, ә тәмәкене барыһы ла тиерлек тарта. Йәштәр урамда күбеһенсә ҡаҙаҡ телендә һөйләшә.*



СӘЙӘХӘТНАМӘ

# ҠАҘАҠТАРҒА БАРҘЫМ...

## фәһем алдым, фекер тупланым



Илгиз Солтанморатов "Ағиҙел" Ҡаҙағстан башҡорт милли-мәҙәни ойошмаһы рәйесе, Ҡаҙағстан дәүләт архивының директор урынбаҫары Әхтәм Әҙелғужин һәм рәйес урынбаҫары Азамат Рыҫкилдин менән.

**Сит илгә сығыу, ундағы халыҡты, йәшәйеште күреп ҡайтыу кешенең тормош тәжрибәһен байытып ҡына ҡалмай, ә күңелдә һәр саҡ ниндәйҙер фекерҙәр ҙә уята. Бигерәк тә ғүмер баҡый аралашып йәшәгән төрки телле ҡәрҙәш халыҡтарҙың бөгөнгө хәле, тормош-көнкүреше, ундағы милли сәйәсәт, тел мәсьәләләре һәр беребеҙҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Шуға ла яңыраҡ эш сәфәре менән Ҡаҙағстанға барып ҡайтҡан социология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры вазифаһын башҡарыусы Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ менән әңгәмәбеҙҙә башлыса ошолар тураһында һөйләштек.**

### Унда милли сәйәсәт бик ябай

Ҡаҙағстанда бәләкәй сағында уҡ ошо төбәккә күсеп килгән, унда үҫкән, белем алған, эшләп йөрөгән бик рухлы башҡорт ағайы Азамат Рыҫкилдин менән танышырға тура килде. Ул мине Ҡаҙағстан буйлап оҙатып йөрөнө һәм шуға ла сәфәремдең һәр минутын дөрөҫ файҙаланып, күп нәмәләр күреп ҡайттым.

Ҡаҙағстандың, беҙҙең республика менән сағыштырғанда, милли сәйәсәте бик ябай, улар беҙҙәге кеүек халыҡ-ара стандарттарға, закондарға таянып эшләргә тырышмай. "Беҙ барыбыҙ ҙа Ҡаҙағстан халҡы, берҙәм булайыҡ, ныҡ булайыҡ", тигән лозунг менән йәшәй ундағы милләттәр. Әлбиттә, үҙ аллы дәүләтте Рәсәй Федерацияһы составында булған республика менән сағыштырыуы урынһыҙ ҙа кеүек, Башҡортостандың милли составы ла ҡатмарлы. Етмәһә, башҡорттар күрше төбәктәрҙә лә йәшәй, тарихи Башҡортостан тигән төшөнсә бар.

Унда барыһы ла бик ябай, әммә еренә еткереп эшләнә, башҡа милләт вәкилдәре лә Ҡаҙағстанда йәшәүен, уның төп халҡы ҡаҙаҡтар булыуын, шуға ла ул милләтте, уларҙың мәҙәниәтен, телен хөрмәт итергә кәрәк икәнлеген яҡшы аңлай. Был илдә 1 Май Халыҡтар дуҫлығы көнө, тип билдәләнә, шуға ла Астананың бер мәҙәниәт йортонда милли ойошмаларҙың концерты булды. Уны Башҡортостандың тел һәм милли сәйәсәтен ниндәйҙер кимәлдә белгән кеше булараҡ, бик ҡыҙыҡһынып ҡараным. Концертта урыҫ, татар, казак, поляк, кавказ халыҡтарының, башлыса, чечендарҙың сығыштары булды һәм концерттың аҙағында казак милли кейемендәге бер ҡатын сәхнәгә сығып, һәр ҡаҙаҡҡа яҡын булған патриотик йырҙы ҡаҙаҡса башҡарып, ерле халыҡҡа үҙенең хөрмәтен белдерҙе.

Шуныһы үкенесле, Ҡаҙағстандың һәр өлкә үҙәгендә татар-башҡорт үҙәктәре бар, тик унда башҡорт милләтле берәү ҙә юҡ. Был концертта ла ошо татар-башҡорт үҙәгенең йәштәре татар милли кейемендә сәхнәгә сығып, "Без татар яшләре" тип йырлап ебәрҙе.

Ҡаҙағстан нисек кенә яҡын булмаһын, беҙҙең яҡтан уларға мәғлүмәт етмәй. Улар Рәсәйҙе, унда булған яңылыҡтарҙы белә, әммә башҡорт, татар кеүек туғандаш халыҡтарҙың тормошо тураһында хәбәрҙар түгел. Шулай ҙа унда Татарстан телевидениеһын ҡарайҙар. Шуға ла әлеге ваҡытта Азамат Рыҫкилдин Ҡаҙағстанда беҙҙең БСТ ла күрһәтһен өсөн ике яҡ менән дә һөйләшеүҙәр алып бара, сөнки беҙҙең милләттәштәр унда күп, ҡаҙаҡтар ҙа беҙҙең йырбейеү сәнғәте менән ихлас ҡыҙыҡһына.

Беҙҙең Рәсәйҙәге кеүек кимәлдә эскелек Ҡаҙағстанда юҡ, бер йәш кешенең дә урамда һыра эсеп йөрөүен күрмәнем, ә тәмәкене барыһы ла тиерлек тарта. Йәштәр урамда күбеһенсә ҡаҙаҡ телендә һөйләшә.

Ҡаҙағстанда енәйәттәр юҡ кимәлендә. Тәртип бик ҡаты ҡуйылған. Мәҫәлән, бер ҡала ситендә ҡар һыуынан хасил булған бәләкәй күлдәрҙә аҡкоштар йөҙөп йөрөй ине. Кеше теймәй уларға, сөнки тәртип ҡаты, штраф күләме лә ҙур. Хатта балыҡ тотоу өсөн бер ҡармаҡҡа 250 һум тирәһе түләп, лицензия алырға кәрәк. Ҙур аҡса ла түгел, уйлап ҡараһаң, тик кешене тәртипкә лә өйрәтә, шул уҡ ваҡытта ҡаҙнаға әҙме-күпме аҡса ла керә. Кешегә шарттар ғына тыуҙырырға кәрәк, шарттар булһа, ул башҡаһын үҙе лә йүнләй. Ҡаҙағстандың үҙ аллы дәүләт булыуы, ундағы милли идея, рух күтәренкелеге генә уны алдынғы дәүләт итмәй. Унда хөкүмәт социаль гарантияларҙың тормошҡа ашырылыуына ҙур иғтибар бирә. Шуға ла Ҡаҙағстанда эскелек тә, эшһеҙлек тә юҡ кимәлендә, халыҡ иҫәбе лә артыуын дауам итә.

### Киләсәк - йәштәр ҡулында

Астана бик үҫешкән, дүртбиш йыл эсендә далала әкиәттәге кеүек иҫ китмәле ҡала ҡалҡып сыҡҡан. Төҙөлөш унда төндә лә туҡтамай. "Ҡаҙағстан ҡеүәтле ил, тик бындай төҙөлөштәр өсөн шул тиклем ҙур аҡса юҡ бит һеҙҙә", тип һорайым. "Әлбиттә, юҡ", тиҙәр. Ҡаҙағстан халыҡ-ара кимәлдәге инвестицияларға юл асҡан, халыҡ-ара кимәлдә үҙен күрһәтеп, унда үҙенең урынын биләргә тырыша.

Ҡаҙағстандың йәштәрҙе уҡыта торған "Болашаҡ" тигән программалары бар. Бына ошо программа сиктәрендә бер нисә быуын йәштәр сит илдәрҙә иҡтисади-финанс эштәре, халыҡ-ара бәйләнештәр буйынса уҡып, тәжрибә туплап, хәҙер үҙ илдәренә ҡайтҡан һәм бар көсөн илде күтәреүгә һала. Шуға уларҙың халыҡ-ара кимәлдәге дипломат, эшҡыуарҙары бик күп. Был эшҡыуарҙар хәҙер Ҡаҙағстанда ғына түгел, Үзбәкстанда, Ҡырғыҙстанда, Мәскәүҙә, хатта беҙҙә лә эшләй. Тимәк, Ҡаҙағстан 90-сы йылдарҙың башында уҡ йәштәргә ышанып, уларҙы уҡытып, киләсәккә аҡса һалған һәм хәҙер шуның емештәрен татый.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, Ҡаҙағстанда яңы ғына сираттағы халыҡ иҫәбен алыу үтте. Тәүге мәғлүмәттәр буйынса, әле Ҡаҙағстан халҡының 67 проценты - ҡаҙаҡ. 1989 йылда уларҙың һаны 30 процент тирәһе ине, тимәк, егерме йыл эсендә ҡаҙаҡтар ике тапҡырға артҡан. Был дәүләт сәйәсәте менән дә бәйле, сөнки унда социаль, йәштәрҙе үҫтереү, милләттәштәрҙе илгә ҡайтарыу программалары яҡшы тормошҡа ашырыла. Алма-Атаға поезд менән инеп барғанда, шундай күренешкә тап булдым. Тимер юлы буйлап ер участкалары урынлашҡан, уның һәр береһендә кешеләр төҙөлөш менән булыша. Былар илдәренә әйләнеп ҡайтыусылар икән. Уларға ер, документтар һәм ниндәйҙер кредиттар менән дәүләт ярҙам итә, тик төҙөһөндәр, ҡайтһындар ғына. Был яҡтан Ҡаҙағстандан үрнәк алырға була, улар ниндәй программа ғына ҡабул итмәһен, нимәгә генә тотонмаһын, уны аҙағынаса алып барып еткерә.

### "Урал батыр" эпосы һәм үлән ҡурай

Мин Ҡаҙағстанға БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы тарафынан "Төрксой" ойошторған ғилми симпозиумда ҡатнашыу өсөн ебәрелгәйнем. Был симпозиум рухи-мәҙәни мираҫты һаҡлауға арналды. Белеүегеҙсә, "ЮНЕСКО" раҫлаған рухи-мәҙәни мираҫ теҙмәһе бар, ә Рәсәй был килешеүгә ҡул ҡуймаған һәм беҙ хәҙер "Урал батыр" кеүек ҡомартҡыларыбыҙҙы хоҡуҡи яҡтан унда индерә алмайбыҙ. Шуны аңлап, "Төрксой" ярты йыл самаһы элек төрки халыҡтарының матди булмаған ҡомартҡылары теҙмәһен булдырып, дөйөм төрки халыҡтары мираҫы итеп "ЮНЕСКО"ның реестр исемлегенә индереү мөмкинлеген ҡарағайны. Былтыр Анкарала булған беренсе осрашыуға БР Фәндәр академияһының вице-президенты Әхәт Мостафин барғайны, икенсеһе быйыл Алма-Атала үткәрелде. Мин "Урал батыр" эпосын башҡарыу һәм боронғо үлән ҡурайында уйнау оҫталығын ошо исемлеккә индереү фекере менән сығыш яһаным. Алдан уйлап, сығышымды өс телдә - башҡорт, урыҫ, инглиз телдәрендә әҙерләгәйнем, шулай ҙа барыһы ла аңлаһын, тип, урыҫ телендә сығыш яһаным, сөнки ҡаҙаҡтар башлыса урыҫса һөйләшкәс, улар телде яҡшы аңлай, урыҫ телен тәржемәсе төрөксәгә әйләндерҙе, бер юлы экранда презентация барҙы. Телмәремдә шуларға баҫым яһарға тырыштым: хәҙерге заманда шундай парадокс тыуа, бер яҡтан, һуңғы егерме йыл эсендә ҡурай сәнғәтен үҫтерҙек, уны төрлө уҡыу йорттарында уҡыталар, милли музыка ҡоралдары оркестры бар, ҡурай моңо бөтә концерттарҙа ла яңғырай, әммә боронғоса итеп, мондо төшөнөп, үлән ҡурайҙа уйнаусы ҡурайсыларыбыҙ кәмей бара, йәғни шундай бейеклеккә күтәрелеп тә, боронғо тамырҙарыбыҙҙы юғалтыу хәүефе бар. "Урал батыр" эпосы дәреслектәрҙә бар, йыл һайын уны бер нисә телдә яттан һөйләү буйынса конкурс үтә, ул күп телдәргә тәржемә ителгән, әммә эпос, ҡобайырҙар элегерәк икенсе төрлөрәк башҡарылған, ул бер кешенең - сәсәндең тотош театр тамашаһына әүерелгән. Хәҙер эпосты былай итеп һөйләүсе юҡ. Сығышым барыһына ла оҡшаны, барыһы ла аңланы, артабан да бергә эш алып барырға, тигән тәҡдимдәр булды.

### Шулай ҙа йәшәргә була

Ҡайтышлай, мин Петропавловск ҡалаһында булдым. Ул беҙҙең Сибай кеүек бәләкәй генә ҡала, халҡы 100 мең. Унда килеп төшөү менән, дөрөҫөн әйткәндә, хайран ҡалдым: урамдар тап-таҙа, ә ҡаланы тотҡан, уны баҡҡан бер генә лә предприятие ла, сәнәғәт тә юҡ. Кешеләрҙән: "Нисек йәшәйһегеҙ һуң?", - тип һорайым. Баҡтиһәң, унда кемдең машинаһы бар - ул таксист, кемдер төҙөлөштә эшләй, кемдеңдер үҙенең ниндәйҙер фирмаһы, магазины бар, йәғни, кешеләр бында бер-береһен хеҙмәтләндереп йәшәй. Бына шулай ҙа йәшәргә була икән, тип ҡайттым. Бәләкәй ҡала, ә 50 метр һайын кафе осрай, бер урамды ябып, Арбат кеүек йәйәү йөрөй торған урам эшләгәндәр, ағастар шаулап үҫә, йорттар, ихаталар, урамдар төҙөк. Йәшәү шарттары иҫ киткес яҡшы, хатта унда һуңғы йылдарҙа шундай тенденция күҙәтелә: бер нисә саҡрымда ғына ятҡан Ҡурғандан кешеләр бында күсеп килә башлаған.

**Шулай итеп...**

**Бар нәмә сағыштырыуҙа яҡшыраҡ күренә шул. Ниндәй генә дәүләт булмаһын, уның миҫалында өлгө лә, фәһем дә алырға була. Тик илдә тәртип булдырыу һәм йәшәү өсөн яҡшы шарттар тыуҙырыу ил етәкселегенә иңендә булһа, ҡалғаны кешенең үҙенең ҡулында икәнен дә онотмайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**28-29 майҙа Сибай ҡалаһында РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БР мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, БР Фәндәр академияһы, Сибай ҡалаһы хакимиәте һәм БДУ-ның Сибай институты "Башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтендә, этнографияһында һәм антропологияһында евразиялылыҡ феномены" тип аталған Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғара. Конференцияла башҡорт милләтенең Көньяҡ Уралдың иң боронғо автохтон халыҡтарының береһе булараҡ формалашыу этаптарын яҡтыртҡан мәғлүмәттәр ҡараласаҡ. Ошо конференцияға әҙерләнгән материалдарҙың береһен һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕЙҘӘР, ТАРХАНДАР...

## Башҡорт телендәге архаик титул атамалары тураһында

Башҡорт халҡының урта быуаттар осорондағы социаль ҡатламдары тарихсылар тарафынан ошо көнгә тиклем ныҡлап тикшерелмәгән өлкә булып ҡала килә. Был турала тарих фәндәре докторы Әнүәр Әсфәндийәров: "Беҙҙә юғары ҡатлам вәкилдәре - дыуан, кенәз, тархан, бей, улыс старосталары, старшиналар йәки төп халыҡ массалары - патриархаль ҡолдар, яҫыр, туҫнаҡ, байғош, ябай общинниктар тураһында яҙылған бер генә ҙур хеҙмәт тә юҡ. Был проблеманы өйрәнеүҙәге ауырлыҡтар тарихи сығанаҡтарҙың аҙ булыуы менән аңлатыла", - тип билдәләй үҙенең "Башҡорт тархандары" тип аталған хеҙмәтенә яҙған баш һүҙендә. Әйткәндәй, Әнүәр Әсфәндийәровтың 2006 йылда "Китап" нәшриәтендә рус телендә донъя күргән был китабы башҡорттарҙың социаль ҡатламдары тарихын өйрәнеү буйынса тәүге ҙур монографик хеҙмәттәрҙең береһе булып тора. Унда автор "тархан" терминының этимологияһы, башҡорттарҙа тарханлыҡ институтының барлыҡҡа килеү, үҫеү һәм бөтөрөлөү тарихын ентекле өйрәнә.

Башҡорт ерлегендә тыуған тарихи-әҙәби (шәжәрә, тәуарих) һәм фольклор (легенда, риүәйәт, эпос, ҡобайыр, хикәйәт, ҡисса) сығанаҡтарынан күренеүенсә, урта быуаттарҙа башҡорттар араһында юғары (аристократик) ҡатламдарҙы бейҙәр, хандар, тархандар, батырҙар, аҡһаҡалдар тәшкил иткән. Ҙур булмаған был мәҡәләлә беҙ, тарихсы һәм филолог булараҡ, бына ошо социаль ҡатламдарҙың атамаларына тарихи-лексикологик күҙлектән байҡау яһамаҡсыбыҙ.

Төрлө яҙма ҡомартҡыларҙан күренеүенсә, үрҙә һаналған социаль ҡатламдар башҡорттарҙа монгол яулап алыуҙарына тиклем үк булған һәм ярайһы уҡ үҫеш алған. Мәҫәлән, "Болғарҙар менән башҡорттар", "Бөрйәндәр хан замандарында", "Бошман-Ҡыпсаҡ батыр", "Аҡман-Тоҡман", "Мөйтән", "Аҡһаҡ Тимер", "Бабсаҡ менән Күсәк бей", "Әүлиә тауы" риүәйәттәрендә, Ҡара-Табын ырыуы, Үҫәргән ырыуы, Табын ырыуы шәжәрәләрендә был титулдар йыш телгә алына.

Ошо тарихи-әҙәби ҡомартҡыларҙан күренеүенсә, бейҙәр ырыу йәиһә бер нисә ырыу берләшмәләренең башлыҡтары булып торған. Ҡайһы бер осраҡтарҙа бындай эре ырыу берләшмәләренең башлығын хан тип тә атағандар. Һуғыш яланында улар ғәскәр башлығы ролен дә үтәгән. Бейҙәр (хандар) эске эштәр, хужалыҡ тормошондағы мөһим проблемаларҙы, яу сабыу, яу ҡайтарыу кеүек мәсьәләләрҙе аҡһаҡалдар йәиһә бөтә ырыу йыйындарында халыҡ менән кәңәшләшмәйенсә, бер яҡлы ғына хәл итә алмаған.

Хәҙер был һүҙҙәрҙең этимологияһы хаҡында бер нисә һүҙ. Э.В. Севортяндың "Төрки телдәренең этимологик һүҙлеге"ндә, төрки телдәренең күпселегендә, шулай уҡ ҡайһы бер монгол, тунгус-маньчжур телдәрендә төрлө фонетик варианттарҙа (бек, бег, бий, би һ.б.) осраған бей һүҙе "башлыҡ", "етәксе", "юғары дәрәжә", "почетлы титул" мәғәнәләрен аңлатыусы бег, биг тигән лексик берәмектәргә барып тоташа (бег > бей, биг > бий), тип күрһәтелә. Сағыштырыу өсөн: төркмән, азербайжан, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, тыва телдәрендә - бек, бей; төрөк, ҡырым татарҙары, ҡараим, нуғай - бей; ҡырғыҙ, үзбәк, алтай - бий; ҡаҙаҡ телендә - би һ.б.

Севортян һүҙлегендә төрлө телдәрҙә бына шулай төрлө фонетик варианттарҙа йөрөгән бей лексемаһының тиҫтәнән ашыу мәғәнә төҫмөрҙәре бирелә. Мәҫәлән, төрлө сығанаҡтар буйынса, татар, төркмән, ҡырым татарҙары телдәрендә, ҡараим теле диалекттарында был һүҙ "сығышы менән күренекле ҡатлам кешеһе"; ҡаҙаҡтарҙа - "иҙеүсе (эксплуататор), феодал синыфтар вәкиле"; ҡарағалпаҡтарҙа - "бәләкәйерәк ырыу-ара бүленеш башлығы"; төркмән, ҡумыҡ телдәрендә - "кенәз (феодал, помещик титулы)"; ғағауыз, ҡарлуҡ, ҡырғыҙ, алтай, хакас, уйғыр телдәрендә - "хаким", "башлыҡ"; ҡараим теле диалекттарында "хан" мәғәнәләрендә ҡулланыла.

Һуңғы миҫалдан күренеүенсә, ҡараим теленең траҡай диалектында бей лексемаһы үҙендә "хан" мәғәнәһен тота. Башҡорттарҙа ла ҙур ырыу берекмәләре башында тороусының хан тип аталыуы үрҙә әйтелгәйне инде. Хан, тархан лексик берәмектәренең килеп сығышын фин ғалимы, күренекле тюрколог Г.И. Рамстедт үҙенең "Алтай тел ғилеменә инеш" хеҙмәтендә ҡаһан (каган) һүҙе менән бәйләй. Билдәле булыуынса, VI-VII быуаттарҙа Дәшт-е-Ҡыпсаҡ далаларын иңләп ятҡан Бөйөк Төрки ҡағанаты менән ҡаһан етәкселек иткән. Хан, ҡаһан, ҡаған титулдарының бер тамырҙан яһалып, ырыу-ҡәбилә системаһында юғары дәрәжә атамаларын белдереүе башҡорт халыҡ ижадында киң билдәле "Бөрйәндәр хан замандарында" тарихи риүәйәтендә лә асыҡ күренә: "...Ҡыпсаҡтар килеп сыҡҡансы, бөрйәндәр ер йөҙөндә әллә ҡасан уҡ йәшәгән. Хан-ҡаһан замандарынан...".

Ә бына тархан терминының этимологияһына килгәндә, шул уҡ Г.И. Рамстедт уны син-корей телендәге tarkwan һүҙе менән бәйләнештә ҡарай һәм унының ике морфеманан - tar + kwan (хан) - тороуын күрһәтә. Бында tar корей телендә "бөйөк" (великий) мәғәнәһендә ҡулланыла. Шулай итеп, Рамстедт версияһы буйынса, тархан титулы "бөйөк хан (ҡаһан)", "етәкселек итеүсе хан йәки хан-шеф" ("руководящий хан или хан-шеф") мәғәнәләрен аңлата.

Ғөмүмән, тархан һүҙенең этимологияһы буйынса тюркологтарҙың фекерҙәре төрлөсә. Беҙҙең ҡарашҡа, тархан һүҙе тәү башта яу ҡоралдары эшләү менән шөғөлләнгән оҫта - "тимерсе" мәғәнәһендә ҡулланылыуы бик ихтимал. Сөнки һуғыш кәрәк-яраҡтары бөтә яҡтан сит ырыу-ҡәүемдәр уратаһында йәшәгән дала кешеләре өсөн иң кәрәкле нәмә булыуы бәхәс тыуҙырмай. Шундай мөһим эш менән шөғөлләнгән оҫтаға, әлбиттә, ниндәйҙер ташламалар ҙа яһалған булырға тейеш. Һәм һуңыраҡ тархан һалымдарҙан азат ителгән, башҡа төрлө өҫтөнлөктәр менән файҙаланған хәрби хеҙмәт кешеләренең титулы булып киткән булыуы ихтимал. Үҙенең үрҙә телгә алынған хеҙмәтендә Ә.З. Әсфәндийәров тархандарға шундай билдәләмә бирә: "Шулай итеп, башҡорт тархандарының... иң төп бурысы булып хәрби хеҙмәт торған. Бындай хеҙмәтте иҡтисади яҡтан бойондороҡһоҙ булған кешеләр генә алып бара алған".

Башҡорт йәмғиәтендә, бей, хан, тархандар менән бер рәттән, аҡһаҡалдар менән батырҙар ҙа мөһим роль уйнаған. Мәҫәлән, "Аҡман-Тоҡман" риүәйәтендәге Сураман батыр, "Әүлиә тауы"ндағы мең батыры, "Биксура"лағы Биксура батыр һ.б. халыҡты ирекле тормош өсөн яуға күтәргән, үҙҙәрен һуғыш ҡырҙарында ғәйрәтле итеп танытҡан батырҙар, ғәскәр башлыҡтары рәүешендә һүрәтләнә. Батыр, шулай уҡ аҡһаҡал лексик берәмектәренең дөйөм төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәре булыуы бәхәс тыуҙырмай. Шулай уҡ был һүҙҙәрҙең семантикаһы ла һәр кемгә яҡшы аңлашыла торғандыр.

Шулай итеп, үрҙә ҡарап үтелгән юғары дәрәжә атамаларын белдергән лексемаларҙың (уларҙың ҡайһы берҙәре хәҙер инде историзмға әйләнгән) араһында күпселекте төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәре тәшкил итә. Был беҙгә XIII быуат баштарына, йәғни монгол яуҙарына тиклем үк, башҡорт йәмғиәте төҙөлөшө төрлө социаль ҡатламдарҙың барлыҡҡа килеү юлында үҫеш-үҙгәрештәр кисергән, тигән һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Был осорҙарҙа ырыу-ҡәбилә ҡоролошонда ла ҙур ғына үҙгәрештәр күҙәтелә, йәғни ырыу системаһында ҡан-ҡәрҙәшлек принциптары икенсе планда ҡала. Ырыу берләшмәләре ябай ҡан-ҡәрҙәштәр берләшмәһе генә түгел, ә бейҙәр, хандар, аҡһаҡалдар кәңәше (бөтә ырыу йыйыны) тарафынан етәкселек ителгән, үҙ ғәскәре булған протодәүләтте хәтерләтә.

Алтын Урҙа осоронда социаль һәм сәйәси үҫеш-үҙгәрештәр артабан камиллаша. Билдәле сәбәптәр арҡаһында (тау-урманлы тарафтарҙың традицион күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн яраҡһыҙ булыуы, башҡорт ырыуҙарының Монгол дәүләте составына автономиялы өлкә булараҡ инеүе) башҡорттар Алтын Урҙа составында ла эске йәмғиәт ҡоролошон, социаль бүленешен, үҙидаралығын һ.б.ш. һаҡлап ҡала алған. Улай ғына ла түгел, артабан да башҡорттарҙың дәүләт төҙөлөшө системаһында ҙур үҫеш күҙәтелгән. Был хаҡта венгр миссионеры Иоганканың 1320 йылда үҙ орденының генералына "баскардтар" илендәге хәл-ваҡиғалар тураһында яҙған хатында ла телгә алына. Башҡорттар тураһында яҙып ҡалдырған башҡа сит ил сәйәхәтселәренән айырмалы рәүештә, Иоганка башҡорт халҡы араһында 6 йыл йәшәгән һәм төрлө яҡлап уларҙың тормошо хаҡында хәбәрҙар булған. Унының яҙмаларынан күренеүенсә, ул замандағы Башҡорт иленең (Баскардия) хакимы һәм күпселек халҡы мосолман булған. Шулай итеп, был мәғлүмәт XIII-XIV быуаттарҙа уҡ башҡорттарҙа дәүләтселек башланғысының булыуы тураһындағы фекерҙе иҫбатлай.

**Ғәҙилә һәм Илдус БҮЛӘКОВтар.**

ШАҢДАУ

# ЯТ ЯРЛЫҠАМАЙ, үҙеңдеке үлтермәй...

**Гүзәл Иҫәнгилдинаның "Урыҫтан... сусҡа башы ҡотҡарҙы, йәки Ҡатнаш никахтар кем өсөн отошло?" (20-се һан) тигән мәҡәләһен уҡығас, мин дә күптән күңелемдә йөрөгән уйҙарымды яҙып китергә булдым. Мин урта мәктәпте тамамлап, Өфөгә китер алдынан әсәйемдең әйткән һүҙҙәрен һәр ваҡыт күңелемдә йөрөтәм: "Балам, Өфөлә икенсе милләт егеттәре бик күп, әммә үҙебеҙҙең башҡорт егеттәренә уларҙың береһе лә етмәйәсәк...", тигәйне ул.**

Гүзәл һылыу бик мөһим проблема күтәргән. Был хаҡта мин дә күптән үҙем белгән егет-ҡыҙҙарға аңлатыу эше алып барам. Башҡорт-төрөк лицейында эшләгәндә лә өлкән синыф уҡыусыларына "үҙебеҙҙең милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡороғоҙ", тип әйтә килдем. Хәҙер уҡыусыларым мине күреп ҡалһа, әллә ҡайҙан һаулыҡ һорашып, үҙҙәренең башҡорт ғаиләһе ҡора алыуына һөйөнөсөн белдереп үтә.

Минең ике туған Айһылыу апайым бар ине. Ул урыҫҡа кейәүгә сыҡты. Тәүҙә бер ни һиҙҙермәне, яҙмышына риза ла һымаҡ ине, тик өлкәнәйгәс, ғүмере үткәс кенә "Үҙ милләтеңә етмәй шул, ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй", тине. Бына шул һүҙҙәрҙе әйтер өсөн ғүмерен сарыф итте булып сыға бит.

Элек бер егет миңә: "Рита апай, ә мөхәббәт тойғоһон ҡайҙа ҡуябыҙ, бына мин икенсе милләт кешеһен яратһам, ни эшләргә?" - тине. Мин уға: "Ир кеше бәхетле булһын өсөн уға "атай" тип өндәшкән балалары кәрәк. Балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең һинең нәҫелеңде дауам итмәһә, һинең донъяла йәшәүең нимәгә хәжәт?" тип яуапланым. "Борсолмағыҙ, апай, бына, күрерһегеҙ, минең балаларым барыһы ла үҙебеҙҙең милләт кешеләре булып үҫәсәк", тине лә егетем, үҙе һайлаған юл буйлап китте. Шунан һуң 20 йыллап ваҡыт үткәндер, урамда инде ир уртаһы йәшенә еткән, сәсенә сал төшкән теге егетте осраттым.

-Йә, ҡустым, бәхетлеһеңме, нисә балаң бар? - тип һораным мин уны танып.

-Эй, Рита апай, һеҙҙең һүҙҙәрҙе иҫкә төшөргән ваҡыттарым күп булды. Өс балам бар, өсөһө лә әсәләре телендә һөйләшә. Өлкән улым иһә минең дә, әсәһенең дә милләтен һайламаны, өсөнсө милләт ҡыҙына өйләнде. Үҙенең намыҫына тейергә теләп, әйтә башлағайным: "А ты, папа, сам женился на маму, что ты всякую ерунду болтаешь?" - тип ауыҙымды асмаҫлыҡ итеп яптырҙы...

Был егеткә йәлләүҙән башҡа тағы ла нисек ярҙам итәһең инде? Йәлләү менән дә унының хәле яҡшырып китмәй. Шулай ҙа ошо егет хәленә ҡалмаһын өсөн әле ғаилә ҡороп өлгөрмәгән егет-ҡыҙҙарға шул хаҡта белдерге килә: һәр кемде Аллаһы Тәғәлә үҙ даланы, бәхете менән тыуҙыра. Ул далан, ул бәхет кешегә нәҫелен ишәйтер, тоҡомон арттырыр өсөн бүләк ителә. Ә инде ошоларҙы файҙаланып, бәндә нәҫелен ишәйтеп, тоҡомон арттыра алмай икән, ул, алтын һарайҙарҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, барыбер бәхетле кеше түгел. Беҙ донъяға төрлөсә: төрлө телле, ғөрөф-ғәҙәтле, тән төҫлө итеп яратылғанбыҙ. Тәбиғәттәге тереклек тә шулай, бер генә төр үләндең дә, тере йән эйәләренең дә әллә нисәмә төрлө бүленештәре бар. Һәм бер ваҡытта ла, үлән, ағас һеркәләре яңылышмай, үҙенекен таба, тере йән эйәләре, хатта хайуандар ҙа тик үҙенең нәҫелен арттырыр, ишәйтер өсөн йәшәй...

**Рита ЯҘЫҠБАЕВА.**

✓ *Билдәле режиссерыбыҙға бер урыҫ кешеһе ошо факт менән бәйле хат яҙып, башҡорттарҙың уны Салауат Юлаевҡа тиң булырҙай тағы ла бер милли батыр дәрәжәһенә күтәрмәүенә нығ ғәжәпләнеүен белдергән.*



# ДОШМАНДАН ҠУРҠҠАН – ә башҡорттарға ундай

**Һуңғы йылдарҙа боронғо һәм яңы Башҡортостан тарихы буйынса байтаҡ ғилми хеҙмәттәр яҙылып, тиҫтәләгән китаптар баҫылып сыҡты. Шуға ҡарамаҫтан, тарихыбыҙҙа өйрәнелмәгән аҡ таптар күп әле. Үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙ асыҡламаһаҡ, уны үҙ файҙаһына ауҙарыусылары табылып торасаҡ. Тарих фәндәре докторы, профессор, "Көньяҡ-көнсығыш Рәсәй ҡалалары XVIII быуатта" китабы авторы Роза Ғафар ҡыҙы БУКАНОВА менән көнүҙәк тарихи проблемаларға арналған әңгәмәбеҙҙе һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

▶ **Һәр кеше билдәле бер тарихи дәүерҙә йәшәй һәм уны тарих төпкөлөндә йәшәгән ниндәйҙер ҡәүемдәр менән бәйләп тә булмаҫлыҡ һымаҡ. Әммә һәр кемдең нәҫел линияһы буйлап быуаттар төпкөлөнә уйҙан ғына булһа ла инә барһаң, тарих башында йәшәгән кешеләр менән дә бәйләнешебеҙ булыуы раҫҡа сыға. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың архаик замандарҙа уҡ Урал ерлегендә барлыҡҡа килгән цивилизацияларға мөнәсәбәте бармы икән?**

Халыҡтарҙың килеп сығышын этнологтар тикшереп, сағыштырып, ниндәйҙер һығымталар яһарға тырыша. Әлбиттә, тәүтормош община ҡоролошо замандарынан да алдараҡ кешелектең килеп сығышы хаҡында төрлө фәнни һәм дини ҡараштар бар, ул фараздар тураһында тәфсирләп һөйләп тороуҙың кәрәге юҡ. Айырым кешеләрҙең генә түгел, тотош халыҡтарҙың да йәшәйешендә башҡа зат-ҡәүемдәр менән бәйләнеш бик көслө булған. Беҙ хәҙер башлыса бер урынға ерегеп йәшәргә күнегеп киткәнбеҙ, ә элекке замандарҙа халыҡтарҙың бер ерҙән икенсе яҡҡа күсенеп йөрөүе ғәҙәти хәл булған. Мәҫәлән, Көнсығыш әкиәттәрендә сәйәхәт итеү менән бәйле мажараларға ҙур урын бирелә. Ул дәүерҙә сәйәхәт итеү белем туплау сығанағы булыуын да онотorға ярамай. Сит ерҙәрҙә башҡа халыҡтар менән аралашып, уларҙың телдәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеп, көнитмештәре, һөнәрҙәре тураһында белем туплаусы сәйәхәтселәр төрлө ҡәүемдәр араһында мәҙәни бәйләнеш булдыра алған.

Урал тарихын, башҡорттарҙың тарихи үҫешен ғилми яҡтан ҡарағанда, ул донъя цивилизацияһы критерийҙары менән тулыһынса тап килә. Тик беҙ үҙебеҙ ошоно бөтә тәрәнлегендә аңлап етмәйбеҙ шикелле. Бына яңыраҡ режиссер Әнүәр Нурмөхәмәтов тураһында телетапшырыу булғайны, уның бер фекере бик тәьҫирле булды. Һүҙ Александр Матросов исеме аҫтында тарихҡа ингән Шакирйән Мөхәмәтйәнов тураһында бара ине. Билдәле режиссерыбыҙға бер урыҫ кешеһе ошо факт менән бәйле хат яҙып, башҡорттарҙың уны Салауат Юлаевҡа тиң булырҙай тағы ла бер милли батыр дәрәжәһенә күтәрмәүенә нығ ғәжәпләнеүен белдергән. Күрәһең, ошо урыҫ кешеһе белдергән фекер менән ризалашмайынса булмай: милләттәштәребеҙ әлегә был фактты бөтә тулылығында баһалай алыу кимәленә етмәгән. Боронғо тарихыбыҙ буйынса мәғлүмәттәр бик аҙ, унда онотолған, йәиһә бөтөнләйгә өйрәнелмәгән ҡатламдар бар. Әле беҙгә сағыштырмаса яҡын булған тарихи ваҡиғаларға ла объектив баһа биреү фарыҙ.

Шулай ҙа хәҙергә тиклем өйрәнелгән һәм асылған тарихи мәғлүмәт күләме лә башҡорт тарихын бөтә донъя тарихы менән сағыштырыу мөмкинлеген бирә. Донъя тарихының башын туфан һыуы ҡалҡыу менән бәйләп аңлаталар. Геология фәненән билдәле булыуынса, тәүҙәрәк климаттың саманан тыш һыуыныуы сәбәпле боҙлоҡ осоро булһа, һуңынан ер өҫтөн һыу баҫып китә. Был факт Библияла ла сағылыш тапҡан. Һәләкәттән Аллаһ юлынан тайпылмаған Нух бәйғәмбәр ғаиләһенә генә ҡотолоу сараһы бирелә: ул ҙур кәмә төҙөп, бөтә тере йәндәрҙең берәр парын ошо кәмәгә тейәп, Арарат тауына юллана. Туфан һыуы ҡайтҡас, Ерҙә тормош яңынан башлана. Шул хаҡта уйланһаң, ҡыҙыҡлы фекерҙәр тыуа.



Бөтә донъяны һыу баҫыу тураһындағы сюжет бик аҙ халыҡтарҙың ғына мифологияһында сағылыш тапҡан: йәһүдтәрҙең Тәүратында, шумер эпостарында һәм беҙҙең "Урал батыр" эпосында. "Урал батыр"ҙа Йәнбирҙе менән Йәнбикә йәшәгән ҡоро ерҙең дүрт тарафы ла һыу менән уратылған булыуы, әммә бында кешеләр, йәнлектәр һәм үҫемлектәр өсөн бар шарттарҙың да етерлек булыуы тасуирлана. Тимәк, халыҡтың боронғо хәтерендә хәҙерге Урал тауҙары итәктәренең тулыһынса һыу аҫтында ҡалмауы, бында йәшәгән халыҡтың бер ҡайҙа ла ҡасып китмәүе тураһында мәғлүмәт һаҡланып ҡалған. Туфан һыуҙары кибеп, ерҙәр асылғас, Урал тауы армыттары араһынан Иҙел, Яйыҡ һ.б. йылғалар ағып сыға. Үҙен үлемдән ҡотҡарыусы Уралды (Урал тауын) халыҡ изгеләштерә, һәм ошо ерҙе үҙе йәшәр мәңгелек төйәккә әйләндерә. Башҡорттоң этник психологияһында ошо ергә йәбешеп ятыу, уға ҡарата мәңгелек һөйөү, ватансылыҡ кеүек сифаттар архаик замандарҙа уҡ яралған тип әйтергә хаҡыбыҙ бар. Был тарихи һабаҡ башҡорт халҡының милли үҙаңында мәңгелеккә тороп ҡалған.

Беҙҙең төйәгебеҙҙең, уның тарихының тағы ла бер үҙенсәлеге бар: бында йәшәгән кешеләрҙең тарихи аңы бик ныҡ үҫешкән, бөтә ер, һыу, һауа үҙе тарих менән һуғарылған төҫлө. Яҡташтарыбыҙ һөнәре буйынса кем генә булмаһын: филологмы ул, географ йәиһә юрисмы, барыһы ла тарихыбыҙ менән ҡыҙыҡһына, үҙ фекерен әйтергә тырыша, үҙен дә тарихсы итеп тоя. Хатта ситтән килгән кешеләрҙе лә бындағы тарих арбап алғандай тойола, һәр хәлдә, быға тиклем тарихҡа битараф заттар ысынлап тороп тарихи ваҡиғалар тураһында уйлана, матбуғатта сығыш яһай башлай. Борондан килгән тарихи линия тап беҙҙең ерлектә эҙмә-эҙлекле рәүештә бер осорҙан икенсе осорға ялғана барып, өҙөлмәйенсә һаҡлана килә. Мин тап шуның өсөн башҡорттарҙың тарихи үҙаңының күп быуаттар дауамында бик ҡеүәтле рухи көс булып ҡалыуына ышанам. Ошо тарихилыҡ сифаттары бында күҙгә бәрелеп тора, һәм ул Башҡорт еренә ситтән килгәндәргә айырыуса нығ тәьҫир итә.

▶ **Әйткәндәй, башҡорттар араһына ҡымыҙ менән дауаланырға килеп йөрөгән Лев Толстой үҙенең бер хатында "Башҡорттарҙан Геродот еҫе аңҡый", - тип юҡҡа ғына яҙмағандыр...**

Эйе, уның һымаҡ уҡымышлы һәм мәҙәниәтле зат башҡорттарҙың тышҡы ҡиәфәтендә, йәшәү рәүешендә, көнкүреш мәҙәниәтендә боронғолоҡ эҙҙәрен һиҙмәй, аңламай ҡалмағандыр инде. Әммә Башҡортостан тарихы менән унан күпкә алдараҡ ҡыҙыҡһыныусы урыҫ зыялыларын беләбеҙ. XVIII быуатта Ырымбур губерна канцелярияһына Петр Рычков тигән уҡымышлы зат эшкә ебәрелә. Ул, хәҙергесә әйткәндә, ябай бер чиновник, бухгалтер була бит инде. Әммә ерле башҡорттар менән ҡыҙыҡһыныу уның бар булмышын биләп ала, һәм ул Рәсәйҙә әллә ни билдәле булмаған төйәк тарихы буйынса хеҙмәттәр яҙып, билдәле тарихсы булып танылыу таба. Ул бында йәшәгән зыялы башҡорттарҙан, бигерәк тә уҡымышлы, тарихи китаптар менән таныш булған Ҡыҙрас Муллаҡаевтан күп мәғлүмәт ала. Йәиһә Василий Татищевты алып ҡарайыҡ: ул артиллерист, тау инженеры була, Уралға завод эштәре буйынса ебәрелһә лә, тарих менән нығ ҡыҙыҡһына. Башҡорттар менән аралашып, улар аша байтаҡ мәғлүмәт туплай. Башҡорттарҙы тынысландырыу маҡсатында уны 1737 йылда Ырымбур экспедицияһына тәғәйенләйҙәр. Тап ошо ваҡытта Татищев тарафынан Рәсәй тарихы буйынса тәүге китап яҙыла башлай. Ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлектәре Башҡортостан ерендә башланған башҡа бик күп урыҫ һәм башҡа милләт зыялыларын атап үтергә булыр ине. Был факт башҡорт иленең уйлы-фекерле кешеләргә тарихи һабаҡ бирә алыуын бик асыҡ күрһәтә, һәм ошо тарихилыҡ бында Библия замандарынан бирле һаҡланып ҡалған, тип әйтергә була.

▶ **Тарихи Башҡортостан ерлегендә археологик ҡомартҡылар табылғас, ундай боронғо объекттарҙы һис бер объектив нигеҙ булмауға ҡарамаҫтан, "үҙләштерергә", ниндәй ҙә булһа бер милләткә бәйләргә тырышыусылар күбәйеп китте. Бындай ҡараштар хатта профессиональ тарихсылар араһында ла осрай. Был хәлде нисек аңлатып була?**

Археологик ҡомартҡыларға ҡарата бындай мөнәсәбәт үҙгәртеп ҡороу йылдарында нығлап беленә төштө. Билдәле бер сәбәптәр арҡаһында ҡайһы бер археологтар, үҙҙәре билгән ғилми даирә сиктәренән сығып, этнологтарса фекер йөрөтә башланы. Археология дөйөм тарих фәненә ярҙамсы фән тармағы булараҡ формалашҡан, ул үҙенән-үҙе генә тарихи принциптарҙы, тәғлимәттәрҙе тыуҙыра алмай. Уның төп функцияһы - археолгия объекттарын табып, тикшереп, ентекләп яҙып, һүрәтләп, теркәп барыу. Археолог ҡаҙып сығарылған билдәһеҙ матди ҡомартҡыларҙы теге йәки был этнос менән туранан-тура бәйләй алмай, был махсус рәүештә ентекле һәм оҙайлы сағыштырмаса-аналитик тикшеренеүҙәр уҙғарыуҙы талап итә. Яңыраҡ ҡаҙып асылған ҡомартҡыларға тиҙ арала ниндәйҙер баһа бирергә тырышыу урынһыҙ булыр ине. Табылғандарҙы бар булған сығанаҡтар менән сағыштырмайынса, объектив һығымталар эшләп булмаясаҡ. Хәҙер археология һәм этнология тармаҡтары үҙаллы фән тип иҫәпләнгән хәлдә лә, тик ошо ерлектә генә яңы ҡараштар, яңы тәғлимәт булдырырға тырышыу урынһыҙ булыр ине. Үҙегеҙ беләһегеҙ, боронғо һәм үтә ҡиммәтле археологик ҡомартҡылар табыла ҡалһа, уларҙы тик үҙ милләте тарихы менән бәйләп, "үҙләштерергә" әҙер тороусылар күбәйеп китте. Бында бит төплө һәм ентекле тарихи анализ кәрәк: был территорияла кемдәр һәм ҡасан йәшәгән, кемдәр килгән, ҡайһылары киткән, ниндәй ҡәүемдәр даими йәшәгән - быларҙың барыһын да иҫәпкә алырға кәрәк. Бер генә археологик ҡомартҡы нигеҙендә ниндәйҙер ҙур тарихи һығымталар эшләп булмай, бының өсөн һүҙ барған территорияла дөйөм тарихи процестарҙың барышын һәйбәт белергә кәрәк.

▶ **Арҡайым ҡаласығы тураһындағы китаптарҙа, тапшырыуҙарҙа был ҡомартҡының боронғо башҡорт ерендә булыуы тураһында ауыҙ асып әйткән кеше юҡ тиерлек. Ә юморист Задорнов кеүек "тарих һөйөүселәр" Арҡайымда урыҫ цивилизацияһы яралған, тип саң ҡаға, китаптар сығара...**

Ваҡыттар үҙгәреүсән булһа ла, кеше холҡона хас ҡайһы бер һыҙаттар борон нисек булған, хәҙер ҙә шулай һаҡлана килә. Гүзәл һәм затлы әйберҙәр күп кешене ылыҡтыра. Тарихи ҡомартҡыларҙы урлап, үҙләштерергә теләүселәр элек тә етерлек булған. Ҡиммәтле әйберҙе урлаһалар, ул тиҙ беленә. Ә бына кемдерҙең тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡыларҙы "үҙләштереүе", күҙгә күренмәһә лә, барыбер урлашыуға тиң. Бындай мутлыҡ ҡасан да булһа фашланасаҡ, сөнки ул ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Арҡайымға килгәндә, ул хәҙерге Башҡортостан территорияһында булмағас, элекке административ бүленешкә ҡарап, күптәр уны Ырымбур ерендә урынлашҡан, тип уйлай. Бәғзе бер Мәскәү ғалимдары ла был ерҙәрҙең тарихи Башҡортостандыҡы икәнен онотоп ебәрә. Хатта был турала үҙебеҙҙең республикабыҙҙа йәшәгән кешеләрҙең дә белмәүе ихтимал, сөнки барыһы ла тарих менән ҡыҙыҡһынмай, улар гәзиттәрҙә ни яҙалар, телевидениенан нисек һөйләйҙәр, шуға ышана. Ә Задорнов кеүек шәхестәргә килгәндә, улар тарих тураһында түгел, үҙҙәрен ошо тарихта ҡалдырыу хаҡында ғына уйлай. Бында төрлө спекуляцияларҙан алып мистикаға тиклем юл ҡуйыла.

Арҡайым заманы бик боронғо осорға ҡарай, беҙ ул осорҙа Уралда йәшәгән ҡәүемдәр тураһында бик аҙ беләбеҙ, шуға күрә уның менән бәйле төрлө уйҙырмалар барлыҡҡа килеүе мөмкин. Ә һуңғыраҡ тарихыбыҙҙы алып ҡараһаҡ, шулай уҡ ошо тарихты үҙ белдегенсә аңлатып, үҙ файҙаһына ауҙарырға тырышыусылар юҡ түгел. Шул уҡ Әнүәр Нурмөхәмәтов әйткәнсә, күршеләребеҙ Шакирйән Мөхәмәтйәновты ла, Зәки Вәлиди кеүек шәхестәребеҙҙе лә үҙҙәренеке яһап, энциклопедияларына теркәп ҡуйған икән. Ундай әҙәмдәр хатта Салауат Юлаевты ла башҡортлоғонан айырып, кемдәргәлер ялғап ма-

***Башҡортҡа ундай таш ҡәлғәләрҙең бер кәрәге лә булмаған. Аяуһыҙ киң ерҙәрҙе биләп йәшәгән халҡыбыҙ таш ҡәлғәләргә мохтажлыҡ кисермәгән. Ҡәлғә төҙөүҙең башында ҡурҡыу ята. Дошманымдан ҡасып ҡотолам, тип фекер йөрөткәндәр ҡәлғә төҙөргә тырыша. Европала тап ошо маҡсатта замок-ҡәлғәләр, рус дәүләте сиктәрендә күскенсе дала кешеләре һөжүменән һаҡлана торған пост-ҡәлғәләр ҡалҡып сыға. Башҡорт ерҙәренең урталығында ятҡан Өфө тарафтарында башҡорттарға ҡәлғә һалыу өсөн ихтыяж булмаған.***

✓ ***Тарихи китаптарҙы уҡыу кешенән ҡыҙыҡһыныу менән бер рәттән, билдәле әҙерлек һәм фекерләп уҡый белеүҙе талап итә. Ә бөгөн күпселек быңдай көсөргәнешле юлды һайламай.***

таша икән. Бында ни әйтәһең инде: тарихи яҡтан йәш этностар үҙҙәренең баһаһын күтәрә алырҙай тарихи шәхестәргә мохтаж, һәм ундай шәхестәрҙе нисек итеп булһа ла "үҙләштерә" алыу уларҙың маҡсатына әйләнеп тә китә, күрәһең. Башҡаларҙың тарихын үҙләштереү беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа башҡарыла, быңың өсөн әллә күпме ялған мәҡәләләр баҫыла, китаптар сығарыла. Был ялғанды бары фән аша ғына тулыһынса фашларға була. Тик шуныһы: фәнни китаптар аҙ тираж менән сығарыла, уларҙы башлыса тарих белгестәре уҡый. Шул уҡ ваҡытта ялған тарих яҙылған популяр китаптар менән магазин кәштәләре тулы, уларҙы китапханаларға бушлай таратала р. Йыш ҡына тарихҡа фәнни ҡараш менән ошо китаптарҙа бирелгән мәғлүмәт араһындағы айырма ер менән күк араһы кеүек.

# Ҡалға төҙөгән,

## ҡәлғәләр төҙөүҙең кәрәге булмаған

Тарихи китаптарҙы уҡыу кешенән ҡыҙыҡһыныу менән бер рәттән, билдәле әҙерлек һәм фекерләп уҡый белеүҙе талап итә. Ә бөгөн күпселек быңдай көсөргәнешле юлды һайламай: телевизорҙан әҙер мәғлүмәтте тыңлай, еңел-елпе китап һайлап, шуның менән хушһына. Әлбиттә, был осраҡта кешеләрҙең ҡараштарын нисек теләйһең, шул юҫыҡҡа йүнәлтергә була.

Бик боронғо замандарҙан бирле төрлө ҡәүемдәр бер-береһе менән аралашып йәшәгәс, уларҙың телдәрендә ниндәйҙер уртаҡлыҡтарҙың булмауы мөмкин түгел. Мәҫәлән, ғәрәп телендә "ард", немец телендә "ерде" һүҙе ер тигәнде аңлатһа, инглиз телендә "ярд" оҙонлоҡ үлсәү берәмеген белдерә. Башҡорт телендә шул уҡ тамырлы ер, ара, арт тигән һүҙҙәр бар. Тарихи лингвистика фәнен дә боронғо тарихты өйрәнеү маҡсатында ҡулланып буламы?

Фәндәр бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Тарих фәне лә башҡа фәндәрҙә табылған мәғлүмәттәрҙе ҡуллана. Мәҫәлән, тарих өсөн диндәрҙе өйрәнеүсе фәндәр өлкәһендәге мәғлүмәт бик мөһим сығанаҡ булып тора. Әлбиттә, тел фәндәрендәге асыштар тарихсыларҙы ла ҡыҙыҡһындыра. Әммә тел тарихын телселәр өйрәнергә тейеш. Теге йәки был этностың ниндәй телдә аралашыуы билдәле бер дәүерҙәрҙәге тарихи процестар менән бәйле. Уралда көн иткән халыҡтарҙың төркиләшеүе б. э. IV-VI быуаттарында ғәмәлгә аша. Быңдағы ҡәүемдәр төрки телен үҙләштергәнсе ниндәй телдә һөйләшкән, уға тиклем күп быуаттар элек, йәғни Арҡайым ҡаласығын төҙөгән кешеләр ниндәй телдә аралашҡан - ул турала беҙ бер ни ҙә белмәйбеҙ. Тел үҫешенең ниндәйҙер бер этаптары була, шуны ла иғтибарға алыу кәрәк. Хәҙерге рус телен миҫалға алһаҡ, иҫке славян теле - боронғо рус теле - хәҙерге рус әҙәби теле күсәгилешлеген күрәбеҙ, һуңғыһы XIX быуатта ғына, А. С. Пушкин заманында формалашҡан. Беҙ боронғо башҡорттарҙың теле тураһында бер ни белмәйбеҙ тиерлек, һәр хәлдә лә башҡорт теленең тарихи үҫешен өйрәнеү бик файҙалы булыр ине. Көнбайыш башҡорттарының теле татарса уҡытыу арҡаһында юғалып бара, ә улар элегерәк башҡортса, әммә үҙ диалектында аралашҡан бит. Быңа мин үҙем дә гел русса уҡып үҫтем, әгәр башҡорт мөхите булмаһа, туған телемдә һөйләшә алмаҫ инем. Рус телле башҡорттарҙың арҡандан-арта барыуы ла бик ҙур проблема булып ҡаласаҡ. Шулай булғас, телдең милләт тарихындағы ролен баһалап бөткөһөҙ.

Ошо һорау айҡанлы бер тарихи фактты хәтерләп үтәйем. XIV быуат башында Башҡорт иленә венгр миссионеры Иоганка килеп сыға һәм бында алты йыл буйына йәшәй. Әлбиттә, ошо ваҡыт эсендә ул башҡорт телен ярайһы уҡ яҡшы кимәлдә өйрәнгән булырға тейеш. Венгр католик монахтары башҡорттарҙы христиан диненә ылыҡтырыу менән бер рәттән, ошо яҡтарҙа үҙенә күрә разведка - күҙәтеү эштәре алып барған, тип уйларға кәрәк. Монах Иоганканың Башҡорт илендәге эшмәкәрлеге тураһында яҙған отчет-хатында иғтибарҙы йәлеп иткән бер урыны бар: ул үҙенең етәксеһенә, әгәр артабан да башҡорттарҙы христиан диненә ылыҡтырыу эше дауам итһә, бында немец йәки инглиз телен белгән кешене ебәреү зарурлығын белдерә, сөнки был телдәрҙе белгән кешегә башҡортса өйрәнеүе еңелерәк буласаҡ икән. Тимәк, XIV быуатта башҡорттарҙың аралашыу теле хәҙерге телебеҙгә бигүк оҡшамаған булыуы ла ихтимал. Хәҙерге телебеҙҙә инглиз теле менән уртаҡ өндәр булһа, байтаҡ элегерәк лексик уртаҡлыҡтарҙың күп булыуы ла бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башҡорт теле тарихы буйынса беҙ әлегә етерлек кимәлдә мәғлүмәтле түгелбеҙ. Тарихсыларыбыҙ башлыса рус теленә тәржемә ителгән сығанаҡтар менән эш итә, унда йыш ҡына башҡорт телендә лә булған терминдар осрай. Тарихи исемдәр, топонимика мәсьәләләре үҙ тикшеренеүселәрен көтә. Был һораүҙар үтә ҡыҙыҡлы, шулай ҙа тел тарихын өйрәнеү туранан-тура тарих фәне алдында ҡуйылған маҡсат түгел.

▶ **Әйткәндәй, Әхиәр Хәкимдең тарихи романдарының береһендә "йәренгә" ("алдағы йылда" мәғәнәһендә) боронғо башҡорт һүҙен ҡулланыуына иғтибар иттем. Был һүҙҙә һинд-европа телдәрендәге "йар", йәғни "йыл" мәғәнәһендәге уртаҡ һүҙ тамыры ярылып ята...**

Бая әйткәнемсә, был һүҙ ҙә Иоганка-венгрҙың немец-инглизгә башҡорт менән һөйләшеүе еңел, тигән фекеренә тап килгән һүҙҙәрҙең ҡалдығылыр. Һәр хәлдә лә бында уйланырға ерлек бар.

▶ **XII быуат урталарында йәшәгән Әбү Хәмит әл-Андалузи, XIII быуатта Ибн Сәйет әл-Мәғриби, Яҡут әл-Хамауи кеүек ғәрәп авторҙары Мадъярстанда, Дунай йылғаһының көньяғында башҡорттарҙың ҙур ғына бер төркөмө йәшәүе хаҡында мәғлүмәттәр ҡалдырған. Беҙ ошо турала бер ни ҙә белмәйбеҙ тиерлек. Хәҙерге заман мөмкинлектәрен файҙаланып, ошо боронғо башҡорт эҙҙәрен юллап буламы?**

Булыр ине, әлбиттә. Миҫал өсөн Ҡаҙағстанды алып ҡарайыҡ. Унда боронғо ҡаҙаҡ мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн ҙур программа ҡабул ителгән, етерлек кимәлдә финанс сығымдары ҡаралған. Ҡаҙағстан белгестәре, донъя илдәре буйлап йөрөп, үҙҙәренә кәрәкле тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнә. Уларҙың ғалимдарының ҙур төркөмө Ватикан китапханаһында бер нисә ай буйына эҙләнеү эштәре алып барҙы. Был боронғо китапханала тарихсылар өсөн үтә ҡиммәтле тарихи сығанаҡтар табылыуы мөмкин. Ватикан китапханаһы күп йылдар буйына сит кешеләр өсөн ябыҡ булды, быңдағы китаптар менән тик махсус дин белгестәре генә шөғөлләнә ала ине. Махсус рәүештә һаҡланғас, быңдағы документтар юҡҡа сыҡмаған. Тик уларҙы уҡып төшөнә алырлыҡ белгестәр ҙә кәрәк бит, шуныһыҙ был сығанаҡтарҙы өйрәнеп булмаясаҡ. Ватикандағы документтарҙы өйрәнер өсөн латин телен, башҡа Европа телдәрен һәйбәт белергә кәрәк. Унда башҡорт өсөн бер кем дә эҙләнеп, тикшеренеп ултырмаясаҡ, һәм, ғөмүмән, башҡорт булмаған белгестең башҡорт тарихын бөтә тулылығында өйрәнергә ынтыласағына ышанып та булмай. Ә беҙҙең әлегә ундай белгестәребеҙ юҡ, хатта үҙебеҙгә иң яҡын булған иҫке төрки яҙмаларын яҡшылап уҡый алырлыҡ белгестәребеҙҙе бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

▶ **Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең тарихи яҙмаларында Мадъярстанда йәшәгән башҡорттарҙың католик диненә күскән бер өлөшөнөң тәре походтарында ҡатнашып, батырлыҡ күрһәтеүен сағылдырған документтар булыуы тураһында әйтеп китә. Һеҙ әйткәнсә, тикшеренеүсеһе табыла ҡалһа, шул уҡ Дунай башҡорттары тураһында әллә күпме тарихи сығанаҡтар табылыуы ла мөмкин бит.**

Ниндәйҙер халыҡ төркөмдәрен бергә йәшәгән осоронда берләштереүсе көс була. Католик диненә күскән, йәиһә күсергә мәжбүр булған башҡорттарҙы ла уҡмаштырып тотҡан идея булғандыр. Уларҙың мәжүсилектән христиан диненә күскәс, ошо динде яҡлап һуғышҡанда ҡаһарманлыҡ күрһәтә алыуын башҡорттарға хас булған сифаттарҙың береһе рәүешендә күрһәтеп була. Рәсәй составына ингән башҡорттар ҙа быуаттар буйына үҙҙәренең оло Ватаны өсөн йән аямай һуғышҡан бит. Әлбиттә, күп ваҡыттар үтә килә быңдай ҙур булмаған ҡәүемдәрҙең, боронғо тарихтарын бөтөнләйгә онотоп, үҙҙәре ингән этнос составына ҡушылып, айырым берләшмә булараҡ юғалыуы тарихта була торған хәл.

▶ **Шул уҡ мадъярҙар, үҙҙәренең боронғо Ватандарын юллап, Башҡортостанға бер нисә тапҡыр килеп китте. Улар араһында башҡорт телен һәйбәт өйрәнгән ғалимдар ҙа бар. Әллә уларҙы боронғо ҡан-ҡәрҙәшлек хәтере бында тартып торамы икән, тип уйлап та ҡуяһың. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә мадъяр телен өйрәнеп, тарихи тикшеренеүҙәр алып барырҙай белгестәр күренмәй.**

Ундай маҡсат менән сит илгә махсус рәүештә эшкә ебәреү осраҡтары булды булыуын. Әммә белгестәрҙе дөрөҫ һайлап ала белмәйбеҙ, ахырыһы, һәйбәт һөҙөмтә күрһәтерҙәйҙәре булманы. Осраҡлы кешеләр эләккәс, уларҙан бер файҙа ла юҡ. Сит илгә ебәргәндә, тел белеүҙән тыш, башҡорт тарихын һәйбәт белеүсе, аҙаҡтан халыҡҡа хеҙмәт итә алыусы шәхес булырҙай йәштәрҙе күҙ уңында тоторға кәрәктер. Мин республика китапханаһында сит ил университеттарында уҡып ҡайтҡан, көнсығыш телдәрен белгән йәштәрҙе туплай башлағайным. Бөгөн улар икенсе бер эш эҙләргә мәжбүр, сөнки йәш кешегә китапханалағы эш хаҡына йәшәүе еңел түгел. Ғөмүмән, тарих өлкәһендә эшләй алырлыҡ белгестәр әҙерләү һәм уларҙың белемен файҙалана алыу мәсьәләһе әлегә тиклем хәл ителмәгән. Сит илдә күпме йылдар буйына уҡып, телдәр өйрәнеп ҡайтҡан йәштәр үҙ илендә кәрәкһеҙ булып сыға, сөнки һәйбәт эш хаҡы түләнгән ғилми вазифалар улар өсөн түгел. Фәндәр академияһы эргәһендә шундай йәштәрҙән торған ғилми тикшеренеү төркөмө булдырылып, фәнни экспедициялар ойошторолһа, ни әйтер инең дә һуң. Уларҙың эше махсус рәүештә ойошторолһа, әллә күпме яңы сығанаҡтар табылып, тәржемә ителеп, фәнни ҡулланылышҡа индерелер ине.

▶ **Әңгәмәбеҙ һуңында Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныу менән бәйле һорауға туҡталып китәйек. Быйыл беренсе тапҡыр Өфө ҡалаһына түгел, ә шул исемдәге ҡәлғәгә нигеҙ һалыныуҙың 435 йыллығы билдәләнәсәк. Ни өсөн был фактҡа элегерәк етди асыҡлау индерелмәй килде һуң?**

Илебеҙҙә тарих йәш фәндәрҙән һанала. Рәсәй тарихын өйрәнеү Татищевтан башланһа, Башҡортостан тарихы айырым фән йүнәлеше булараҡ уҙған быуаттың 70-се йылдарында ғына ойошто. Быңдай фән хатта университеттың тарих факультетында ла уҡытылмай ине. 1936 йылда "Башҡорт АССР-ы тарихынан очерктар" сығарыла башлаһа ла, быны дөйөм ил тарихы сиктәрендә башҡарылған эш башы ғына итеп ҡарау фарыз. Әммә һуңғы 20 йылда тарих фәне лә йылдам үҫеште, яҙылған китаптар һаны бөтә Совет осоронда баҫылған кимәлде уҙып китте. Ошоға тиклем күп һораүҙарға объектив яуап табырлыҡ мәғлүмәт булманы. Унан, тарих фәненең сәйәси-идеологик маҡсатта файҙаланылыуын онотоорға ярамай. Тап шуның өсөн төп иғтибар батша режимына ҡаршы көрәш, ихтилалдар тарихы кеүек ваҡиғаларға йүнәлтелде.

Ҡалалар тарихы менән ҡыҙыҡһынып китеп, мин үҙем республикабыҙҙа ошо йүнәлештә тәүге докторлыҡ диссертацияһы яҡланым. Ошонан һуң ошо проблема ентекләберәк өйрәнелә башланы, минең етәкселегемдә бер нисә кандидатлыҡ эштәре башҡарылды. Тарихи Башҡортостан ерлегендә боронғо ҡалалар булыуы тураһында крайҙы өйрәнеүсе рус эшмәкәрҙәре, үҙебеҙҙең мәғрифәтселәребеҙ ҙә яҙып ҡалдырған. Был факт совет осоронда ла йәшерелмәне, тик ул ғилми яҡтан өйрәнелмәгәйне. Мин үҙемдең хеҙмәттәремдә ошо турала даими рәүештә яҙа килдем.

▶ **Бәлки, беҙҙә таш ҡәлғәләр булмауы башҡорттарҙың ҡалалары юҡлығы тураһындағы фекергә сәбәп булғандыр. Мостай Кәрим дә: "Халҡым мөһабәт таш диуарҙар төҙөмәгән, үҙенән һуң матди ҡомартҡылар ҡалдырмаған", - тип үкенес белдергән бит...**

Башҡортҡа ундай таш ҡәлғәләрҙең бер кәрәге лә булмаған. Аяуһыҙ киң ерҙәрҙе биләп йәшәгән халҡыбыҙ таш ҡәлғәләргә мохтажлыҡ кисермәгән. Ҡәлғә төҙөүҙең башында ҡурҡыу ята. Дошманымдан ҡасып ҡотолам, тип фекер йөрөткәндәр ҡәлғә төҙөргә тырыша. Европала тап ошо маҡсатта замок-ҡәлғәләр, рус дәүләте сиктәрендә күскенсе дала кешеләре һөжүменән һаҡлана торған пост-ҡәлғәләр ҡалҡып сыға. Башҡорт ерҙәренең урталығында ятҡан Өфө тарафтарында башҡорттарға ҡәлғә һалыу өсөн ихтыяж булмаған. Ғөмүмән, боронғо башҡорт ҡалалары сауҙа үҙәктәре булып, һуңынан ил менән идара итеү маҡсатында ил башлыҡтары ставкаһы ролен дә үтәгән. Өфө, Ырымбур ҡәлғәләре элекке ҡала урындарында төҙөлөп, емереклектәрҙәге таштар ҙа ҡулланылған. Ҡалалар башҡорттар өсөн айырым бер функцияларҙы башҡарыу урыны булып иҫәпләнгән, улар ҡалаларҙы өнәмәгән, унда башлыса ваҡытлыса ғына килеп-китеп йөрөр булған. Башҡорттарҙың ҡала кешеһен түбәнһетеп ҡарауҙары ла билдәле. Ә Өфө урынында бер нисә боронғо ҡаласыҡ булыуы фән тарафынан күптән раҫланған инде, һәм был фактты кире ҡағыр өсөн бер ниндәй нигеҙ юҡ. Ә алда беҙҙе яңы тикшеренеүҙәр, яңы асыштар көтә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

# КӘКЕРЕ ҠАЙЫН

**(Хикмәтле хикәйә)**

Шиһап Шиғайҙы ҙур урынға үрләтәләр икән, тигән хәбәр таралды. Булыуы бик мөмкин. Атаһының өс туған һеңлеһенә өйләнгән еҙнәһенә ҡоҙа тейешле ағайҙың күршеһе юғарыла эшләй бит. Хәҙер эшкә һәләткә ҡарап алыу бөттө: төп талап - дундук булһа булһын, әммә ышаныслы булһын, үҙ кеше булһын! Шиһап Шиғайҙы ла, шағир булған өсөн түгел, тап бына тик шул үҙ кеше булғанға үрләтәләрҙер инде. Әйҙә, үҫтерһендәр, шиғыр яҙып тамаҡ туймай хәҙер. Шиғыр уҡып - бигерәк тә. Юҡ, юҡ, яңылышам, шиғыр уҡып, дөрөҫөрәге, шиғыр уҡығандан һуң унын авторын маҡтап тамаҡ туйҙырырға ла була. Әгәр ҙә автор ҙур урында эшләһә һәм күренекле булһа, әлбиттә. Быға тиклем тәнҡитселәр тап шулай итте лә. Шуға ла тора-бара тәнҡит кәнфиткә әйләнде.

Бына шундай "кәнфитселәрҙең" береһе - Татлыбаевтың да ҡолағына салынды теге хәбәр. Әлбиттә, Шиһап Шиғай - шағир булараҡ әллә кем түгел. Быны бөтәһе лә белә. Әммә дәрәжәң юғары булһа, таланттың кәрәге юҡ. Әгәр шағир Шиһап Шиғайҙы юғары урынға ултыртыуҙары хаҡ булһа, унын "кәнфитсе" Татлыбаевҡа ла кәрәге тейеүе ихтимал. Ихтимал ғына түгел, мотлаҡ тейәсәк. Сөнки шағир Шиһап Шиғайҙын эше матбуғат менән бәйле буласаҡ, ти бит. Ә Татлыбаев иһә, үҙенең тәнҡит мәҡәләләрен туплап, бер ҡалын китап сығарырға күптән хыяллана. Юҡ, китап "кәк тәкәүәй" кәрәкмәй уға, яҙыусылар берлегенә ингеһе килә унын. Бәй, ул кемдән кәм? Унын кеүектәр бит, кандидат наук була ла, яҙыусылар берлеге тупһаһын тапай башлай. Алығыҙ мине ағзалыҡҡа, мин дә яҙам, йәнәһе. Бына, диссертация яҙҙым, шуны китап итеп сығарҙым. Дөрөҫ, ул яҙмаларҙы бер әҙәм дә уҡымай, унын ҡарауы, автор, берлеккә алынғас, рәсми рәүештә "яҙыусыға" әүерелә. Татлыбаевҡа ла тап шунын өсөн кәрәк китап сығарыу. Ә китап сығарыу өсөн Шиһап Шиғай кәрәк буласаҡ.

Татлыбаевтың Шиһап Шиғай тураһында элек тә яҙғаны бар ине. Яҙҙы, әммә баҫтырманы. Шул яҙмаларҙы эҙләп тапты, уҡып ҡараны ла оҡшатманы, ситкәрәк этәреп ҡуйҙы, унан, илһамланып, яңыһына тотонды.

"Шиғриәт баҡсаһындағы гүзәл гөл" тип исемләне ул яңы мәҡәләһен. Башта шағир Шиһап Шиғайҙың биографияһын ентекләп яҙҙы. Унын кескәй саҡтан уҡ талантлы, эшһөйәр, нескә күңелле булыуын, Өфөгә килгәс, ижад ҡанаттары нығыуын, шиғырҙан-шиғырға, китаптан-китапҡа үҫә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Унан һуң былай дауам итте:

"Күптән түгел мин күренекле шағир Шиһап Шиғайҙың "Ҡайындар араһында" исемле китабын яңынан уҡып сыҡтым. Китап ун йыл элек нәшер ителгән, әммә ул һаман үҙенә тарта; унда тупланған шиғырҙар шул тиклем актуаль ки, мин ышанам - быуаттар үтеү менән дә улар сәнғәт көсөн юғалтмаҫ, килер быуындарҙы ла тулҡынландырыр, уларҙы матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа, гүзәллеккә әйҙәр. Һүҙемде раҫлар өсөн шағир Шиһап Шиғайҙың бер шиғырын тулыһынса килтерәм.

**Кәкере ҡайын**

Текә яр башында ҡайын үҫә,
Аҫта - йылға аға яй ғына.
Төнгө тынлыҡ. Ҡайын хәлен аңлай
Һандуғасҡай менән ай ғына.

Яр башында яңғыҙ ғына үҫкән
Ҡайын ҡыҙы ниңә ҡайғылы?
Һандуғасҡай ниңә моңһоу һайрай,
Ниңә моңһоу гелән ай нуры?

Яуыз яҙмыш һылыу аҡ ҡайынды
Кәкерәйткән, бөккән, имгәткән,
Бөтәһе лә йөҙ сөйөрһөн, тигән,
Кәкере-бөкөрө ошо имгәктән.

Шуға моңһоу һайрай һандуғасҡай,
Айҙан нурҙар түгел, моң тама.
Тулҡындар ҙа шуға ярһып ҡаға,
Яңғыҙ ҡайын шуға моңлана.

Һин моңайма, яңғыҙ ҡайын ҡыҙы,
Өҙгөләнмә, көймә, бирешмә,
Кәкере булыу - йәмһеҙ булыу түгел,
Һин матурһың ошо килеш тә!

Ни ҡәҙәре хис-моң, ни ҡәҙәре нескәлек, ни ҡәҙәре философия был әҫәрҙә!

"Текә яр башында ҡайын үҫә" тигән ғәжәп күркәм юлдар бөйөк рус шағиры Сергей Есенинды хәтерләтә. Ул былай яҙған: "Белая береза под моим окном..." Тик Есенин үҙенең өй тәҙрәһе төбөнән ары китә алмаған, талантлы шағир Шиһап Шиғай иһә ваҡиғаларҙы текә яр башына, тәбиғәт ҡосағына, тимәк, донъя майҙанына, улай ғына ла түгел, Бөйөк Ғәләм киңлегенә күсерә.

"Ниңә моңһоу гелән ай нуры?" - ти шағир Шиһап Шиғай. Хәтерләйһеңме бөйөк рус шағиры Александр Пушкиндың:

"Сквозь волнистые туманы
Пробирается луна.
На печальные поляны
Льет печально свет она,"-

тигән юлдарын? Пушкин "льет печально свет она" тип, фактты ғына констатациялаһа, шағир Шиһап Шиғай иһә уҡыусыларҙы, улай ғына түгел, бөтә прогрессив кешелек донъяһын уйландырырлыҡ проблематик һорау ҡуя: "Ниңә моңһоу гелән ай нуры?" - ти. Быға тиклем бер генә шағир ҙа тапмаған асыш был!

"Яуыз яҙмыш һылыу аҡ ҡайынды
Кәкерәйткән, бөккән, имгәткән",

тигән юлдар әсе хәҡиҡәтте, тормош ҡырыҫлығын асып һала, яуызлыҡ менән яҡшылыҡтың ғүмер баҡый барған көрәшен күҙ алдына килтерә. Был юлдар - Шекспир һәм Байрон әҫәрҙәренән күпкә көслөрәк!

Ә инде "Айҙан нурҙар түгел, моң тама" тигән юлдарҙың сәнғәти көсөн донъялағы бер генә шағирҙыҡы менән дә сағыштырып булмай. Ул бары тик шағир Шиһап Шиғай ижадына ғына хас. Унын ижадын бары тик үҙ ижады менән генә сағыштырырға һәм тиңләргә мөмкин! Быны раҫлау өсөн һуңғы строфаны ғына алайыҡ.

"Һин моңайма, яңғыҙ ҡайын ҡыҙы,
Өҙгөләнмә, көймә, бирешмә,
Кәкере булыу - йәмһеҙ булыу түгел,
Һин матурһың ошо килеш тә!"

О-о-о! Нисек шәп әйтелгән! Ниндәй хис, ниндәй фекер! "Эске матурлыҡ, хис-тойғоларҙың, уйҙарҙың матурлығы тышҡы матурлыҡтан өҫтөнөрәк!" тигән фекерҙе ҡалай нескә итеп аңлатҡан шағир Шиһап Шиғай.

Йыйнап, шуны әйткем килә: Шиһап Шиғай донъя халҡы шағиры исеменә күптән лайыҡ. Унын ижады - донъя шиғриәте баҡсаһындағы иң гүзәл гөл!"

Татлыбаевҡа ашығырға кәрәк ине - Шиһап Шиғайҙы бөгөн-иртәгә ҙур урынға ҡуйыуҙары ихтимал! Ул, тиҙ-тиҙ генә өҫтәлдәге ҡағыҙҙарын йыйыштырҙы ла, редакцияға йүгерҙе...

Бер нисә көндән унын фатирында бер өҙлөкһөҙ телефон шылтырай башланы. Шылтыратыусыларҙың фекерҙәре бер үк ине: "Ҡотлайбыҙ! Дөрөҫөн яҙғанһың, молодец!"

Гәзиттә Татлыбаевтың ошо мәҡәләһе баҫылғайны.

"Шиғриәт баҡсаһындағы ҡый үләне.

Күптән түгел мин Шиһап ағайҙың "Ҡайындар араһында" исемле китабын уҡып сыҡтым. Китап әле генә нәшер ителгән, әммә ундағы шиғырҙар актуаллеген юғалтып өлгөрҙө лә инде, хис юҡ, моң юҡ, философия юҡ. "Текә яр башында ҡайын үҫә", - ти автор. Һуң, бөйөк рус шағиры Сергей Есенин әллә ҡасан "Белая береза под моим окном..." тип яҙҙы бит инде! Шиғай Есениндың ҡайынын яр башына күсереп ултыртҡан - айырма шул ғына. "Ниңә моңһоу гелән ай нуры?" - ти автор. Ул, күрәһең, классиктарҙы уҡымай. Бөйөк рус шағиры Александр Пушкиндың:

ЗАУЫҠ

# БӘХЕТТӘРҘЕҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛЕР ӨСӨН

## Үтә ҡыҫҡамы ни сағыу көн?

### Һалдат улы

Ышаныслы ирҙәр булғанында,
Йәшәүҙәрең - үҙе бер ғүмер.
Көйөнмәйһең һүҙгә сарсағанда,
Усағында һүнһә ҡуҙ-күмер...

Һикәлтәләр,
Юҡ-бар ығы-зығы
Һин барында юҡҡа сығалар.
Үҙең өлгө тормош һандалында
Һиндәй генә ирҙәр сыҙайҙар.

Һалдат улы
Һалдат төҫө булып,
Йәшәүеңдә оло мәғәнә:
Дауамы һин яугир тоҡомоноң,
Өмөттәре киләсәгенә...

Замандашым,
Тормош, уйлай китһәң,
Хәтерләтә һаман яу ҡырын.
Кемдер унын алғы һыҙығында
Кемдер йөрөй тылда һыҙғырып...

Атай төҫө күрмәй үҫкәндәрҙә
Атайҙарға ҡәҙер ҡайҙарҙан?
Аңлай улар:
Йәп-йәш атайҙары
Башын һалған изге яуҙарҙа.

### Моңдашыма

Өҙөлдө лә кинәт халҡым йыры,
Өнһөҙ генә тауҙар һыҡтаны.
"Нимә булды?" - типме,
Бар тәбиғәт
Күҙҙәремә баҡты уҡталып.

Сабыр булайыҡсы,
Ил-йортҡайым,
Йәш таммаһын Урал ташына.
Йөрөмәҫ ҡайғы ағас өҫтәренән,
Төшә улар әҙәм башына...

Уралымда яңғырар
Башҡорт моңо,
Мәңгелектең үҙе - йыр-моңом.
Ғорур баҫып, уйсан ҡаяларым
Тыңлай һаман
Райман йырлауын...

* * *

Шыҡһыҙҙарҙан шыҡһыҙ көндәремде
Һин яһанын иң-иң сағыуы.
Көндәр нимә?
Айҙар, йылдарым бит,
Бәхеттәрҙән торған саҡ ине.

Тиҫкәренән иҫкән елдәр микән,
Әсе телдәреме моңһоҙҙоң?
Тартып алды ҡыҙыу ҡояшымды,
Һағыш һарҡый күктән көноҙон.

Бәхеттәрҙең ҡәҙерен белер өсөн
Үтә ҡыҫҡамы ни сағыу көн?
Таратайым һағыш-болоттарҙы
Күктән ҡояш көлгән саҡты көт.

Өмөттәрең, әгәр һүнгән икән,
Сырхауҙарға дауа табылыр.
Ышан миңә,
Ерҙә бар моңһоҙҙар
Мөхәббәткә бер саҡ табыныр.

* * *

Ҡуйығыҙсы,
Юҡҡа маташмағыҙ,
Ҡалыптарға беҙме һыйғандар?
Тамырҙарым буйлап табындарҙың
Аға әле ҡыҙыу ҡандары...

Дала иңләп сапҡан
Тарпанмындыр,
Ҡороҡлапта ҡара мәйелең!
Өҫтәрендән
Ҡыйғыр бөркөт төҫлө
Осоп үтермен мин кәйелеп.

Баш бирмәҫтәй холҡом
Быуаттарҙан,
Иркенлектең тәмен тойоуҙан.
Ҡалыптарға көсләп тыҡмағыҙсы,
Һис ни сыҡмаҫ янау, тыйыуҙан...

Һуңғы тарпан булып,
Ҡалһам - ҡалам,
Сал далаға ҡылмам хыянат.
Азатлыҡтың тәм-ҡәҙерен һаҡлау,-
Табын бабамдарҙан аманат.

### Ғәфү үтенеү

Ҡалаларға ҡалыплаша барам,
Үҙ иткәнмен унын шау-шыуын.
(Әйтерһең дә, ағас саналарҙа,
Үҫмәгәнмен инде тау шыуып...)

Ҡалаларға ҡалыплашып бөттөм,
Юл төшмәй ҙә ҡуя ауылға.
Ҡышын һуҡмағымды көрттәр баҫа,
Һылтанамын йәйен яуынға.

Ҡалаларға ҡалыплаштым тамам,
Үҙ-үҙемде ғәфү итмәйем:
Оҙатырға быйыл ҡайтмағанмын,
Йылы яҡҡа ҡаҙҙар киткәнен...

Ауылдаштар,
Яҙын ҡырға сығып,
Ярғанында тәүге бураҙна.
Эш кешеһе икән, йәнәһе лә,
Ҡайталманым бушап, бер аҙға.

Баш ҡалала йәшәп,
Таш йөрәккә,
Әйләнеп тә, ахры, барамын.
Ерем нисек минән екһенмәй ҙә,
Ғәфү итә ғәмһеҙ балаһын?

* * *

Аҡ ҡайындар яҙын илаҡ була,
Татлы йәштәр кипмәй битендә.
Йәшкә мансылдыра тәүге һөйөү,
Өлгөрөп тә ҡыҙҙар еткәндә.

Аҡһын, әйҙә, аҡһын ҡайнар йәштәр,-
Шатлыҡ-һағыштарҙың билгеһе.
Йөҙөн ҡаплап йәп-йәш ҡайын
һығ(ы)ла,
Эс серҙәрен бүлешер кемегеҙ?

**Фәнзил САНЪЯРОВ.**

***✓ Йәштәр темаһына ҡоролған, уларҙың проблемаларын яҡтыртҡан спектаклдәр ҙә ҡуйып ҡарайбыҙ, әммә йәштәрҙе тамашаларға бер нисек тә ылыҡтырып булмай.***

"Сквозь волнистые туманы
Пробирается луна,
На печальные поляны
Льет печально свет она",-

тигән юлдарынан һуң Шиғайҙың шиғыры сәпсим юғалып ҡала.

"Яуыз яҙмыш һылыу аҡ ҡайынды
Кәкерәйткән, бөккән, имгәткән", ти Шиһап. Яуызлыҡ менән яҡшылыҡтың көрәше ышандырмай һис тә, кәкерәйткән, имеш. Кәкерәйтерһең ҡайынды, бар! Исмаһам, нисек конфликт тыуҙырырға Шекспир менән Байрондан өйрәнһен ине.

Ә инде "Айҙан нурҙар түгел, моң тама", тигән юл бөтөнләй абсурд! Тамырға, моң - һыу түгел даһа! Айҙан нурҙар түгел, һыу тама", тиһә, дөрөҫөрәк булыр ине. Былдай теүәлһеҙлектәр, гөмүмән, Шиғайҙың бөтә ижадына хас. Быны раҫлау өсөн һуңғы строфаны ғына алайыҡ.

"Һин моңайма, яңғыҙ
ҡайын ҡыҙы,
Өҙгөләнмә, көймә, бирешмә,
Кәкере булыу -
йәмһеҙ булыу түгел,
Һин матурһың ошо
килеш тә!"

Нисек хөрт әйтелгән! Матурлыҡ - кәкере булыуҙа, тип ышандырмаҡсы Шиғай. Кәкере ҡайын кеүек кәкере фекер был!

Йыйнап шуны әйткем килә: Шиһап Шиғай ижады - шиғриәт баҡсаһындағы ҡый үләне ул!"

Татлыбаевтың күҙе шар булды. Эйе, унең мәҡәләһе был! Уны ул элегерәк - Шиһай Шиһап эшенән алынған заманда яҙғайны. Уны юғарыраҡ урынға ҡуялар икән, тигән хәбәр таралғас, яңы мәҡәлә яҙып баҫтырмаҡсы булғайны. Тегe көндө, ашығыу сәбәпле, яңылыш элек яҙған мәҡәләһен гәзиткә илтеп биргән... Үҙен-үҙе кәкре ҡайынға тертте былай булғас!

Телефон йәнә шылтыраны.

- Шиһап Шиғай борсай һеҙҙе, Татлыбаев иптәш!..

- Бөттө баш! - Татлыбаев кәкерәйеп төштө. - Ғәф... Ғәфеү... Шиһ... Шах... Шап...

- Рәхмәт, ҡәләмдәш! - тип бүлдерҙе уны шат тауыш. - Һәйбәт реклама яһаның минә. Кибетта ун йыл туҙан йыйып ятҡан китабымды бер көндә алып бөттөләр! Ә үҙемде ҙур урынға ҡуйҙылар. Урынбаҫар булып киләһеңме? Тик шуны иҫкәртеп ҡуям: кәкерене тура итеп күрә белһәң генә кил...

- Ниңә, унаһын да булдырабыҙ унын! - тине Татлыбай, Шиһап Шиғайҙы маҡтаған һуңғы мәҡәләһен иҫкә төшөрөп...

**Рәдиф ТИМЕРШИН.**

*ИЖАДХАНА*

# АУЫЛДАШТАРЫМ, КҮРШЕЛӘРЕМ...

## мине артист итте



**Ишембай районы Биксән ауылы егете Илфир БАЙМЫРҘИН ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Стәрлетамаҡ дәүләт драма театрында үҙен талантлы актер итеп танытты. Бер-ике йыл элек Урал батырҙы уйнау өсөн М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына махсус рәүештә саҡырып алдылар үҙен. Ҡайнылай оҫта кәүҙәләндерә ул батыр образын! Күптән түгел НТВ каналы өсөн Санкт-Петербург ҡалаһында төшөрөлгән "Ментовские войны" сериалында БР буйынса УФСБ подполковнигы Абушахмановты уйнай ул. Ә барыны ла уҡытыусыһының өгөтләүенән һәм ауылдаштарының өмөтөн аҡлауҙан ғына башлана. Һүҙҙе үҙенә бирәйек.**

### Сәнғәтһеҙ йәшәй алмам

Атайым да, ике ағайым да шофер булғас, мин дә тәүҙә, армияға барып ҡайтам да, шофер булып эшләйем, тип уйлай торғайным. Әлбиттә, бәләкәйҙән йырларға, бейергә, ҡурайҙа уйнарға яраттым яратыуын, әммә сәнғәт юлын һайлармын тип бер ҙә генә лә башыма килтермәнем. Шулай ҙа эстә ойотко булғандыр инде. Ғаиләбеҙҙә барыһы ла сәнғәткә ғашиҡ, талантлы кешеләр ине бит. Атайым бик шәп гармунсы, тауышы ла моңло булған. Әсәйем дә бик матур йырлай. Ике ағайым да һәр ваҡыт ауылда үткәрелгән мәҙәни саралар ҙа ҡатнашты. Һеңлем Эльвира ла йырлай, ул Өфө сәнғәт академияһының думбыра класын тамамланы.

Ә минең актер булып китеүем ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты. Быға мәктәбебеҙҙә музыка дәресен алып барған уҡытыусы Нигмәтуллин Әнүәр Хөрмәт улы сәбәпсе булды. Беҙҙең мәктәптә "Һәләүек" тигән фольклор ансамбле ойошторғайны ул, шуның менән бөтә Ишембай районын гизеп сыҡтыҡ, Өфөлә лә сығыш яһаныҡ. Ә шулай ҙа 9-сы класта миндә был һөйөү бер аҙ кәмене. Класташ дуҫыма эйәреп, физкультура техникумына уҡырға барыу хыялы менән яна башланым. 11-се класты тамамлағанда ул ойотко күңелгә нығклап инеп урынлашҡайны инде. Һуңғы имтихан бара. Әнүәр Хөрмәт улы саҡырып алып: "Һин артист булырға тейешһең", - тип, мине сәнғәт юлын һайларға өгөтләй башланы. Мин һаман үҙемдең һүҙемде бирмәйем. Шунан ул: "Физкультура техникумына имтихандар август айында ғына башлана, ә сәнғәт институтына июль айында уҡ була. Әйҙә, тәүҙә Өфөгә барып, үҙеңдең көсөңдө һынап ҡара, үтә алмаһаң, барырһың техникумға..."- тине. Беренсе тур Стәрлетамаҡта булды, мин унаһын уңышлы тапшырҙым да, икенсе турға Өфөгә юллан-дым. Икенсе турҙан да үттем. Тик һаман икеләнеүҙе дауам итәм бит инде. Өсөнсө тур еткәйне, уйлана башланым. Юҡ, тип уйлайым, бер башлағас, аҙағына тиклем еткереп ҡуйырға кәрәк, етмәһә, ауылда: "Беҙҙең ауылдан да артист сыҡһын әле, уҡы, улым", - тип, күрше тирә әбей-бабайҙар оҙатып ҡалды. Уҡырға инә алмаһам, уларҙың күҙенә нисек күренермен? Өсөнсө турға инде мин сәмләнеп, маҡсат ҡуйып барҙым һәм имтиханды уңышлы тапшырҙым. Ауылға ҡайтып төшһәм... туҡталышта әсәйем, мине оҙатып ҡалған әбей-бабайҙар, күршеләр - бөтәһе лә ҡаршы алырға килгән. Ярай әле, яуаплылыҡ тойғоһо үҙ ваҡытында уянған, юҡһа, шунсама кешенең өмөтөн селпәрәмә килтергән булыр инем. Шулай итеп, яңылыш ҡына эләгеп киттем сәнғәт донъяһына. Әммә үкенмәйем.

### Театрҙағы ролдәрем

Беҙ Стәрлетамаҡ театры өсөн тәүге сығарылыш актерҙары булдыҡ. 2000 йылдан ошонда йәҙәп йөрөп ижад итәм. Әлбиттә, һәр актерҙың төп һәм ыңғай образ тыуҙырғыһы килә. Әммә ролдәрҙе яҡшыға һәм насарға бүлмәйем мин. Уларҙың һәр ҡайһынын да уйнауы еңел түгел. Ҡайһы саҡта бөтөнләй үҙеңдең булмышыңа хас булмаған образдар башҡарырға тура килә. Ул саҡта үҙеңде яңыса асыр өсөн күп көс түгелә, режиссер ҙа һине шул яҡҡа ауыштыра. Көн-төн ролең өҫтөндә эшләп, бирелеп китәһең. Үзбәк драматургы Шәрәф Башбәковтың "Тимер ҡатын" спектаклендә мин бер иҫәрерәк кенә ғалим образын уйнаным. Ете йыл буйы сөгәлдәр утаусы робот ҡатын эшләү менән мәшғүл була ул. Башкөлләй тик шул хеҙмәтен генә уйлап йөрөгән, күҙлекле, ҡыҫҡа еңле костюм кейгән, бер аҙ "башы киткән" ғалимды уйнауы ныҡ ауыр булды. Шул тиклем образға инеп китәһең, репетициянан баш ауыртып, йөрәк һыҙлап килеп сығаһың. Шуныһыҙ булмай, тамашасыны алдап булмай. Сәнғәт интситутында уҡытыусыларыбыҙ сәхнәлә һәр образды йөрәгегеҙҙән сығып башҡарығыҙ, тиһәләр, уның нимәһе бар инде, сәхнәгә сығаһың да тейешле һүҙҙәреңде һөйләйһең, тип аптырай торғайным. Әммә быны мин эшләй башлағас ҡына аңланым. Ғәҙәттә, спектакль алдынан мин 15-20 минут бер кем менән дә һөйләшмәй, яңғыҙым ғына үҙ-үҙемә бикләнеп ултырып алам, образыма инәм.

Артислыҡ ҡанға һеңеп китәләр инде ул. Ауылға ҡайтһаң, ағайҙарым, еңгәйҙәрем, башланы инде был артист үҙенең шаяртыуҙарын, тиҙәр. Мине хәҙер хатта әсәйем дә әрләй алмай, саҡ ҡына һүҙ әйтә башлаһа, мин уны шаярыуға борам да ҡуям, ахыр сиктә, ҡул ғына һелтәп ҡуя. Асығыраҡ итеп әйткәндә, мине үпкәләтеп булмай. Хатта быны образыңды ҡабатлау тип тә әйтеп булмайҙыр, бары тик тормошто ябайлаштырырға, йәнләндерергә, күңелләрәк итергә тырышыуҙандыр.

### Йәштәр тамашаларға йөрөмәй

Бөгөн мине аптыратҡаны шул: йәштәр тамашаларға йөрөмәй. Беҙ ҡайһы саҡта ауылдарҙа концерттар менән дә сығыш яһайбыҙ. Быны шулай гастролдәргә сыҡһаҡ, Альберт ағай Шаһиев шаршау ситенән ҡарай ҙа: "Белмәйем, егеттәр, минең тамашасым килгән былай, быны һеҙҙекеләр күренмәй", - ти. Ул күберәк халыҡ йыйрын йырлағас, залда әбейбабайҙар тулып ултырғанына ҡыуана. Эйе, ысынлап та, йәштәр йөрөмәй бөгөн театрҙарыбыҙға. Йәштәр темаһына ҡоролған, уларҙың проблемаларын яҡтыртҡан спектаклдәр ҙә ҡуйып ҡарайбыҙ, әммә йәштәрҙе тамашаларға бер нисек тә ылыҡтырып булмай. Белмәйем, уларҙы сәнғәткә йәлеп итер өсөн ниндәй саралар күрергә кәрәктер инде? Мәктәптәрҙән, уҡыу йорттарынан йәштәрҙе йыйып алып киләләр ул ҡайһы саҡта, әммә үҙ теләге менән йөрөмәгәс, уларҙы көсләп алып килеүҙән ни фәтүә? Ә элегерәк бит ауылдарға спектаклдәр килһә, халыҡ эркелешеп бара ине, хатта беҙ, бала-саға ла, ултырғыстар тотоп, алғы рәткә барып ултыра инек. Өфөнән киләләр, зал шығырым тула ине. Ә хәҙер халыҡ бушҡа ла йөрөмәй - шуныһы аптырата. Телевизорға ныҡ әүрәп киттеләр, ахрыһы. Ә Стәрлетамаҡ халҡы спектаклдәр ярата, Аллаға шөкөр, буш залдарға сығыш яһамайбыҙ.

### Бар хәстәрем - ҡыҙҙарым

Бөгөн шул тиклем ҡурҡыныс тормошта йәшәйбеҙ, үҫеп килгән ике ҡыҙым өсөн йән атам. Береһе - беренселә, икенсеһе икенсе класта ғына уҡыйҙар, ә уларҙы ҡалала аҙым һайын тиерлек һынауҙар көтөп кенә тора. Кешеләрҙең мәҙәнилеге түбәнәйҙе, әхлаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек һәр урында үҙенең сирен йоҡторорға әҙер генә тора. Шуға ла мин ҡыҙҙарым ҡулдан ысҡынып китмәһен өсөн әле үк ҡаты ғына атай булырға тырышам. Күберәк аңлатыу эше алып барам. Мин уларҙы башҡорт мөхитендә тәрбиәләргә тырышам. Башҡорт балалар баҡсаһына йөрөнөләр, әле башҡорт мәктәбендә белем алалар. Ауылда балаларҙың "папа", "мама" тип әйткәндәренә иҫем китә. Белемдәре булһа, русса уҡымаһалар ҙа, балалар шәхес булып китәсәк, тип ышанам, иң мөһиме, милли рухтарын юғалтмаһындар.

**Шулай итеп...**

**Илфирҙың сәхнә ижадының әле яңы балҡыш алған мәле. Асылыр һәләттәре, сағыу ролдәре, башҡорт театр сәнғәтен танытыр көндәре алдалыр әле йәш актерҙың. Уға ижади уңыштар теләйек.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

Тауыш бир!

# БАШҠОРТ БАЛЫ

## Прополис

Бал ҡортоноң һәр ниғмәте лә шифалы. Бәлки, шуға ла халҡым умартасылыҡ шөғөлөн яҡын күргәндер, үҙ иткәндер. Боронғо ғәрәп табибы һәм философы Ибн Сина "Табиплыҡ ҡануны гилеме"ндә яҙыуынса, ҡанатлы эшһөйәрҙәр ете шифалы мөғжизә тыуҙыра: бал, балауыҙ, һеркә, ҡорт ағыуы (апитоксин), инә ҡорт һөтө, прополис һәм бал ҡорто торағының хуш еҫе. Ғөмүмән, бөтә дәүерҙәрҙең табиптары һәм философтары тәбиғәттең ошо ғәжәп мөғжизәһе тәндең һәм йәндең сәләмәтлеге өсөн нигеҙ булыуын раҫлай. Рим шағиры Овидий яҙғанса, күп аҡыллы аллаларҙан һәм аҡыллы тәбиғәт рухтарынан бүләк - бал һәм прополис...

Прополис атамаһы сығышы буйынса латин һәм грек терминдарына бәйле. "Про" - ал, алғы, "полис" - нығытма (крепость), ҡала тигәнде аңлата. Башҡорттар прополисты ҡорт елеме, ҡорт ыҫмалаһы, ти. Ул һәр умартасыға яҡшы билдәле. Ҡорттар ошо ыҫмала менән рамдарҙы шыумаҫлыҡ итеп нығыта, умарта ябыуын рамдарға йәбештерә, ярыҡтарҙы, тишек-тошоҡто бөтәштерә, кейәне тарайтып, көнитмештәренә яраҡлаштырып һылай, "прополис балаҫы"нан үтеп йөрөй. Кейәне тарайтыу һалҡындан, дошмандарҙан һаҡланыу, инеү-сығыу урынын тейешле контролдә тотоу өсөн дә кәрәк. Бал ҡорттары умарта эсенән сығарып ташлап булмаған бөжәктәрҙе, кеҫәрткеләрҙе, сысҡандарҙы ла прополис менән көпләп ҡуя, улар иһә боҙолмай, еҫләнмәй, серемәй. Шулай итеп, прополис һаҡланыу сараһы, нығытма һымаҡ, бал ҡорттарын, торлағын үтәләй өргән елдән, һалҡындан, дымлылыҡтан, күгәреүҙән һәм төрлө микробтарҙан һаҡлай. Прополис бактерияларҙы юҡ итеү ҡеүәһенә, көслө антисептик үҙенсәлектәргә эйә. Бәғзе ғалимдар белдереүенсә, прополис ыҫмаланан, елемле матдәләрҙән, майҙарҙан, һеркәнән һәм балауыҙҙан тора.

Бал ҡорттары прополисты ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙың ҡабыҡтарынан, ылыҫтарынан, бөрөләренән һәм ыҫмалалы матдәләр бүлеп сығарған үҫемлектәрҙән йыя. Урманда урынлашҡан умарталыҡтарҙа, яландағы умарталыҡтарға ҡарағанда прополис күберәк була. Бал килеме мәлендә бал ҡорттары ғәмәлдә һут ташыу менән мәшғүл. Прополис бал килеменән алда һәм унан һуң йыйыла. Прополисты бөтә күс түгел, бәғзе ҡорттар ғына йыя, тигән фекер ҙә бар. Умартала прополис миҡдары унын ҡайҙа урынлашыуына ла, ҡорттарҙың тоҡомона ла бәйле. Бал ҡорттарының ҡайһы бер тоҡомо прополисты күберәк, икенселәре аҙыраҡ, һәр умарта йөҙ-өс йөҙ грамм прополис йыя. Умартаның йышылған һәм шымартылған урындарында прополис аҙыраҡ, ҡытыршы урындарында күберәк. Ун биш градус температурала ул ҡаты торошта һәм ыуалыусан, бынан юғарыраҡ температурала, эҫелә йомшара, ҡулға һылашып тора. Ниндәй үҫемлектәрҙән йыйылыуына ҡарап, ҡорт елеме һарғылт һоро, ҡуңғырт йәшел төҫтә булыуы ихтимал. Таҙа прополис таралып тормай, һағыҙ һымаҡ, балауыҙҙан тығыҙыраҡ, һыуҙа бата һәм иремәй, спиртта өлөшләтә, ә эфирҙа һәм хлороформда еңел ирей.

Прополистың дауалау үҙенсәлектәрен беҙҙең эраға тиклем бер нисә мең йыл элек үк Боронғо Мысырҙа мәжүсиҙәр, имселәр, фирғәүендәрҙең мәйеттәрен мумиялаштырыусылар яҡшы белгән. Изге бал ҡортоноң серле матдәһе тураһында белешмәләр грек, рим, ғәрәп философтарының һәм табиптарының хеҙмәттәрендә лә сағылып ҡалған. Грузин халыҡ медицинаһында, дауалау китаптарында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡланған. Ауыҙ ҡыуышлығы, теш боҙолғанда прополис ҡулланғандар. Яңы тыуған баланың кендеген киҫкәс, уның йәймәһен һылағандар, балалар уйынсыҡтарына иретмәһен һөрткәндәр. Ҡан төкөргәндә шундай им тәҡдим ителгән: "Булавка башы ҙурлығындағы прополис ал да өс көн рәттән иртән һәм кис өсәр бөртөк йот". Ревматизм булғанда, һыуыҡ тейгәндә, бәшмәк ауырыуҙарынан аяҡ боҙолғанда ауыртҡан урындарға, һытҡыға, шешектәргә йоҡа ғына прополис йәймәһе һалып, ғәҙәттә, төнгөләккә урап, бәйләп ҡуйғандар. Ғөмүмән, әүәл-әүәлдән прополис антисептик һәм яраларҙы тиҙ уңалтыусы матдә иҫәпләнгән. Антибиотик үҙенсәлектәрен белеп, яу, һуғыш ваҡытында прополис төнәтмәһен һәм майын операциялар эшләгәндә, йәрәхәттәрҙе бөтәштереүҙә, туҡымаларҙы тергеҙеүҙә ҡулланғандар. Прополислы бәйләүес гангренанан ҡотҡарған. Киҫелгән, һуғылған, бешкән, эренләгән урындарҙы прополис һөртөп бәйләгәндәр, сөйәлдәрҙе, һытҡыларҙы бөтөргәндәр. Шуға ла прополистың хаҡы балдан да ҡиммәтерәк булған. Дауалау алымдары ил-йортта сер итеп тотолған, нәҫелдән-нәҫелгә бирелгән, халыҡ медицинаһында киңерәк ҡулланыш алған.

Бөтә Рәсәй Горький бешеү үҙәгендә тәне нык бешкән ауырыуҙарҙы дауалауҙа, бик ауыр йәрәхәттәрҙе ҡыҫҡа ваҡытта уңалтыуҙа ун биш процентлы прополис майы файҙаланыла. Ул үҫемлек, мал майында, йәиһә аҡ майҙа әҙерләнә. Ҡайнау торошона еткерелгән, мәгәр ҡайнамаған майға ваҡланған таҙа прополис (100 грамм майға 15 грамм прополис) ҡушыла һәм ирегәнсе балғалаҡ менән болғап торола, шунан марля аша һөҙөлә. Бер нисә ҡат марляға буялған прополис майы бешкән урынға һалынып, бер-ике тәүлеккә бәйләп ҡуйыла. Бәйләүес яраға йәбешмәй һәм уны алғанда тән туҡымаһын боҙмай, ауыртырмай.

Горький ғилми-тикшеренеү тире-венерологик институтында эренләткес трихофития, сәс ҡойолоу, пеләшләнеү, пиодермия, тире туберкулезы, сөсө (волчанка), зарарлы бәшмәк ауырыуҙарын прополис менән дауалайҙар. Баштың сәсле өлөшөндә трихофитияны дауалауҙа илле процентлы прополис майы ыңғай һөҙөмтәләр биргән. Клиник тәжрибәләр күрһәтеүенсә, сираҡтағы хроник яҙваны егерме-утыҙ процентлы прополис һығымсаһы менән бәйләгәндә тиресәлә яңы күҙәнәктәр, тоташтырғыс туҡымалар йәһәтерәк барлыҡҡа килгән.

Сит илдәрҙә, мәҫәлән, Чехословакияла прополис хирургияла ауыр һәм оҙаҡ уңалған яраларҙы имләүҙә уңышлы ҡулланыла. Унутыҙ процентлы прополис майы йәрәхәттәрҙең һыҙлауын кәметә, ит үреүен тиҙләтә, тән туҡымаһын тергеҙә һәм ҡәҙимге препараттар менән сағыштырғанда, дауалау ваҡытын ике тапҡырға кәметә, бактериялар менән зарарланған яраларҙы ла күпкә тиҙерәк уңалта. Бала сағында улымдың беләге боҙолоп, сей яраға әйләнгәйне. Эренле яраға прополис майы буяп, марля менән бәйләп ҡуйҙым. Ике көндән һуң бәйләүесте сисһәм, йәрәхәттең эҙе лә ҡалмаған.

Псориаздан ыҙалаған сирлеләргә башланғыс стадияла ике-өс ай буйы составында прополис булған таблеткалар бирәләр. Дауалау ваҡытында ҡанда липидтар кимәле кәмей. Күптәр һауыға, башҡаларҙың хәле һиҙелерлек яҡшыра.

Медицинала билдәле булыуынса, күп күләмдә антибиотиктар ҡабул итеү кеше организмына кәрәкмәгән йоғонто ла яһай. Шуға ла үпкә туберкулезы, пневмония, бронхит кеүек сирҙәрҙе прополис майы, һығымсаһы, уның спирттағы төнәтмәһе менән имләү хәйерле. Үпкә туберкулезының аҙған формаларын дауалауҙа ла прополис файҙалы. Сирҙең нығылығына, ауырлығына бәйле, дауалау дүрт айҙан ун айға тиклем һәм унан да оҙағыраҡ дауам итеүе мөмкин. Прополис препараттары һәм бактерияларға ҡаршы препараттар менән комплекслы дауалау тәжрибәһе лә бар. Ун биш процентлы прополис майын йәиһә спирттағы егерме процентлы төнәтмәһен ауырыуҙарға көнөнә өс тапҡыр туҡланырҙан бер сәғәт алда бирәләр. Һөҙөмтәлә температура, РОЭ төшә, йүткереү, ҡаҡырыҡ бүленеү, күкрәктә ауыртыу, ҡан төкөрөү туҡтай, дөйөм хәл яҡшыра, аппетит тыуа, йоҡо нормалләшә.

Туберкулезды һәм үпкә шештәрен дауалауҙа Башҡортостандағы "Прополис" йәмғиәте түбәндәге дауалау курсын тәҡдим итә: "Аҡ майҙағы ун-утыҙ процентлы прополис майын ашағанға хәтле бер сәғәт, бер сәғәт ярым алда көнөнә ике-өс мәртәбә йылы һөт менән бер балғалаҡ ҡабул итергә. Туберкулезды тулы дауалау курсы - алты ай самаһы. Һәр курстан һуң туҡталып тороу ваҡыты - ике-өс аҙна. Дауалауҙың беренсе курсында - ун процентлы, икенсе курсында - ун биш, өсөнсө курсында - егерме, дүртенсе курсында - егерме биш, бишенсе курсында - утыҙ процентлы прополис майы ҡулланыла".

Хәҙер үпкә туберкулезы, пневмония, бронхит, эндобронхит, лимфатик төйөрҙәрҙең, бөйөрҙөң шешеүе менән ауырыусыларҙы дауалауҙа прополистың әһәмиәтен табиптар ҙа таный. Шешеүгә ҡаршы, анестетик, йәнә гормональ һәм иммунитет һаҡлағыс эффектҡа эйә прополис тын юлы ауырыуҙарынан, бронх астмаһынан арыныуға ыңғай йоғонто яһай, сирҙең йыш ҡиҫкенләшеүенә юл ҡуймай, организмдың ҡөҙрәтен

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# НИСЕК ЙӨҘ ЙӘШКӘ ЕТЕРГӘ?

**Төрлө тикшеренеүҙәргә ышанһаң, ябай ғына ҡағиҙәләрҙе күҙәтеп йәшәү ғүмерҙе 3-5 йылға оҙайта. Әгәр ҙә был йылдарҙы бергә йыйһаң, йөҙ йәшкә тиклем йәшәргә була. Быға ышанырғамы, юҡмы, әйҙәгеҙ, тикшереп ҡарайыҡ.**

**"Бер минут ҡына көләһең һәм... биш минутҡа оҙағыраҡ йәшәйһең"**

Был уйҙырманы ҡасан, кем уйлап сығарғандыр, уныһы билдәһеҙ. 1 тәмәке ғүмерҙе 15 минутҡа ҡыҫҡарта, тиҙәр, шулай булғас, тәмәке тартҡандан һуң 3 минут көлөп алыу уның зарарын юҡҡа сығара булып сығамы?

Ысынбарлыҡта. Әлбиттә, берәү ҙә сәғәт тотоп, кем күпме көлә һәм был көлөү уға күпме ғүмер өҫтәгәнен иҫәпләп йөрөмәгән. Бындай тикшеренеү үткәреү мөмкин дә түгел, сөнки ғүмер оҙайлығына төрлө факторҙар йоғонто яһай, улар араһынан көлөүҙе генә айырып билдәләү дөрөҫ булмаҫ ине. Шулай ҙа көлөп йәшәү күпкә яҡшыраҡ булыуы менән барығыҙ ҙа килешерһегеҙ, моғайын.

**"40 процентҡа әҙерәк ашаһаң... ғүмерең 1,5 тапҡырға арта"**

Уртаса ғүмер оҙайлығы 70 йәш икән, уға тағы ла 35-те (аслы-туҡлы йәшәү һөҙөмтәһендә йыйылған бонус!) ҡушабыҙ һәм йөҙ йәшлек юбилейҙы нисек итеп үткәреү тураһында уйлана башлайбыҙ. Ә ниңә һуң улай булғас, халҡы туйып етмәгән илдәрҙә оҙаҡ йәшәүселәр һирәк?

Ысынбарлыҡта. Рациондан калориялы аҙыҡ-түлекте алып ташлау ғүмерҙе оҙайта, тигән фекерҙе ғалимдар XX быуаттың 30-сы йылдарында иҫбатлаған. Унда ла тәжрибә сысҡандарҙа, балыҡтарҙа һәм тәлмәрйендәрҙә үткәрелгән. Шулай булғас, нисек һәм күпме ашарға икәнен үҙегеҙ хәл итегеҙ, тик сама тигәнде лә онотмағыҙ.

**"Аҙнаһына 5 тапҡыр 30-ар минут йәйәү йөрөү... 2 йыл ғүмер өҫтәй "**

Әгәр аҙнаһына ете көн 40-ар минут йәйәү йөрөһәң, тағы ла оҙағыраҡ йәшәйһеңме?

Ысынбарлыҡта. Был формула - Гарвард ғалимдары тәжрибәһенең һөҙөмтәһе. Улар бары аҙ хәрәкәтләнеү һәм уның менән бәйле ауырыуҙарҙы булдырмау өсөн һәр кеше өсөн мотлаҡ булған физик йөкләмә күләмен генә иҫәпләп сығарырға теләгән. Тәжрибәлә 72 мең шәфҡәт туташы ҡатнаша. Көнөнә ярты сәғәттән күберәк йәйәү йөрөгәндәрҙә инсульт ҡурҡынысы өс тапҡырға кәмеүе асыҡлана. Һөҙөмтәлә табиптар шундай һығымтаға килә: һаулыҡты нығытыу өсөн көнөнә ярты сәғәттән дә күберәк йәйәү йөрөргә кәрәк.

**"Эшкә ижади ҡараш... ғүмерҙе 6,5 йылға оҙайта"**

Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, "Күңел һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай". Етмәһә, ижади ҡарашлы кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана.

Ысынбарлыҡта. Тикшеренеү социологик формала, телефон аша ғына үткәрелә. Ғалимдар яуап биреүселәрҙән ҡайҙа эшләүен, күпме эш хаҡы алыуын, эше менән ҡәнәғәтме, түгелме икәнен һәм үҙен эш урынында нисек тойоуын һорай. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы (ә ижади түгел) мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йәиһә уйлау талап ителмәгән ерҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тойған, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ булған. Улар араһындағы уртаса айырма (ә өҫтәмә ғүмер оҙайлығы түгел) 6,5 йәш тәшкил иткән.

**"Көнөнә 4-5 сынаяҡ мате эсһәгеҙ... йөрәгегеҙ мәңге йәш булыр"**

Мате, икенсе төрлө әйткәндә, Парагвай сәйе йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмау өсөн яҡшы сара, тип иҫәпләй бер төркөм Аргентина ғалимдары. Уның тураһында бөтә мәғлүмәттәрҙе йыйһаң, шундай һығымтаға киләһең: фармацевтик сәнәғәтте ябып, дарыуханаларҙа тик матены ғына һатырға кәрәк, сөнки ул бөтә ауырыуҙарҙан дауалай ала.

Ысынбарлыҡта. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр тураһында мәғлүмәттәр эҙләү бер ниндәй һөҙөмтәгә лә килтермәне. Ул, бәлки, ысынлап та үткәрелгәндер, әммә бер медицина журналы ла был турала мәғлүмәт биреү кәрәк, тип тапмаған, күрәһең.

Ә матеға килгәндә, уның составында булған полифенол күҙәнәктәрҙе тарҡалыуҙан һаҡлай, тип һанала. Әммә был матдә сәйҙең башҡа төрҙәрендә, шулай уҡ ҡәһүәлә, шарапта һәм һуттарҙа ла бар.

**Шулай итеп...**

**Ғүмер - математик мәсьәлә түгел, уны ябай ҡушыу һәм алыу ғәмәлдәре менән генә оҙайтып булмай.**

**Оҙаҡ йәшәйем, тиһәң, ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа кәрәк, бының менән бар ғалимдар ҙа килешә. Ғүмерҙең һәр миҙгеле үҙенсә матур, шуға ниндәйҙер "мода"лы рецепттар артынан ҡыумағыҙ, Хоҙай тарафынан бирелгән ғүмерҙе ҡыҫҡартыусы ғәҙәттәрҙән баш тартығыҙ. Табиптарға йыш күренеп тороу ҙа күп сирҙәрҙе ваҡытында дауаларға мөмкинлек биргәнен онотorға ярамай. Дөрөҫ туҡланыу, физик әүҙемлек, яҡшы кәйеф һәм йоҡо сәләмәтлекте нығыта, тимәк, ғүмерҙе лә оҙайта.**

арттыра. Ете-һигеҙ йәшлек ҡыҙ бала бронх астмаһынан, тын бөтөү өйәнәктәренән ыҙалай. Төрлө дарыуҙарҙың, дауаханала ятыуҙың файҙаһы теймәгәс, уға тәнәфес яһайяһай йыл буйына прополис майы һәм өс-биш грамм прополисты һағыҙ итеп сәйнәргә бирәләр. Бронх астмаһы бөтә, ҡыҙ бала йүгерә, саңғыла йөрөй башлай. Тамаҡ, аңҡау шешеүе менән билдәләнгән ангинаның теләһә ниндәй стадияһында ла иң тәьҫирле сара - ҡорт һағыҙы. Ашағандан һуң ике борсаҡ ҙурлығындай прополисты таралғансы яй ғына сәйнәргә, төнгөләккә тешкә һылаштырып ҡуйырға кәрәк. Мәгәр яҡшы сифатлы прополис ҡына ыңғай һөҙөмтә биреүен оноторға ярамай. Тын юлдарын дауалағанда прополис иретмәһе менән ингаляция ла яһайҙар.

Дисбактериоз эҙемтәһендә ауыҙ ҡыуышлығында, аңҡауҙа, телдә, яңаҡтарҙа монилиаз хасил булып, кеше аҙыҡ ҡаба алмай, ауыҙҙан, танауҙан һыулы һәм ҡанлы бүлендектәр бүленә. Айырыуса бәпестәр, бала-сағалар ныҡ ыҙалай. Бәпестәр тиҙ ярһый, имә алмай, илай. Прополистың спирттағы утыҙ процентлы төнәтмәһенә һыу һәм бал ҡушып, имгәнгә тиклем ярты сәғәт элек көнөнә өс таптыр өс-биш көн ҡаптыралар. Бәпестәр тынyслана, имә, һәйбәт йоҡлай.

Йоҡолоҡ тиресәһе шешкәндә, йәғни хроник фарингит ыҙалатҡанда утыҙ процентлы прополис төнәтмәһенә глицерин, йәиһә персик майы ҡушып ун-ун биш көн ауыҙ, танау ҡыуышлығына һөртәләр. Тештәр, теш ите боҙолоуҙан, насар еҫ аңҡыманың өсөн ауыҙ ҡыуышлығын прополис шыйыҡсаһы аэрозоле менән дә һуғаралар. Тымау тейгәндә һыу ҡушылған спиртлы прополис төнәтмәһен мамыҡ тампонына һеңдереп, танау тишектәренә тығалар.

Ғөмүмән, ауыҙ ҡыуышлығы боҙолоу һәм шешеү нык таралған сир. Ҡәҙимге медикаменттар һәм препараттар йыш ҡына теләгән терапевтик һөҙөмтә бирмәй. Был осраҡта прополистың эфирспирт ҡушылдығы яҡшы. Пародонтоз, стоматит, теш һурғандан һуң альвеолит шештәрен дауалағанда прополис препараттары иң йоғонтоло сара.

Урта ҡолаҡ шешкәндә, эренләп һыҙлағанда, насар ишеткәндә прополистың етмеш градуслы спирттағы утыҙ процентлы иретмәһен марля тампонына һеңдереп, ҡолаҡ пәрҙәһенә ҡуялар, йәиһә ҡыуышлыкты төнәтмә менән унун биш көн йыуҙырталар. Аптекаларҙа Таллинда әҙерләнгән прополислы махсус ҡолаҡ тампондары һатыла. Икебиш процентлы прополислы офтальмик иретмә, биш-ун процентлы прополис майы күҙ йөрәтләнгәндә һәм янғанда, күҙ алмаһының алғы полюсы вирустар һәм микробтар әләгеп шешкәндә нык килешә.

Хроник гастрит, ашҡаҙанда һәм бөйән эсәгендә сей яра (язва) булғанда, ярты балғалаҡ прополис төнәтмәһенә ҡайнаған һөт, йәиһә һыу ҡушып, көнөнә өс тапҡыр ун һигеҙ-егерме көн эсәләр. Хроник колит (йыуан эсәк тиресәһе шешеү), хроник простатит менән интеккәндәргә лә прополис яҡшы им. Ашҡа ҡушып бирелгән саф прополис иһә һейҙек ҡыуыҡтарының эшмәкәрлеген нормаллаштыра. Проктологияла спирттағы ун процентлы прополис экстракты, йә иһә майы һеңдерелгән свечалар арт юл, тура эсәк йәрәхәттәрен, геморройҙы уңалта.

Ҡатын-ҡыҙ енесе ағзалары еңсә (влагалище), инәлек муйынтығы (шейка матки) патоген бактерияларҙан, инфекцияларҙан, трихомониаздан шешкәндә, эрозия күҙәтелгәндә прополистың спирттағы өс процентлы иретмәһе, һығымса буялған махсус свечалар ете-ун көн эсендә шешеү процесын бөтөрә. Гинекологияла операциянан һуң прополис экстрактын, майын һөртөп ябыу йәрәхәттәрҙе тиҙ уңалта. Ғәҙәттә ун-ун биш тампон ҡулланыла. Климакс синдромы осоронда гинекологтарҙың һынауынса, ун процентлы прополис майын һөртөү енсәнен ҡуҙғыған тиресәһе күҙәнәктәренә, гениталь атрофияның бөтә формаларына тыныслаңдырғыс йоғонто яһай. Спиртлы прополис төнәтмәһе стрептококктарҙы, стафилококктарҙы юҡ итеү ҡеүәһенә лә эйә.

Прополисты ҡулланыу даирәһе киң. Уны ветеринарияла файҙаланалар. Борон байтаҡ илдәрҙә прополистың спирттағы шыйыҡсаһы лак булараҡ юғары баһаланған. Прополис скрипкалар өсөн лак әҙерләүҙә лә ҡулланылған. Бөтә донъяға билдәле Страдивариус тарафынан яһалған данлы скрипкалар бал ҡорттары йыйған прополис арҡаһында үҙенә башҡа илаһи сифаттарға эйә, тигән фараз да бар. Был, һис шикһеҙ, бал ҡорто, был донъяға әҙәм нәҫеленән илле-алтмыш мең йыл әүәл барлыҡҡа килгән бал ҡорто мөғжизәһе!

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы).**

## Конкурс: "Башҡортостандың ете мөғжизәһе"

**"Киске Өфө" гәзите "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тигән конкурс иғлан итте. Ул конкурс "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" иждад берекмәһе менән берлектә алып барыла.**

Конкурс өс этапта үткәреләсәк. Иң тәүҙә (июнь аҙағына тиклем) Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлап сығайыҡ. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны үҙенең дәлилдәре менән яҡлай, тауыш бирә.

Икенсе этап июлдән башлана һәм беренсе этапта тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алынып, артабан уларға тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны -252-39-99, 246-03-24, "Киске Өфө" гәзите сайты - www.kiskeufa.ru, шулай уҡ "Сәләм" иждад берекмәһе телефоны -251-73-91, 251-90-44, "Сәләм" иждад берекмәһе сайты - www. Saljam. ru аша ла атҡарыласаҡ.

Өсөнсө этапта жюри "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында енеүселәрҙе билдәләйәсәк. Еңеүселәр махсус ойошторолған кисәлә хәбәр ителәсәк.

**Шулай итеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Тынысһыҙлыҡ күрһәтеү, тимәк, бер урында ҡалыу

Бер йәш талантлы ҡатын табиб булыу тураһында хыялланған. Кешеләрҙең сәләмәтлеген яҡшыртырға, уларҙы ваҡытынан алда үлемдән ҡотҡарып ҡалырға ярҙам итеү ҡайһылай яҡшы булыр ине, тип уйлаған. Ошо изге хыялын тормошҡа ашырып, яҡшы килем алыуҙы күҙ алдына килтергән.

Әммә аҙаҡ уны борсолоулы уйҙар биләп алған. Ул табиб булып китер өсөн күпме ваҡыт китәсәген уйлап хафаланған. Уны шулай уҡ уҡыу өсөн түләү хаҡы ла борсоған. Ул шул тиклем күп нәмәгә мәшәҡәтләнергә тура киләсәк, тип бошонған. Шулай итеп, теләк менән борсолоуҙары араһында икеләнә торғас, ул медицина мәктәбенә ҡабул итеү имтихандарын тапшыра алмаған. Уның бындай ҡыланышы уңышһыҙлыҡҡа алып килгән: ул тормошондағы иң ҙур маҡсатына өлгәшә алмаған һәм "Тынысһыҙлыҡ - ул ниндәйҙер хәрәкәт башҡарған, әммә бер ҡасан да бер ҡайҙа ла алып килмәгән кресло-бәүелсәк" тигән хәҡиҡәтте үҙ миҫалында раҫлаған.

Бәүелтеү тынысландыра. Ҡурҡҡан баланы йомшаҡ ҡына бәүелтеп тынысландырырға мөмкин. Физик травма кисергән кеше лә бер аҙ һыҙланыуын баҫыр өсөн әкрен генә сайҡалып йөрөүсән. Бәүелеү тәндә генә түгел, рухты ла тынысландыра ала. Мәсәлән, дингеҙ тулҡындарының күтәрелеүен һәм ҡайтыуын күҙәтеү, уның ритмлы шауын тыңлау. Әммә бәүелтеү беҙҙе ҡайҙа торғанбыҙ, шул урында ҡалдыра. Ул беҙҙе алға этәрмәй. Ниндәйҙер мәғәнәлә тынысһыҙланыу - ул шулай уҡ бәүелтеүгә тиң. Тынғыһыҙлыҡ беҙҙең өсөн ғәҙәти хәлгә әүерелеүе ихтимал һәм беҙ үҙебеҙҙе, йәнәһе лә, тегә йәки был проблеманы хәл итеү юлында икән, тип уйлап башлайбыҙ. Ә инде тынысһыҙлыҡ ғәҙәткә әйләнгәс, беҙ уны туранан-тура һайлауыбыҙҙы аңлап та еткермәйбеҙ, ул үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә.

Борсолоу уңайлы һәм ғәҙәти булһа ла, кресло-бәүелсәк кеүек, ул бер ваҡытта ла беҙҙе алға этәрмәй. Ул бер ниндәй ҙә ҡаҙаныштарға булышлыҡ итмәй һәм беҙ проблеманы ыңғай хәл итеү юлын эҙләү урынына һанаулы ваҡытыбыҙҙы бушҡа ғына әрәм итәбеҙ. Шулай тынғыһыҙланыу ысын кресло-бәүелсәктә ултырып ял итә торған ваҡытты ала, ә был, үҙ сиратында, проблеманы яҡты уй һәм яңы көс менән атҡарырға ярҙам итер ине.

Әгәр ҙә табиб булырға хыялланған был йәш ҡатын ҡабул итеү имтихандарына бүленгән ваҡытты борсолоуҙар менән үткәреү урынына ыңғай мөнәсәбәт күрһәтһә, ул, һис шикһеҙ, был хәлдән сығыу өсөн ышанысл ы аҙымдар яһар ине. Мөғайын да, ул үҙе һайлаған медицина мәктәбенә лә уҡырға ингән булыр ине.

Хафаланыу креслоһында бәүелеүҙе туҡтатыу һәм был энергияны ҡарар ҡабул итеү өсөн ҡулланыу йәки әһәмиәте булыу-булмауына ҡарамаҫтан, ниндәй ҙә булһа аҙым яһау үҙгәреште көйләү юлдарының береһе булып тора. Әлбиттә, кәрәкле осраҡта ултырып ял итеп алырға ла мөмкин. Әммә унан һуң торорға һәм ҡеүәтле һәм ышаныслы аҙымдар менән алға атларға кәрәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Балаңа мираҫ итеп үлемһеҙлек бүләк ит

Фильм бөткәс, тамашасылар таралышып бөттө, беҙ Джулиан менән буш залда икәүҙән-икәү тороп ҡалдыҡ.

- Инстинктив рәүештә реализмға ынтылған кешелек һәр ваҡыт был донъяны үҙенең героизмын күрһәтер театр һымаҡ ҡабул итте, - тип әйтеп ҡуйҙы Джулиан егерменсе быуат башында йәшәүсе билдәле психолог Уильям Джеймстың һүҙҙәрен килтереп. - Һине был иҫке кинотеатрға алып килеүемдең сәбәбе - ҡалабыҙҙа кешеләрҙең ысын героизмдың нимә икәнен онота барыуҙарында.

Һинең тормошоң да, Кэтрин, героик күренештәр барған театр ул. Тормошобоҙҙоң артабанғы йылдары мәрхәмәтлек, лидерлыҡ һәм яҡшылыҡ күрһәтеү өсөн сәхнә булып торорға тейеш, - тип тағы ла тулҡынланыбыраҡ һөйләне Джулиан.

- Миҫалға Осеола Маккарти тормошон ал, - тип һүҙен дауам итте ул. - Нисек тә булһа осто-осҡа ялғар өсөн был ҡатын кешеләрҙең быcраҡ керҙәрен йыуа. Үҙенең кескәй генә өйөндә йәшәгәндә уны бер кем дә белмәй. Әммә көн һайын үҙенең бәләкәй генә килеменән изге маҡсат өсөн өлөш сығарып, был донъяны үҙе менән күркәмләй. Уйлап ҡара, был ҡатын үҙенән һуң ниндәй зиннәтле мираҫ ҡалдырған!

- Беҙгә лә, моғайын, үҙеңдән һуң бындай мираҫ ҡалдырыу өсөн уның һымаҡ йәшәү ҡамасауламаҫ ине, - тип шым ғына әйтеп ҡуйҙым мин.

- Әлбиттә. Беләһеңме, аҡыл эйәләре миңә һәр кеше үҙ тормошонда ниндәйҙер үҙенсәлекле аҙым эшләүгә алдан "программалаштырылған" була тигәйне. Үҙебеҙҙең тәғәйенләнешебеҙҙе үтәп, беҙ кешеләр йөрәгендә йәшәүебеҙҙе дауам итәбеҙ. Үкенескә ҡаршы, күптәребеҙ ниндәйҙер геройҙарса аҙым эшләп кенә үҙең тураһында яҡшы хәтирә ҡалдырырға мөмкин, тип иҫәпләй. Йәнәһе лә, беҙ шулай үҙебеҙҙең төп тәғәйенләнешебеҙҙе атҡарабыҙ. Әммә тормош беҙҙән быны талап итмәй. Был ерҙә эҙ ҡалдырыу өсөн беҙгә бары тик тырышлыҡ һәм намыҫ менән көндәлек бәләкәй генә батырлыҡтар атҡарып торорға кәрәк. Һин ошо турала хәстәрлек күр, ә һинең мираҫың үҙен үҙе хәстәрләйәсәк.

- Осеола Маккарти ла көн һайын бәләкәй генә, тәү ҡарауға һиҙелмәслек, батырлыҡтар эшләй. Һөҙөмтәлә, был тиндәрҙән йыйылған һаҡлыҡ аҡсалар тормошоноң ахырында оло мираҫҡа әүерелә. Шулай бит? - тип һораным мин.

- Тап шулай, - тип яуап бирҙе Джулиан. - Бәләкәй генә эшенде лә оло мөхәббәт менән башҡар, ә дан-шөһрәт һине үҙе табасаҡ. Ғаилә лидерлығының бишенсе һәм һуңғы һабағының мәғәнәһе бына ошонда һалынған да инде: балаңа мираҫҡа үлемһеҙлек бүләк ит.

- Ух, һин аны! Ҡайһылай шәп әйтелгән! - тип ҡысҡырып ебәрҙем мин бер үк ваҡытта һоҡланыу һәм үкенеү тойғоһо кисереп. Был Джулиан миңә һөйләйәсәк һуңғы һабаҡ ине.

**Робин ШАРМА.**

**(Дауамы бар).**

*✓"Әбей ҡолаған" ҡаянан төньяҡҡа тау һырты менән барһаң, диаметры аршинға яҡын ҡоҙоҡҡа тап булаһың. Уны ерле халыҡ "Ер кендеге" тип атап йөрөтә.*



*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# МОРАҘЫМ МӘМЕРЙӘЛӘРЕ



**Күгәрсен районы үҙенең һоҡланғыс тәбиғәте менән бында күптән йәшәгәндәрҙе лә, килгән-киткәнде лә хайран ҡалдыра. Райондың көньяҡ-көнсығышында, Оло Эйек йылғаһының уң яҡ яры буйында Мораҙым ауылы урынлашҡан. Ауылдан алыҫ түгел, Оло Эйек йылғаһын ҡосағына алып, ҡая ташлы тауҙар һерәйеп тора. Уң яҡ ярҙағы ҡая ташлы тауҙы халыҡ "Әбей ҡолаған" тау, тип атап йөрөтһә, һул яҡ ярҙағыһын "Тәүкәй" тауы, тип атайҙар. Бына ошо тауҙар араһындағы тар ерҙе халыҡ "Мораҙым тарлауығы" тип атаған.**

1998 йылдың 28 ғинуарында Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарары менән "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы, тип иғлан ителде. Уның майҙаны 23 мең 586 гектар, шуның 60 проценты Күгәрсен районына ҡараһа, ҡалған 40 проценты Йылайыр районына инә. Был парктың тәбиғәте ифрат һоҡланғыс. Туристарҙың күпләп килеүе шуға бәйлелер, күрәһең. Ошо иҫ китмәле тәбиғәт паркы 8500 гектарға яҡын майҙанды биләп ята. Уралдағы мәмерйәләрҙең күбеһе ошонда урынлашҡан, тип әйтһәң дә хата булмаҫ. "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы мәмерйәләре эҙбизташтар йыуылыуы һөҙөмтәһендә 900 мең йыл элек девон осоронда барлыҡҡа килгән, ти ғалимдар. Улар шулай уҡ, таш быуат (палеолит), урта таш быуат (мезолит) эпохалары кешеләре мәмерйәләрҙе йәшәү өсөн файҙаланған, тип тә раҫлай. Танылған ғалим Отто Бадер 1960 йылда халыҡ телендә "Нурташ өй" тип йөрөтөлгәненең ауыҙ өлөшөн ҡаҙытып, уникаль асыштарға юлыға.

"Мораҙым тарлауығы" зонаһында тәбиғәт шул тиклем матур. 1960 йылдар аҙағында Германияның Галле округынан утыҙға яҡын турист аҙна тирәһе ошо паркта ял итеп ятты. 1978 йылда ошо урында канаттар буйынса ҡаяға үрмәләүселәрҙең Бөтә Союз слеты уҙғарылды. Бынан тыш, Ҡыпсаҡ ырыуҙарының ҡоролтайы ла ошо "Мораҙым тарлауығы" зонаһында уҙғарылды. Европа илдәренән, Франция, Испаниянан килгән ҡунаҡтарҙың ошо тарлауыҡта булып, һоҡланып ҡайтып китеүе үҙе ни тора! "Мораҙым тарлауығы"нда эреле-ваҡлы 30-ға яҡын мәмерйә бар, тип һөйләй халыҡ. Был урында элек Мораҙым ауылы халҡының йәйләүе булған. Ҡәберлектәр ҙә бар бында.

Уң яҡ һәм һул яҡ ярҙарынан ҡушылған йылғалары менән районыбыҙҙы ҡап уртаға бүлеп, Оло Эйек йылғаһы аға. Ул үҙенең таҙа һыуы һәм үҙәнендә үҫкән ағастары менән күҙҙең яуын алып тора. Уға түбәнге ағымында Әүәмле, Ямашлы,

**Тауыш бир!**

Ҡушйылға, Ыуары йылғалары һыу өҫтәй. Оло Эйек йылғаһына уң яҡ ярҙан ҡушылған Ыуары йылғаһы буйында Мораҙым ауылы урынлашҡан. Шуға ла ерле халыҡ борон-борондан ауылдан көнсығыштараҡ урынлашҡан тауҙарҙағы мәмерйәләргә "Мораҙым мәмерйәләре" тип исем биргән.

Оло Эйек йылғаһының һул яҡ ярында урынлашҡан тауҙар һыртын Абыҙхан һырты тип атаған ата-бабаларыбыҙ. Шул һырттан бәләкәй генә бер йылға көньяҡтан төньяҡҡа Оло Эйеккә табан урғылып аға. Йылғаның түбәнге ағымында ҡая ташлы тау һыу юлын кәртәләй. Нәҡ шул ерҙә йылға һыуы ҡая таш аҫтына сума. Шуға ла бындағы мәмерйәне Һыусумған мәмерйәһе, тип атағандар. Мәмерйәнең ауыҙы тар ғына, көскә бөгөлөп инәһең. Етеҙ һыу ташҡа бәрелеп аҡҡанға, һыу ҡайнағанда быу сыҡҡан кеүек, томан барлыҡҡа килеп тора. Мәмерйә эсендә түшәмдән хайран ҡалырлыҡ боҙбармаҡтар эленеп тора. Халыҡ быны "яра ташы" тип атаһа, мәмерйә белгестәре - спелеологтар уларҙы сталактиттар, иҙәндән үҫкәнен сталагмиттар, тип атай. Мәмерйә эсендәге мөғжизәне тасуирлап яҙыу өсөн һүҙ табып еткерерлек түгел.

**"Киске Өфө" гәзите сайты - www.kiskeufa.ru, телефоны -252-39-99, 246-03-24, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны -251-73-91, 251-90-44, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - www.Saljam.ru .**

Оло Эйек йылғаһының уң яҡ ярында урынлашҡан Нурташ өй мәмерйәһе экскурсияға килгән кешене алыҫтан уҡ саҡырып тора. Танылған ғалим Отто Николаевич Бадер 1960 йылда бик күп һоҡландырғыс әйберҙәр, боронғо хайуан һөйәктәре, таш ҡоралдар, балта таба. 1984 йылда Ырымбур ҡалаһынан килгән белгес-спелеолог Л. Федотов Иҫке Мораҙым мәмерйәһендә кешегә оҡшаш фигуралар таба. Яҡташыбыҙ Әнүәр Ғәлим улы Килсенбаев мәмерйәләрҙе тикшереп, фотоға төшөрөп алған. Ғалимдар фотолағы һүрәттәрҙең йәшен мезалит дәүеренә, йәғни беҙҙең эраға тиклемге XII-VI мең йыллыҡтарға тап килә, тип раҫлай. Һыусумған мәмерйәһе Мораҙым мәмерйәләренең иң оҙоно һанала. Уның оҙонлоғо 1850 метр тәшкил итеүе билдәле. Мәмерйәгә сумған һыу Мораҙым тарлауығына сығып, беренсе кисеүҙең яры буйында һөткә оҡшап, таш ҡая аҫтынан ағып ята. Күрәһең, һыу юлындағы тау тоҡомо һыуға аҡ төҫ өҫтәй. Мәмерйәгә инеүе шаҡтай ауыр, тар ғына коридор. Төпкә ингән һайын, коридор киңәйә бара. Көтмәгәндә "Шайтан күпере"нә килеп терәләһең. Уны халыҡ шулай атаған. Көсхәл менән күперҙе уҙыуың була, "Концерт залы"на юлығаһың. Ул стеналары күркәм эҙбиз таш шпатынан торған иң ҙур зал. Мәмерйә буйлап эскә ингән һайын, һоҡландырғыс күренештәргә тап булаһың: бында таҙа һыулы шишмә ағып ята, гөрләүектәр тауыш сығарып аға.

Бара торғас, эре таш өйөмдәренә юлығаһың, стена буйлап ике яҡлап гөрләүек аға. Алға барған һайын, мәмерйә түшәменең түбәнәйеүе һиҙелә. Түшәмдән ағып төшөп, боҙбармаҡ һымаҡ ҡатҡан эҙбиз ташбармаҡ - сталактиттарға, иҙәндән үҫкән сталагмиттарға юлығаһың. Мәмерйә шул тиклем тарая, был өлөшөн имгәкләп үтергә генә ҡала. Бер ҡарауға, ары барыуы ҡурҡыныс та һымаҡ. Уйламағанда "Таш сәскә" залына юлығаһың. Беҙ уны "Орган" тип атап, фотоға төшөрөп алдыҡ. Мәмерйә ары ла дауам итә, барған һайын тарая, унда бик ҡыйыу спелеологтар ғына үтә ала.

"Әбей ҡолаған" ҡаянан төньяҡҡа тау һырты менән барһаң, диаметры аршинға яҡын ҡоҙоҡҡа тап булаһың. Уны ерле халыҡ "Ер кендеге" тип атап йөрөтә. Беҙ балалар менән бер барғанда ҡоҙоҡҡа таш ташлап ҡараныҡ. Таш, тауыш биреп, ярайһы ғына ваҡыт аралығында төштө. Хәҙер таш ташлауҙы тыйҙылар. Юғиһә, ҡоҙоҡ ҡомартҡы булыуҙан туҡтаясаҡ, таш менән туласаҡ.

Ошондай хозур, һоҡландырғыс, үҙенә саҡырып торған ерҙәр һирәктер ул. Мораҙым тарлауығында Күгәрсендең бик күп уникаль, мөғжизәле тәбиғәт ҡомартҡылары һаҡланып ҡалған. Башҡортостандың ошо мөғжизәһен күҙ ҡараһындай һаҡлап, уны киләсәк быуындарға мираҫ итеп ҡалдырыу хаҡында ла онотмау фарыз беҙгә.

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ.**
**Күгәрсен районы.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

## Үҙе мөғжизәгә тиң төбәк

Башҡортостаныбыҙ борон-борондан үҙенең тәбиғәтенең матурлығы, байлығы менән донъяла дан алған, күп халыҡтарҙа һоҡланыу, шул уҡ ваҡытта көнләшеү тойғоһо уятҡан ил. Мөғжизәләр күп беҙҙә. Әммә Башҡортостандың иң-иң мөғжизәләре исемлегенә ошоларҙы индерер инем:

Серле музыка ҡоралы ҡурай - донъялағы иң боронғо һәм иң ябай музыка ҡоралдарының береһе. Ул тик башҡорттарҙа ғына булыуы менән үҙенсәлекле.

"Урал батыр" эпосы - донъялағы иң боронғо эпостарҙың береһе, үҙенең әһәмиәте менән донъя ғалимдарының, тарихсыларының ҡыҙыҡһыныуын уятҡан.

Шүлгәнташ мәмерйәһе, сөнки ул донъялағы иң үҙенсәлекле, боронғо мәмерйәләрҙең береһе.

Тағы бер мөғжизә тип бары тик Бөрйән районында ғына һаҡланып ҡалған солоҡсолоҡто атар инем. Был боронғо замандарҙан алып беҙҙең көндәргәсә килеп еткән һирәк һөнәрҙәрҙең береһе.

Башҡорт балы - донъяла алтын миҙалдар, грамоталар яулаған, Башҡортостан халҡын данлаған һәм танылыу килтергән үҙенсәлекле шифалы аҙыҡ.

Алтынсы мөғжизәгә мин донъялағы янар тауҙарҙың береһе Янғантауҙы индерер инем.

Етенсе мөғжизәгә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан алыҫ булмаған, Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы Йөрәктау, Ҡуштау, Шахтау һәм Торатау тип аталған шихан тауҙарын атар инем. Сөнки улар үҙенсәлекле составы, матурлығы менән дан тотҡан шулай уҡ донъяла ҡабатланмаған тауҙар.

**Рәил ЯМАЛЕТДИНОВ.**

*КОТЛАЙБЫҘ!*

Учалы районының Ишкен ауылында йәшәүсе ҡәҙерле кешем - өләсәйебеҙ-әзәйебеҙ

**Хәмиҙуллина Нәйрә Сәйфелмөлөк ҡыҙын**



74 йәше тулыуы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Аллаһы Тәғәләнән уға һаулыҡ, оҙон ғүмер һорайбыҙ. Балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең шатланғанын күреп, мең йәшә, әзәй!

Һаулыҡ ҡына бирһен Хоҙай,
Өләсәйем- әзәйем!
Беҙ бит ошо донъяларҙа
Һин генә тип йәшәйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән бөтә балаларың, туғандарың исеменән Өфөлә йәшәүсе ейәнсәрең Гүзәл Бапанина.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

Тамашасыларҙың күп һанлы һорауы буйынса Хәкимйән Зариповтың **"Их, кәләше лә, кәләше!"** пьесаһы буйынса музыкаль комедия яңынан тергеҙелеп, сәхнәгә сыға! Был спектаклде тамашасы **4 һәм 15 июндә** ҡарай ала.

Ни хаҡында һуң был комедия? Ауыл ҡарты Көмөшҡол яңғыҙ ғына йәшәүҙән тамам арып, өйләнергә теләй. Шуға ла ҡалала йәшәгән улдарынан фатиха һорамаҡсы. Ләкин уларҙың ҡайтмаясағын белеп, күрше ҡарты Өмөтҡужаны кәңәшкә саҡыра. Хәйләкәр Өмөтҡужа шундай кәңәш бирә: "Атайығыҙ ауыр хәлдә, тиҙерәк ҡайтып етегеҙ!" - тигән телеграмма ебәрергә кәрәк, ти ул. Һәм шулай итәләр ҙә. Ҡарттың балалары бер-бер артлы ҡайтып төшә. Әммә атай йортона кем ниндәй ниәт менән ҡайтҡан бит, тамашасы уныһын үҙе белер.

Спектакль 19.00 сәғәттә башлана.

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

Театр **22 майҙа** И. Зәйниевтың башҡорт төркөмө ҡуйған "Люстра" спектакле, ә **23 майҙа** Е. Шварцтың рус төркөмө тарафынан сәхнәләштерелгән "Яланғас Король" комедия-фарсы менән үҙ миҙгелен яба. Әммә миҙгел рәсми рәүештә ябылһа ла, ул сәнғәт һөйөүселәрҙе яңы тамашалары менән ҡыуандырасаҡ әле. Шулай итеп, **26 майҙа** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Марат Ҡорбанғәлиевтың юбилей кисәһе булһа, июнь айына балалар өсөн спектаклдәр һәм гастролдәр планлаштырылған.

ПАРАДОКС

# “ҠАЙҘА ҠУЙҺАҒЫҘ ҘА РИЗАМЫН,

## тик башҡорт төйәкләгән ер генә булһын…”

**Буранбай Исҡужиндың тормошо, ижады тотошлайы менән парадокстарҙан торҙо. Ул донъяға Хаҡ Тәғәлә тарафынан ут һәм һыу менән дә, мөхәббәт һәм нәфрәт менән дә, изгелек һәм яуызлыҡ менән дә, барлыҡ һәм юҡлыҡ менән дә, аҡ һәм ҡара менән дә, төн һәм көн менән дә һыналыр өсөн ебәрелгәйне, буғай. Үҙен беләгүрә берсә утҡа, берсә һыуға һалыуҙарын, тырышып-тырмашып ғазаптарға ынтылыуын башҡаса бер нисек тә аңлатып булмаç кеүек. Афған шағиры Сөләймән Лайыҡтың "Ғазаптарым менән ғорурланам", тигән шиғри юлдарын девиз итеп алып үтте, гүйә, Буранбай тормош юлынан. Ғазаптары менән ғорур ине ул. Мулла ҡушҡан Бүребай исеменән баш тартып, халҡыбыҙ тарихының мең ғазаплы Буранбай исемен үҙенә алыуы ла юҡҡа ғына түгел ине. Әллә исемгә есемде тап килтерергә тырышты инде? Әллә - киреһенсәме? Нисек кенә булмаһын, ябай ғына аңлатмаларға һыйҙырып булмаçлыҡ Буранбайҙың тормош һәм ижад юлын. Уның ҡырҡы уңайынан әйтер һүҙҙең нәҡ "Парадокс" рубрикаһында баçылыуы ла осраҡлы түгелдер.**

50 йәше тулыу уңайынан республика гәзитенә биргән интервьюһында Буранбай, һәр ваҡыттағыса, шаярыу ҡатыш һәм үҙенә генә хас кинәйә менән журналистың "Артабанғы йылдарға ниндәй ижади пландар ҡораһығыҙ?" тигән дежур һорауына шундайыраҡ дежур булмаған һүҙҙәре менән яуап биргәйне: "... имен-аман, һап-һау көйө үлеп китергә яҙһын..." Ижадсының был һүҙҙәре юмор менән әйтелһә лә, уларҙың артында оло кинәйә лә ята булыр. Сиргә дусар булып, кемдәндер мәрхәмәт, ярҙам там итеп, өмөт итеп, бахырланып йәшәүгә ҡарағанда, үҙе әйткәнсә, "имен-аман, һап-һау" көйө үлеүҙе артыҡ күргән шағир.

Буранбай шағир, прозаик, драматург, сатирик булараҡ ҡына түгел, һәр йәһәттән дә талантлы булды. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигән әйтем тап уның хаҡында. Ул етмеш төрлө һөнәрҙе лә ижади зауыҡ менән юғары профессиональ кимәлдә башҡара белә ине. Уның һөнәрҙәренең мин белгәндәре генә: гармунсы, ҡурайсы, мандолина сиртеүсе, көрәшсе (уң ҡулын өҙҙөргәнгә тиклем), бейеүсе, рәссам, балта оçтаһы, тегеүсе, ашнаҡсы, баҡсасы, бәшмәксе, натуралист, һ.б. Ҡазаға тарып, уң ҡулһыҙ тороп ҡалғас, уның яңы шарттарға нисек ҡулайлашыуына үҙем шаһит булдым. Ул тиҙ арала һул ҡулы менән яҙырға өйрәнде, почергы ысынъяһау, сәнғәт әçәре кеүек килеп сыға ине. Миндә уның һул ҡулы менән яҙған байтаҡ ҡына хаттары, әҙәби әçәрҙәре һаҡлана. Һул ҡулы усының эсендә ятҡан шырпы ҡабынан бөртөгөн алып шунда уҡ ут ҡабыҙыу тиһеңме, бер ҡул менән генә картуф әрсеү тиһеңме, барлыҡ-барлыҡ ғәмәлдәрҙе лә ул юғары профессиональ кимәлдә башҡара ала ине. "Бары тик күлдәгемдең һул еңе осондағы төймәһен генә элә алмайым...", тип шаяртҡаны әле һаман иçемдә.

Шулай ҡотло ҡуллы, ҡотло юллы ине Буранбай. Һул ҡулы менән генә бешергән аштары ла ашап туйғыһыҙ татлы, ҡылған ғәмәлдәре күркәм затлы булды. Үҙе бер-ике көн генә булһа ла, һин дә мин йөрөп алһа, йөҙөнә, һынһыпатына, ғөмүмән, тормошона ҡот, бәрәкәт ҡунырға әҙер генә тора ине. Үҙен кисә генә "тибендә" йөрөгән кеше тимәçһең. Ап-аҡ күлдәк, галстук, тройка костюм, салбарындағы үтек уғы менән шалҡан турарлыҡ, лаклы туфли, кеçәһендә хушбуй еçе сығып торған тәкләнеп һалынған ҡулъяулыҡ. Үҙенең ҡылғандай шырт сәсе тигеҙ итеп ҡырҡылған, әҙерәк ҡыҙарыңҡырап торған ҡырыç йөҙөндә кинәйәле йылмайыу ғәләмәте. Кисә генә, үҙе әйткәнсә, "аҡса барҙа тиң-тош һыйлайым, тип, трамвайлыҡ та тинһеҙ ҡалһа" ла, бөгөн яңы сүрәткә ингән Буранбайҙың кеçәһендә ҡайҙандыр байтаҡ ҡына аҡса ла барлыҡҡа килә. Холҡонда ла әллә ҡайҙан феодал сифаттары пәйҙә була үҙенең. Феодал, әммә һаран түгел, һуңғы тиненә, һуңғы кейеменә тиклем башҡаларға хеҙмәт итеүсе "феодал".

Уның бына ошондай елле, фыртауай саҡтарының күп тапҡырҙар шаһиты булдым. Шундай даланлы, өлөшлө бәндә булыуы һоҡланырлыҡ та, көнләшерлек тә ине. Әгәр ҙә шул сүрәткә ингән Буранбай бер йыл ғына йөрөһә, ниндәйен шәхескә әйләнерен дә төçмөрләй инем. Әммә ул мин һәм башҡалар күрергә теләгән һәм үҙе өсөн мөмкин булған юлды һайламаны, үҙенең ҡотолғоһоҙ әжәленә йүгерә-атлай барҙы. Уны һаҡларға тырыштыҡ, ҡулдан килгәндең барыһын да эшләп ҡараныҡ, тик саҡ ҡына ситкәрәк китһәк, ул йәһәт кенә кире үҙенең "Буранбай үҙәне"нә төшә һалды. Әллә инде ихтыяры етмәне, әллә үҙе юрамал шулай эшләне, тормош менән "һин" тип һөйләшеп, үҙ яҙмышы менән бик уçал шаярҙы ул. Бер мәл шулай урамда аңҡы-тиңке йөрөгән сағында: "Әйҙә, ағай, беҙҙең ауылға йәшәргә, Буранбай атлы шағир Буранбай ауылында йәшәргә тейеш", - тип, һалпы яғына һалам ҡыçтырып, ауылыма алып ҡайтып, ҡунаҡ



итеп, яңғыҙ йәшәгән бер егеткә лә ҡалдырып киттем үҙен. Оҙаҡ торлаҡламаны Буранбай Буранбайҙа, үҙенең баяғы "Буранбай үҙәне"нә кире төштө. Бер ниндәй рәсми рамкаларҙы, шартлы мөнәсәбәттәрҙе, формализмды үҙһенмәне ул, йәмәғәтселек урынында ла, урманда ла, ҡырҙа ла, шиғриәттә лә, прозала ла, драматургияла ла парадоксаль холоҡло, парадоксаль фекерле шул Буранбай булып ҡалды.

**Әйткәндәй...**

**Вафатынан ике йыл алда ул миңә "Васыят" тип аталған яҙмаһын тапшырҙы. Ҡағыҙ 1999 йылдың 20 мартында яҙылған. Васыят ете пункттан тора, унда миңә ҡағылған юлдар ҙа бар. 1-се пункт шундай һүҙҙәрҙән тора: "Мине үлгәс, ҡайҙа ҡуйһағыҙ ҙа ризамын. Тик башҡорт төйәкләгән ер генә булһын".**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙЛӘНӘ ЛӘ, БЕР ҠОШ...

**Буранбай Исҡужин иçтәлегенә.**

Әйләнә лә, бер ҡош тауыш бирә,
Үҙе алыç, үҙе эргәлә.
Һабантурғай, тиһәң... Әле яҙҙың
Ҡуңыр мәле яҡын-тирәлә.
Әйтсе, ҡошсоҡ, ҡайҙан килеп сыҡтыҡ?
- Яҙ бит бында яңы моронлай.
Өнөң зарлы.
Бер-бер хәбәр бармы?
Әйт тиҙерәк!
Нимә?
Буранбай?!.
Аһ, Буранбай!
Шундуҡ: "Был - ҡош түгел,
Минең йәнем", - тиһәң, ни була?
Юҡһа, уйлағайным: "Ул ниндәй ҡош?
Иртә таңдан уйнай нервыла?"
Баҡтиһәң, ул - һинең йәнең икән...
Бәхилләшер өсөн килдеңме?
Шағирҙарҙың шағиры, тип һине
Һанағанды минең белдеңме?
Һин белмәгән нәмә булды микән,
Даръя ҡошо, ғорур аҡсарлаҡ!
Ә аҡсарлаҡ диңгеҙендә тиңһеҙ,
Ҡоро ерҙә иһә - асарбаҡ.
Аһ, Буранбай!.. Сәсән телле минең,
Бәлки, ҡустым, бәлки, ағайым.
Һине юҡһыныуҙы аңлатырға
Ниндәй генә һүҙҙәр табайым?
Ҡара менән аҡтың сиген үтеү
Килеп еттеме ни һиңә лә?
Һин, Буранбай, унда ныҡ шаярма,
Зәмзәм һыуын ҡалдыр миңә лә...
Әйләнә лә, бер ҡош тауыш бирә,
Үҙе алыç, үҙе эргәлә.
Офоҡ арьяғында әллә бер ҡул,
Әллә яҙғы монар тирбәлә.
Уларҙан да ары - Буранбайҙы
Юғалтыуҙың һары һағышы;
Аҡсарлаҡтың, бер тыңлаһаң, көлгән,
Бер тыңлаһаң, көйгән тауышы...

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҢЫЛЫШЫП...

## кеше үҙ хатаһын башҡаларға тарата

Ҡартлыҡ бәхет була алмай. Ҡартлыҡ - тыныслыҡ һәм бәлә генә була ала. Уны хөрмәт итһәләр, ҡартлыҡ тыныслыҡ кисерә. Онотһалар һәм яңғыҙлыҡта ҡалдырһалар, ул бәләгә әүерелә.

**(В. Сухомлинский).**

Тәбиғәт бер ваҡытта ла хаталанмай: әгәр ҙә ул был донъяға алйотто тыуҙырған икән, тимәк, шулай кәрәк булған.

**(Б.Шоу).**

Кеше яңғыҙы ғына яңылышмай. Яңылышып, ул үҙ хатаһын тирә-яҡтағыларға тарата.

**(Сенека).**

Икейөҙлө - ул ата-әсәһен үлтереп, үҙен етем булараҡ йәлләүҙәрен һораған әҙәм.

**(А. Линкольн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: " Ҡайҙалыр Көнсығышта йәшәгән бер байҙың ун ҡатыны булған. Бай үҙенең ҡатындарын яратҡан, хәстәрләгән, уларҙың һәр теләген, һәр ихтыяжын үтәгән. Ә ҡатындарының барыһы ла үҙҙәренең уçallығы һәм һаранлығы менән дан тотҡан. Улар үҙ-ара пыр туҙып талашыуҙан бушамаған. Ә ирҙәре алдында фәрештә булып ҡыланған, ике йөҙлөләнгән.**

**Бына Көнсығышта ҡоролош алышына. Күп ҡатын менән йәшәгән ирҙәр әхлаҡһыҙ тип иғлан ителә. Әлеге байҙы ла хөкөм итеп, һөргәнгә оҙаталар, ә ҡатындарына ирек бирәләр. Ҡатындар төрлөһө-төрлө яҡҡа таралыша, ҡайһыһылыр яңынан кейәүгә сыға. Ләкин яңы никах уларға бәхет килтермәй. Сөнки гел талашҡа өйрәнгән ҡатындар яңы тормошта ла шул ғәҙәтен ҡуймай. Һөргөндәге ир ҡатындарының, балаларының яҙмышын уйлап, йыш ҡына күҙ йәштәре түгә, ти. Бына шулай сираттағы тапҡыр ҡайғырып ултырғанда бер ҡарт иргә шулай тип мөрәжәғәт итә: "Ниңә бик ҡайғыға ҡалдың әле?" "Ҡатындарымды уйлайым. Мин улар тураһында ҡулдан килгәнсә хәстәрлек күрҙем, барыһын да яраттым. Ә мине шуның өсөн әхлаҡһеҙ тип атанылар. Тимәк, мин хәҙер ожмахҡа эләкмәйәсмен бит инде..." "Юҡҡа ҡайғыраһың, - ти ҡарт. -Мин һинең ғаиләңде нисек яратҡаныңды, хәстәрләгәнеңде яҡшы беләм. Мөхәббәт менән йәшәгән кешенең урыны, әлбиттә, ожмахта. Ә бына ҡатындарың ожмахҡа эләкмәç, сөнки улар һине яратманы, икейөҙлөләнде генә. Мөхәббәтһеҙ йәшәүҙән дә оло гонаһ юҡ". Ошо һүҙҙәрҙән һуң ир кеше ҡатындары өсөн тағы ла нығыраҡ ҡайғырып, илап ебәрҙе, ти. Уның күҙ йәштәре, әлбиттә, уның игелекһеҙ ҡатындарын тамуҡтан һаҡлап алып ҡалды, ти".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираçты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баçылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаçары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6066
Заказ 2048